ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17-23 сентябрь (һарысай) 2016

№38 (716)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ һАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бөтәгеҙҙе лә - воркаутҡа!**

Йәки Өфөнөң Евразия турниксылары үҙгенә әйләнгәне



5-6

**Күрсөк юк ул,**

дөрөҫ булмаған иҡтисади сәйәсәт кенә бар



8-9

**Урап та ғына ҡайтыр ерҙәр ҙә бар,**

Ҡурай ҙа ғына тартыр ирҙәр бар!



11

**Мөнәжәттең моңло сыңы...**

күңелдәрҙе әсир итә



12-13

**ТВ-программа** 14

***Дошмандарың күберәк булыуын теләһәң, дуҫтарыңды бар нәмәлә уҙып кит. Әгәр ҙә дуҫтарың күп булыуын теләһәң, дуҫтарыңа һине уҙып китергә ирек бир.***

***(Ф. Ларошфуко).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Үҙебеҙҙең хоҡуҡтарҙы яҡлай һәм бурыстарыбыҙҙы үтәй беләбеҙме?

***Вәкифа ХӘЙРУЛЛИНА, иҡтисад фәндәре кандидаты, философия фәндәре докторы, БДУ профессоры:*** Дөрөҫөн әйткәндә, халыҡтың күпселеге хоҡуҡтарын да, бурыстарын да тейешле кимәлдә белеп бөтөрмәй, сөнки беҙҙә хоҡуҡи белем нигеҙҙәрен өйрәнеүгә иғтибар биреп еткерелмәй. Был йәмғиәтебеҙҙә ҡайһы бер граждандарҙың сәйәси һәм социаль-иҡтисади хоҡуҡтарын ғына түгел, ә көндәлек тормош-көнкүрешендә йыш осрап торған хәлдәрҙә лә баҙап, үҙен яҡлауһыҙ һәм ярҙамсыһыҙ ҡалыуында бик асыҡ сағыла. Быға яңыраҡ ҡына, ниһайәт, сик ҡуйылған коллекторҙарҙың законға һыйғыһыҙ ҡылыҡтары бик асыҡ дәлил булып торҙо. Кешеләрҙең үҙ хоҡуҡтарын яҡлап, ышаныслы рәүештә ҡаршы тора алмауынан файҙаланып, улар нисек теләй, шулай ҡыланды һәм хатта кеше ғүмеренә янауҙарға тиклем барып етте.

Кеше ошондай хәлдәрҙә үҙ-үҙен яҡлай алырлыҡ кимәлдә хоҡуҡи яҡтан һис юғында хәбәрҙар булырға тейеш. Өлкән һәм урта быуын кешеләре был йәһәттән тормош тәжрибәләренә таяна ала, ә бына йәштәргә мәктәп йылдарынан уҡ хоҡуҡи мәсьәләләрҙе үҙләштерә барыу кәрәк. "Йәмғиәтте өйрәнеү" фәне бөгөн мәктәптә ниндәй кимәлдә уҡытылалыр, әйтә алмайым, ләкин күп нәмәнең уҡытыусыға бәйле булыуында шигем юҡ. Үҙ дәрестәрен тормошҡа бәйләп алып барыу, практик күнекмәләр уҡыусыға күпте бирер ине. Быйыл уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһендә өҫтәмә белем биреү, уның менән шөғөлләнгән уҡытыусыларға түләү мәсьәләһе лә ҡаралды. Өҫтәмә белем биреү программаһына хоҡуҡ фәндәрен уҡытыуҙы ла индергәндә, отор ғына инек шул.

Яңыраҡ үҙебеҙҙең кафедра уҡытыусыһының сәхнәләштереп төҙөлгән асыҡ дәресен ҡарарға тура килде. Төп сюжет ҡулланыусы менән тауар етештереүсенең үҙ-ара мөнәсәбәтенә ҡоролған, йәғни ниндәй юлдар менән ҡулланыусы үҙ ихтыяжына тап килмәгән тауарҙан баш тартып, суд аша уны етештереүсегә кире ҡайтарып биреүгә өлгәшеүе һүрәтләнә. Был асыҡ дәресте ҡарағас, студенттар теманы мәңгелеккә хәтерендә ҡалдырғандыр, тип уйлайым. Ана шундай уҡытыусылар күберәк булһын ине. Тормоштоң төрлө осраҡтарына ҡарата алдан әҙерлекле булыуға өлгәшергә кәрәк. Белем-мәғлүмәт, аҡыл туплау өсөн, бурыстарыңды һәм хоҡуҡтарыңды өйрәнә башлау өсөн тормош ғибрәттәре генә этәргес булмаһын ине, юғиһә.

(Дауамы 2-се биттә).

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ҺӘР ПЕНСИОНЕРҒА...

### биш мең һум

Киләһе йылдың ғинуар айында республикала йәшәгән 1,153 миллион пенсионерға бер тапҡыр компенсация түләү өсөн Башҡортостанға 5,7 миллиард һумдан ашыу аҡса кәрәк буласаҡ. Был хаҡта Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса идараһыһы Фоат Хантимеров хәбәр итте.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, һәр пенсионер, эшләйме-эшләмәйме, ғинуар пенсияһы менән бергә 5 мең һум аҡса аласаҡ. Дөйөм алғанда, илдәге 43 миллион пенсионерға аҡса түләнә. Пенсия фондының матбуғат хеҙмәтендә аңлатыуҙарынса, бындай түләү Рәсәй биләмәһендә даими йәшәгән пенсионерҙар өсөн ҡаралған.

Быйыл илдең Пенсия фонды түләгән пенсияларҙың бөтә төрҙәре 4 процентҡа индексацияланды. Өҫтәүенә, эшләмәгән пенсионерҙарҙың страховка пенсиялары ла индексацияланды.Февраль айында индексациялау һөҙөмтәһендә Башҡортостанда страховка пенсияларының уртаса күләме 12 474 һум тәшкил итте. Йыл башынан пенсия түләү өсөн 117 миллиард һум аҡса йүнәлтелгән. Пенсиялар һәм социаль түләүҙәр ваҡытында һәм тулы күләмдә финанслана, тип билдәләнеләр Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендә. 2017 йылдан пенсия элекке тәртип буйынса индексациялана.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

## ЯУГИРҘАРЫБЫҘҒА - ҺӘЙКӘЛ

**Силәбе ҡалаһында яңы иҫтәлекле урын - башҡорт атлыларына һәйкәл барлыҡҡа килде.**

Һәйкәл 1812 йылғы Ватан һуғышы һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит ил походтарының легендар яугирҙарына арналған. Тарихи хроникаға ярашлы, туғыҙ башҡорт һәм бер мишәр, дүрт Ырымбур казак полктарын ойоштороғанда хәҙерге Силәбе өлкәһе биләмәһенән кеше һәм матди ресурстар файҙаланыла. Һәйкәлдәге яҙыу ошо хаҡта һөйләй.

Проект Силәбе өлкәһе губернаторы Борис Дубровский һәм Башҡортостандың Силәбе өлкәһендәге даими вәкиллеге ярҙамында тормошҡа ашырылған. Һәйкәлде төҙөүҙә һәм ҡуйыуҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, урындағы "Башҡорт ҡоролтайы" йәмәғәт ойошмаһы, "Соцгород" йәмәғәт хәрәкәте, "Люди долга" йәмәғәт берләшмәһе финанс яҡтан ярҙам күрһәткән. Сарала Башҡортостандың "Любизар" хәрби-тарихи клубы ағзалары сығыш яһаны.



12+

**✓ Ә бына тап һайлауға бармай, тауыш бирмәй ҡалған кеше үҙенең тауышы халыҡ мәнфәғәтенә яҡын булған кандидатураның еңеүен тәьмин итерен уйламайынса, өйөндә ултырып ҡала.**



## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# УҢЫШЛЫ БУЛЫУ...

## йәштәрҙең үҙ ҡулында

***Искәндәр СӘЙЕТБАТТАЛОВ, филология фәндәре кандидаты, БДУ-ның өлкән уҡытыусыһы:*** Хәҙерге йәштәр әүҙем, төрлө ситуацияла үҙҙәрен иркен тота белә, кәрәк саҡта фекерен белдерергә лә ҡурҡып тормай. Хатта юғары уҡыу йортонда бер ун йыл элек уҡыған студенттар менән сағыштырғанда ла был айырма ныҡ һиҙелә. Улар күңеленә ятҡан эш менән шөғөлләнер өсөн тормошон ҡырҡа үҙгәртеп тә ебәрә ала, кәрәк икән, эшен, йәшәгән урынын алыштыра һала. Һөнәр һайлағанда яңылышҡандары ла бер юғары уҡыу йортон ташлап, икенсеһенә уҡырға инә лә китә. Әлбиттә, мөмкинлектәр заманында шулай үҙ юлын һайлай алмай йөрөүселәр ҙә булыуы сәйер. Тимәк, улар шул мөмкинлектәрҙе үҙ файҙаһында ҡуллана белмәй. Һәр кем үҙенә оҡшаған шөғөлдө таба алғандай заманда беҙҙең йәштәргә мәғлүмәтлерәк булырға кәрәк. Интернет селтәре бит кеше ҡайҙа булыуына ҡарамаҫтан, үҙенә кәрәкле мәғлүмәтте күп ваҡыт һәм көс түкмәйенсә генә белә алһын өсөн эшләнгән.

Ә инде уҡытыуға килгәндә, хәҙер уның маҡсаты кешегә аныҡ белем биреү түгел, ни бары ниндәйҙер йүнәлеш биреү генә. Йәғни, әгәр кешегә нимәлер кәрәк булһа, ул был өлкәләге белемде үҙенән-үҙе туплай ала. Уҡытыусы уға йүнәлеш биреп, ҡайҙан ниндәй мәғлүмәт алырға мөмкин булыуын күрһәтеп, ярҙамлашып ҡына тора. Шуға күрә, кешенең был тормошта уңыш ҡаҙаныуы, үҙ эшенең профессионалы булыуы, уҡымышлығы - барыһы ла уның ошо бейеклектәргә өлгәшеү теләгенә ҡайтып ҡала. Уҡырға теләмәгән кеше - уҡымай, карьера баҫҡысы буйлап үрләгеһе килмәһә - үрләмәй һәм башҡалар.

Беҙҙең йәштәр араһында яңы бейеклектәр яуларға теләгән кешеләр күбәйә бара, быны ошо көндәрҙә баш ҡалала үткән #UfaForum йәштәр мәғариф форумы миҫалында ла күрҙек. Маҡсатлы һәм үҙаллы уҡырға, яңы технологияларҙы өйрәнергә, заман талаптарына яуап бирергә ашҡынып торғандары хатта 20 йәшкә тиклем дә уңыш ҡаҙанып өлгөргәндәр. Шуға ла мин йәштәргә, күңелегеҙгә ятҡан эш менән шөғөлләнегеҙ, бер ҡасан да икеләнмәгеҙ, үҙ көсөгөҙгә ышанып йәшәгеҙ, тип әйтер инем. Былар барыһы ла уңыш ҡаҙанған, лидер кешенең төп сифаттары булыр.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Үҙебеҙҙең хоҡуҡтарҙы яҡлай һәм бурыстарыбыҙҙы үтәй беләбеҙме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Хәбирйән ТАҺИРОВ, Ҡыйғы район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе:*** Граждандарҙың хоҡуҡтары һәм бурыстары, мәғлүм булыуынса, илебеҙҙең төп законы - РФ Конституцияһында асыҡ әйтеп бирелгән. Йәмғиәттә йәшәп, уның закондарынан азат булыу мөмкин түгел. Ә бына шул йәмғиәтте граждандар өсөн мөмкин тиклем кешелеклерәк, мәрхәмәтлерәк итергә ынтылыш һәр кемебеҙҙең ихтыярына бәйле. Мәҫәлән, һәр кем һайлауҙарҙа әүҙем гражданлыҡ позицияһы күрһәтә ала. Һайлауҙарҙа ҡатнашыу - һәр кемебеҙҙең бурысы икәнлекте, юғиһә, йыш ҡына "онотоп" ебәрәбеҙ, йә булмаһа, ҡул һелтәп кенә ҡуйырға ла ғәҙәтләнеп алдыҡ. Сәбәбен күпселек: "Бер кемгә лә ышанмайым, барыбер бер ни ҙә үҙгәрмәйәсәк", - тип аңлата. Һөҙөмтәлә халыҡ мәнфәғәтен уйлап та бирмәгән кешеләр депутатлыҡҡа үтеп китә. Ә бына тап һайлауға бармай, тауыш бирмәй ҡалған кеше үҙенең тауышы халыҡ мәнфәғәтенә яҡын булған кандидатураның еңеүен тәьмин итерен уйламайынса, өйөндә ултырып ҡала. Шул уҡ ваҡытта ул һөҙөмтәлерәк эшләй алырлыҡ кандидатураларҙы үҙебеҙҙең аранан, үҙебеҙҙең тарафтан депутатлыҡҡа күрһәтеү мөмкинлеге бар икәнен дә уйламай. Шул арҡала ҡайһы бер кандидаттар үҙ-үҙҙәрен депутатлыҡҡа күрһәтеп йөрөргә мәжбүр була. Шуға ла һайлаусылар араһында уларҙың гражданлыҡ бурыстары тураһында аңлатыу алып барырға кәрәк, тигән фекерҙәмен, бигерәк тә йәштәр менән эшләргә кәрәк.

Мәктәптә "Гражданлыҡ нигеҙҙәре" тигән дәрес инергә тейеш, тип уйлайым, шунһыҙ, заманға ярашлы яңы граждандар тәрбиәләү мөмкин дә түгел. Унан һуң бит беҙҙең бурыстар һәм хоҡуҡтарыбыҙ һайлауҙарға барып тауыш биреүҙе генә аңлатмай. Гражданлыҡ теләктәшлегенә килеү юлдары, еребеҙҙе, туған тәбиғәтебеҙҙе һаҡлау, ғаилә ҡороп, сәләмәт балалар тәрбиәләү, өлкәнәйгән ата-әсәңде балаларыңды ҡарағандай хәстәрләү һәм башҡа бурыстарыбыҙ бар икәнен дә онотмай йәшәһәк ине.

***Хөрмә БИКТИМЕРОВА, Баймаҡ районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Аллаһы Тәғәлә беҙҙе был яҡты донъяға бар иткән икән, иңебеҙгә тәғәйен бурыстар ҙа йөкмәткән. Йәғни кеше бер тапҡыр ғына бирелә торған ғүмерендә лайыҡлы тормош ҡороп, ғаиләһен булдырып, иманлы балалар үҫтереп, изге ғәмәлдәре менән донъяны нурлап-матурлап йәшәргә бурыслы. Ошо бурыстарын аңлап, шуны үтәү юлындағылар ниндәйен бәхетле, сауаплы! Хоҡуҡтарыбыҙ ҙа күп беҙҙең. Бөтә әҙәм бер үк төрлө яратылып, бер үк һауаны һулап, бер үк һыуҙы эсһә лә, төрлөбөҙҙө төрлө яҙмыш көтә. Шуныһы ла бар: һәр кемдең яҙмышын үҙе һайларға, бәхетен үҙе сүкергә хоҡуғы бар. Белемгә хоҡуғын файҙаланып, берәүҙәр аң кимәлен, интеллект ҡеүәһен байыта; эшкә хоҡуғын ғәмәлгә ашырып, икенселәр ғүмер буйы баш баҫып, физик хеҙмәт тире түгә; өсөнсө берәүҙәр күрәләтә һәләкәт юлына баҫа - үҙҙәре һайлаған яҙмыш. Үкенескә, был донъяла бурыстарын да, хоҡуҡтарын да һанламаған әҙәмдәр ҙә бар. Эскелек юлына баҫып, ғаиләһен, балаларын тереләй етемлеккә дусар итеүсе бындай иманһыҙҙарға хаҡ юлға баҫырға ярҙам итеү - шулай уҡ һәр беребеҙҙең бурысы, тигән фекерҙәмен. Шуға ла беҙ Ағинәйҙәр ҡорона берләшеп, йәмғиәтебеҙҙе саҡ ҡына булһа ла яҡшыраҡ, йәмлерәк, нурлыраҡ, иманлыраҡ итергә өлөш индерергә ынтылабыҙ икән - был беҙҙең күңел ҡушыуы, гражданлыҡ бурысы. Әлбиттә, иң беренсел бурысыбыҙҙы туған телебеҙгә хоҡуҡтарыбыҙҙы ғәмәлгә ашырыуҙа күрәм мин.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Ҡыуаныслы хәбәребеҙ бар: Рәсәй почтаһы яҙылыу хаҡтарына бер аҙ ташлама яһаны, йәғни хәҙер һеҙ 50665 индекслы гәзитебеҙгә - 485 һум 40 тингә, 50673 индексына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) 515 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ. Сентябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән 10 кеше 2017 йылға "Башҡортса дини календарь", дүрт кеше "Бураҡаевтар ижады", шулай уҡ башҡа китаптарға лайыҡ буласаҡ.**




• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киосҡыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - **258 һум**.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **258 һум**.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

• Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша vipishi.ru сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

• Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика журналистарына наградалар тапшырҙы. "Йәшлек" гәзите редакцияһы директоры, Журналистар берлеге рәйесе Артур Дәүләтбәковҡа "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем бирелде."Вечерняя Уфа" гәзите баш мөхәрриренең беренсе урынбаҫары, танылған журналист Илүзә Ҡапҡаева һәм "Башҡортостан" ТРК ДУП-ның тыуған яҡты өйрәнеү тапшырыуҙары бүлеге мөхәррире Ирина Миңлеғәлиева Башҡортостандың Почет грамотаһы менән билдәләнде.

✓2016 йылда Башҡортостандың юл хужалығы 15 миллиард һум аласаҡ. Күмертау һәм Көйөргәҙе районы халҡы менән осрашыуҙа республика Башлығы Рөстәм Хәмитов: "Башҡортостандың юл хужалығы бер ҡасан да шунса аҡса күрмәне. Беҙ 10-11 миллиард һум кимәлендә эшләнек", - тине. Билдәләнеүенсә, Башҡортостанда юлдарҙың оҙонлоғо - 50 мең километрҙан ашыу, шуларҙың 30-35 проценты ғына нормаға тап килә.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Күмертауға эш сәфәре барышында Маячный ауылында тәүлегенә 1 200 тонна көнбағыш орлоғо эшкәртеү ҡеүәтенә эйә булған май экстракцияһы заводын төҙөү буйынса инвестиция проектын тормошҡа ашырыу барышын тикшерҙе. Әлеге ваҡытта төҙөлөш проектын тормошҡа ашырыуҙың беренсе этабы тамамланған. Икенсе этапта экстракция цехы файҙаланыуға тапшырыла, был предприятиеға проект ҡеүәтенә сығырға мөмкинлек бирә. Төҙөлөш эштәрен 2017 йылда тамамлау күҙаллана.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Благовещен районына эш сәфәре барышында "Рус Игене Өфө" холдингына ингән "Турбаҫлы бройлеры" асыҡ акционерҙар йәмғиәте инкубаторында булды. Заманса бина йылына 800 мең себеш сығарыу ҡеүәтенә эйә булған иҫке инкубаторҙа төҙөлгән. Алдынғы технологиялар көнөнә 100 мең яңы тыуған себеш тәьмин итәсәк, был йылына яҡынса 42 миллион тигән һүҙ. Йәш тауыҡтар "Ашҡаҙар" һәм "Туймазы" ҡошсолоҡ фабрикаларына ебәреләсәк. Йыллыҡ табыш 1 миллиард һумдан ашыу тәшкил итер тип көтөлә.

✓ *Етем ҡалған сабыйҙарҙың, толдарҙың күҙ йәштәренән ҡурҡығыҙ! Улар илаһа, ер-һыу илар, ти халыҡ. Уйланығыҙ! Элек йәштәр ауыл аҡһаҡалдарына кәңәшкә килер булған, әле иһә... хәмер һатып алырға йөрөй.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*



# ЮЛ ҠАҒИҘӘЛӘРЕН БЕЛМӘГӘС...

## ниңә руль артына ултырырға һуң?

**Йәй - юлдарҙың транспорт менән шығырым тулған сағы. Һәр береһе ҡайҙалыр барып ҡалырға, йөрөргә, күрергә ашыға. Юл хәрәкәте, моғайын, был айҙарҙа икеләтә, өсләтә артып китәләр. Быға ярашлы транспорттың юл фажиғәләре лә йышая төшә. Һәм һөйләргә теләгәнем дә шул юл хәлдәре тураһында.**

Минең аңлауымса, руль артында ултырғандарҙың күптәре үҙ хоҡуҡтарын белмәй ҙә, өйрәнмәй ҙә. Ә зерә! Был күнелһеҙ фекергә лә үҙем менән булған хәлдән һуң килдем.

Августың икенсе яртыһы башланып торған көндәрҙә Өфөнән Бөрйәнгә юл алыусы йәштәргә пассажир булып юлға сыҡтым. Ҡараңғы төшкән мәл. Әммә юл "город" кеүек - транспорт гөжләп тора. Инйәрҙе үтеп, ун биш саҡрымдай киткәс, ни ғиллә менәндер алдыбыҙҙан елеп килгән машина ҡапыл тиҙләген ташланы һәм беҙ, туҡтап өлгөрмәй, уға барып та бәрелдек. Бәрелгән ыңғайы ситкә ырғытылдыҡ һәм ике-өс тапҡыр әйләнеп, йырын ситенә ҡырын төшөп ултырҙыҡ. Шаңҡып, иҫәбеҙгә килә алмай аҙапланғансы, кемдәрҙер килеп ишектәрҙе асып ебәрҙе һәм беҙҙе һөйрәп сығарҙылар. Ул арала берәүһе "Мин врач!" тип, муйындарҙы, ҡул-башты тотҡолап ҡараны, хәлде һорашты. Кемдәрҙер һыу бирҙе, икенселәре арҡаға йылы япты. Халыҡ һәйбәт икән ул! Һәр икенсе транспорт туҡтай, ҡайһылары яйлай биреп: "Ярҙам кәрәкме?" - тип ҡысҡыра. Йөк тейәлгән фураларҙан сит милләт вәкилдәре лә төшөп ҡарап китә, дауаханаға алып барайыҡмы, ашарға ҡалдырайыҡмы, тиҙәр. Туҡтамаҫлыҡ та түгел шул, алдыбыҙҙа бер йөк машинаһы, беҙҙән тыш тағы ла ике еңел машина эшләтән сығып ултыра. "Газель" алдынан килгән машина ҡапыл туҡтап, быны, тайшанып, ситтәге ағасҡа төкөргә мәжбүр иткән дә, үҙе ҡасҡан, арттағылар шулай бер-бер артлы килеп бәрелешкән...

Был хәл киске ун бер тулып үткән мәлдәрҙәрәк булды. Шаңҡыуҙан бер аҙ арынғас, һәләкәткә тарыған автомобиль водителдәре, күренеп тора - ауыл егеттәре, ГАИ-ға шылтыратты. Уларҙың һөйләшкәненә ҡолаҡ һалам. Ҡыйыуһыҙ ғына, ғәйеп эшләп тотолған бала кеүек кенә һөйләшәләр һәм телефондың теге осонда ултырған юл хәүефһеҙлеге инспекторына хәлде аңлаталар. Һәм был һөйләшеүҙең аҙағы шул булды: "Бензиның юҡ, Белоретка үҙегеҙ килегеҙ..." Ир-егеттәр аптырашып ҡалды. Инспекторға яңынан шылтыраттылар, хәлдәрен тағы ла ентеклерәк аңлатырға маташтылар. Был юлы яуап шулай булды: "Түләүле ГАИ саҡыртығыҙ..." Төнгә Белорет урманында шулай ике сәғәт самаһы туңып торғас, юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләре буйынса бер нәмә лә аңламаһам да, илай яҙып ГАИ-ға инәлгән егеттең ҡулынан телефонды һорап алып, үҙем һөйләшергә булдым.

- Хәйерле төн, - тим руссалап. Беренсе һүҙҙән үк теге яҡтағының акцентын һиҙҙем һәм башҡортсаға күстем:

- Мин аварияға осраған машинаның пассажиры, әйтегеҙ әле, кем менән һөйләшәм?

Теге яҡ бер аҙ яуапһыҙ торғас, теләкһеҙ генә фамилияһын әйтте.

- Беҙ аварияға осраныҡ һәм ярҙам көтәбеҙ. Һеҙ ниңә бында килеүҙән баш тартаһығыҙ?

- Баш тартмайым - бензин юҡ, - тип яуапланы ла инспектор, һөйләшеүҙе өҙөп тә ҡуйҙы. Ҡабаттан шылтыраттым һәм һуңғы сараға барҙым:

- Мин "Киске Өфө" гәзитенең хәбәрсеһе булам, Белорет районында юл фажиғәһенә осрап, һеҙҙән ярҙам көтәм һәм, әлбиттә, был һөйләшеүҙе диктофонға яҙҙырам. Һеҙҙең яуапты тыңлайым да, ул ыңғай булмаһа, МЧС саҡыртам һәм был хаҡта гәзиткә яҙасаҡмын!

Өнһөҙ генә тыңлағас, инспектор: "Хәҙер шылтыратырмын", - тип, телефонды өҙҙө һәм ун минуттан шылтыратып: "Көтөгөҙ, ярты сәғәттән килеп етәбеҙ", - тине. Беҙ көлөшөп алдыҡ, ҡунаҡҡа киләме ни - "көтөгөҙ" ти бит әле!

Килеп, тейешле эштәрен башҡарып, ҡағыҙҙарын тултырып, беҙҙең машинаны ла тикшереп, хатта бер аҙ оҙата барҙы был ГАИ инспекторҙары. Рәхмәт инде!

Ошо хәлдән һуң, юҡ, ГАИ хеҙмәткәрҙәренең ҡылығы түгел, ә беҙҙең ауыл ир-егеттәренең юл ҡағиҙәләренә ҡағылышлы хоҡуҡтарын белмәүе һәм шул наҙанлыҡ арҡаһында бахыр булышып тороуҙарын күреү күңелемә тәйөр булып ултырҙы. Ебеп төштө улар, әйтерһең, үҙ машиналарын ватмаған, ә кемдеңдер нимәһендер талап алған йәки үлтергән. Ҡурҡыуҙары йөҙҙәренә лә, телдәренә лә сыҡты. Һәм быны тейешле орган хеҙмәткәрҙәре белә, шуның менән файҙалана ла. Шул төндә лә улар йә түләүле хеҙмәт саҡыртырҙар, йә һәр кем үҙ яйы менән ҡалаға барып иҫәпләшергә мәжбүр булыр ине. Ә бит улар әле аварияхан һуң үҙҙәренең психологик һәм физик тороштарын яҡшылап самалай ҙа алмай. Осраҡлы ғына табип ҡарап китте китеүгә, бәлки, уның эстәге бер ағзаһы зарарланғандыр, бәлки, башы нык бәрелгәндер? Ҡалаға барып етәм, тип, юлда вафат булып ҡуйыуы ла ихтимал бит әле.

Ниндәй өлкәлә лә хоҡуҡтарҙы өйрәнеү темаһын күп яҙалар, әммә ауыл кешеһенә былар тәьҫир итмәй, күрәһең. Улар әллә нишләп меҫкен булып ҡалыу юлын һайлай. Был тәңгәлдә руль артындағы ир-егеткә (ҡатын-ҡыҙға ла, әлбиттә) мөрәжәғәт итке килә: асығыҙ интернетты, уҡып сығығыҙ әле хет бер ҡат водитель хоҡуҡтарын. Яҡларға өйрәнегеҙ үҙегеҙҙе!

Ә юл һаҡсылары үпкәләмәһен, мин уларға был мәҡәләне яҙырға "вәғәҙә" иттем.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*АСЫҠ ХАТ*

# АУЫЛДАРҘА ХӘМЕР ҺАТЫУСЫЛАРҒА



**Һаумыһығыҙ, беҙҙең эскесе ирҙәребеҙҙе, улдарыбыҙҙы һәм ейәндәребеҙҙе көтөп, төн йоҡоларығыҙҙы йоҡламай, тәүлектең ҡайһы ваҡытында килһәләр ҙә, әрләмәй, һукранмай, ҡапҡа-ишектәрегеҙҙе йылмайып асыусы араҡы, көмөшкә һатыусылар!**

Беҙ, бер төркөм ҡатын-ҡыҙ, хәмер һаҙлығынан сыға алмағандарҙың әсәләре һәм хәләлдәре, һеҙҙе "Киске Өфө" гәзите аша үҙебеҙҙең шәхси тормошобоҙ һәм тотош ауылыбыҙҙың аяныслы хәле менән таныштырып китергә булдыҡ. Бәлки, аңларһығыҙ. Тәүбәгә килерһегеҙ. Был донъяла һеҙгә байлыктан башҡа бер ни кәрәк түгеллеген күптән аңлағанбыҙ, ысынлап та, эскеселәр килеп торһа, кеҫәгеҙгә аҡса инеп торһа, һеҙгә шул еткән. Беҙҙең ирҙәребеҙ, улдарыбыҙ ише "йәшел йылан" менән дуҫ булыусылар һаны артһа, тағы ла ҡыуанаһығыҙ, ә бына тап һеҙҙең арҡала ауылдың йәше-ҡарты ҡырылыуында эшегеҙ ҙә юҡ.

Ана шул көмөшкә һатып тапҡан аҡсағыҙға балаларығыҙ, ейәндәрегеҙ хан һарайындай йорттар төҙөп бөттө, ҡыйбатлы машиналарҙа елдерә, университеттарҙа уҡый. Шулай булмай ни, беҙҙекеләрҙең эшләп тә, урлап та алған аҡсаларының һәр тиненә саҡлы һеҙҙең кеҫәгә төшә бит. Ерәнмәй тотоноғоҙ, улар беҙҙең күҙ йәштәренә йыуылған иң таҙа аҡсалар! Өйҙәге картуф, май-шәкәрҙе, тукмас-ярмаларҙы ла ҡуш ҡуллап алаһығыҙ. Беҙ ни, ашамай ҙа торабыҙ! Ризыҡ ҡынамы ни, хатта ҡаҙан, кәстрүл, һыу һауыттарына, яҫтыҡ-мендәрҙәргә лә алыштырып бирәһегеҙ ул "йәшел йылан" ағыуын. Эскесегә ни, донъя киң - үҙ өйөндә әйбер бөтһә, кешенекен урлай, буш торған йорттарҙы "таҙарта".

Ауылда йәшәһәгеҙ ҙә, ҡаланан күрмәкселәр, уңайлы шарттар ҙа булдырғанһығыҙ хәмер һөйөүселәр өсөн. "Доставка", йәғни урынға килтереп биреүҙе ойошторғанһығыҙ. Уңайлы бит, 30-50 һумыңды артығыраҡ түләһәң, шешә өҫтәлгә үк килеп ултыра. Залог итеп телефондарын, документтарын алып ҡалаһығыҙ, бала аҡсаһы күскән банк карталары ла һеҙҙең ҡулдарҙа, уларҙың кодтарын күптән ятлап бөткәнһегеҙ инде. Хатта ауылдаштарҙы һуңғы юлға оҙатҡанда бирелгән хәйер аҡсалары ла һеҙгә барып эләгә. Ауылда хәмер һатып ятыусылар булмаһа, уны район үҙәгенә йә ҡалаға барып ала алмаҫтар ине, сөнки унда араҡыны әйбергә алыштырып та, кәтәсәккә лә бирмәйҙәр!

Һеҙ иһә, балалар аҡсаһы йә пенсия килгән көндә эскеселәрҙе емтек тирәләй әйләнеп осҡан ҡарсыға шикелле ҡарауыллайһығыҙ. Ауылыбыҙҙа мәсет тә бар, тик унда йөрөп, аят-доғалар уҡып, йәштәргә аҡыл, өгөт-нәсихәт биреп ултырыр урынға, оло йәштә булһағыҙ ҙа, һеҙ ауылдаштарығыҙҙы "ҡырыу" юлын һайлағанһығыҙ. Ана, уларҙың күпмеһе тап ана шул эскелек арҡаһында баҡыйлыҡҡа күсте. Бында һеҙҙең дә өлөшөгөҙ ҙур, хәмер һатыусылар! Бәхетле тормош көткән ғаиләләр тарҡалды, сабыйҙар етем ҡалды, тотош нигеҙҙәре янып, ҡасандыр тормош гөрләп торған ихаталар урынында ҡоро ер ятып ҡалды. Ниңә интегеп ҡайҙалыр эшләп торорға, айына 30-40 мең аҡса кеҫәгә былай ҙа инеп ята, тип кенә ебәргән һүҙҙәрегеҙ беҙгә лә килеп етә. Яҡындарыбыҙҙы хәмер ҡоллоғонан сығарырға көсөбөҙ етмәй, төшөнкөлөккә бирелгән саҡтарҙа башта бер генә уй әйләнә: әгәр һеҙ булмаһағыҙ, ауылдарҙың хәле нисегерәк булыр ине икән? Моғайын да, тәҙәк, матур донъялар ҙа, бәхетле кешеләр ҙә күберәк булыр, тыуған ауылыбыҙға бөтөү ҡурҡынысы янамаҫ, беҙҙең ейәндәребеҙ, уның олатаһы эсеп үлде, өләсәһе ғүмере буйы араҡы һатты, тигән һүҙ ҙә күтәрмәҫтәр ине.

Кеше рәнйешенән дә ҡурҡмайһығыҙ бит, исмаһам! Беҙҙең күҙ йәштәребеҙ төшмәй ҡалмаҫ! Етем ҡалған сабыйҙарҙың, толдарҙың йәштәренән ҡурҡығыҙ! Улар илаһа, ер-һыу илар, ти халыҡ. Уйланығыҙ! Элек йәштәр ауыл аҡһаҡалдарына кәңәшкә килер булған, әле иһә... хәмер һатып алырға йөрөй. Олоһо тәртипле илдең йәштәре лә аҡыллы булыр, тигән һүҙ бар. Ауылдарҙың киләсәге тик йәштәр ҡулында. Киләсәктә улы ҡайтып, атай тупһаһын тапмаһа, олатай тип әйтерлек кешеһе булмаһа, нисек аяныс буласаҡ! Уйланығыҙ, аҡылығыҙға килегеҙ, милләттең киләсәгенә балта сабып, үлем һатып ятмағыҙ!

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфө бюджет туризмы буйынса тәүге унау иҫәбенә инде. Ҡала хакимиәтендә хәбәр итеүҙәренсә, республиканың баш ҡалаһы йәшәү өсөн тәүлегенә арзан хаҡ алынған тәүге унау рәтендә һуңғы урынды биләне. Уға ҡунаҡханала йәшәү, кафела төшкө аш ашау һәм урындағы музейға барыу инә. Был рейтингты Room-Guru сервисы төҙөгән. Иҫәпләүҙәр буйынса, Өфөлә ял итеү тәүлегенә ике туристҡа 2210 һумға төшә.

✓Конгресс-холда оло йәштәгеләрҙең "Мин яратам һине, тормош!" республика фестивале еңеүселәре сығыш яһаны. Сара Башҡортостандың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы башланғысы буйынса йыл һайын ойоштоорла. Гала-концертта ҡала (район) һәм төбәк һайлап алыу турҙарында еңеүселәр ҡатнашты. Быйыл һайлап алыу туры Стәрлетамаҡ, Миәкә, Янаул, Ғафури, Асҡын, Әбйәлил райондарында һәм Өфөлә уҙҙы. Унда мендән ашыу өлкән быуын вәкиле ҡатнашты.

✓Башҡортостанда алты бер мандатлы һайлау округында 47 кандидат Дәүләт Думаһындағы депутат мандаттары өсөн алышасаҡ, уларҙың барыһын да сәйәси партиялар тәҡдим иткән. Дәүләт Думаһына һайлау ҡатнаш система буйынса уҙғарыла: 225 депутат - партия исемлеге, 225-е бер мандатлы округтар буйынса һайлана. Башҡортостанда Дәүләт Думаһы депутаттарын һайлауға алты бер мандатлы округтар буйынса 50 кандидат теркәлгән. Бер урынға 8-9 кеше дәғүә итә. Парламент һайлауҙарында 14 сәйәси партия ҡатнаша.

✓"Башҡортостан" дәүләт концерт залында Рәсәй Милли филармония оркестрының ғәҙәти булмаған концерты уҙҙы. "Владимир Спиваков саҡыра..." икенсе Халыҡ-ара фестивален Чаплин сәғәте асты. Маэстро етәкселегендәге оркестр 1931 йылда төшөрөлгән "Ҙур ҡаланың уттары" тигән фильм күрһәтте. Владимир Спиваков барлыҡ тыңлаусыларға ла рәхмәт әйтте һәм Өфөлә сығыш яһауына шат булыуын белдерҙе. Музыкант һүҙҙәренсә, "Ҙур ҡаланың уттары" - кеше күңеленә мөрәжәғәт итеү, шәфҡәтле булырға саҡырыу ул.

✓27 сентябрҙә республикала "Театр төнө" уҙа. Яңы миҙгеле алдынан иҙге йолаға әүерелгән осрашыу был юлы ла мәҙәни сараларға бай булмаҡсы. Акцияға Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Сибай һәм Туймазы ҡалаларынан 20-нән ашыу коллектив йәлеп ителгән. Быйыл ойоштороусылар бер нисә тематик маршрут тәҡдим итә. Улар бер кистә бер нисә майҙансыҡта булырға мөмкинлек бирә.

✔ Ҡалала ҙур форматтағы уңайлы автобустар йөрөргә тейеш, был бөтөн донъяла шулай. Шуға ла юлдарҙа тығындар булмаһын өсөн ҙур автобустарға өҫтөнлөк бирәсәкбеҙ.



ИЛ ИҠТИСАДЫ

# БЫНДАЙ ФОРУМДАР...

## ҡаҙнаны ла тулыландыра

**Көнбайыш Рәсәйҙән баш "бороуын" дауам итә. Ләкин донъя тик улар тирәһендә генә әйләнмәй. Рәсәйгә ҡарата ҡулланылған санкциялар исемлеге ҙурайған һайын, беҙҙең ил иҡтисадты үҫтереүҙең, уның тоторoҡлоғон булдырыуҙың төрлө юлдарын эҙләй. Һәм таба. Күптән түгел Владивосток ҡалаһында уҙған II Көнсығыш иҡтисади форумы быны асыҡ миҫалы булып тора. Донъяның иң эре Азия - Тымыҡ океан иҡтисади берләшмәһе менән эшлекле мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү ҮҘенең һөҙөмтәлелеген күрһәтә башланы ла инде.**

Ағымдағы форум Рәсәй менән Япония араһындағы бәйләнештәрҙе нығытыуға тағы ла бер аҙым булды. Беҙҙең ил менән күптән тығыҙ эшмәкәрлек алып барған Ҡытай эшҡыуарҙарынан айырмалы рәүештә, Япония вәкилдәренең күбеһе әлегә Рәсәйҙең бизнес һәм иҡтисад өлкәһендәге ҡылын "тартып" ҡарарға ғына килде, тип әйтергә кәрәк. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, быны Рәсәй иҡтисады өсөн әһәмиәтле әҙемтәләргә килтерәсәк ҙур уңыш, тип ҡарарға мөмкин, сөнки әлегә тиклем Токио Курил утрауҙарын Японияға биргәндән һуң ғына төрлө килешеүҙәр төҙөүгә барасағы тураһында белдереп килде. Владивостоктағы форум иһә, ниһайәт, был ике һорауға яуаптар ике юҫыкта эҙләнәсәген күрһәтте. Японияның эре бизнес-корпорациялары, башлыса, энергетика, һаулыҡ һаҡлау, балыҡсылыҡ тармағында һәм инфраструктураны үҫтереү өлкәһендә хеҙмәттәшлек итеү теләктәрен белдерҙе.

Япония делегацияһы менән эшлекле осрашыуҙарҙа күберәген киләсәкте күҙаллаған һөйләшеүҙәр уҙһа, Ҡытай эшҡыуарҙары менән иһә һүҙ ике ил иҡтисадының бөгөнгөһө тураһында барҙы. Уҙған йылда тауар әйләнеше кәмеһә лә, 2020 йылға ике яҡ та уның күләмен 200 миллиард долларға еткереүҙе күҙ уңында тота.

Корея Республикаһы президенты Пак Кын Хе ла, үҙ сиратында, Көньяҡ Кореяның Рәсәй менән файҙалы хеҙмәттәшлек итергә теләүе хаҡында белдерҙе. Мәҫәлән, ул үҙ сығышында, Сеул Алыҫ Көнсығышта юлдар төҙөүҙә һәм ҡала инфраструктураһын төҙөкләндереүҙә ҡатнашырға мөмкин, тине. Шулай уҡ кореялыларҙа Рәсәйҙең косметика һәм медицина өлкәһе лә оло ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра.

Әйткәндәй, II Көнсығыш иҡтисади форумында 56 илдән 3,5 мең делегат ҡатнашты. Сарала 1,63 триллион һумлыҡ 201 килешеүгә ҡул ҡуйылды. Ил иҡтисады өсөн был һан оло әһәмиәткә эйә, сөнки уның артында әллә күпме эш урыны, бюджет ҡаҙнаһын тулыландырыусы миллиард һум һалым тора. Ә ҡаҙна тулы булғанда, күңел дә тыныс, донъя ла етеш.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

ҺҮҘ - ЕТӘКСЕГӘ

# "ӨФӨБӨҘ...

## Европа ҡалаларынан кәм түгел"



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Вся Уфа" телеканалында тура эфирҙа ҡала халҡы һорауҙарына яуап бирҙе. Йәнле әңгәмә бер сәғәттән ашыу дауам итте. Тура эфирҙа ҡаланың төньяҡ өлөшөн үҫтереү, кешеләрҙе иҫкергән йорттарҙан күсереү, мәктәптәр төҙөү, вандализм менән көрәшеү кеүек һорауҙар ҙа яңғыраны. Һорауҙарҙың 30 проценты торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһенә ҡағылды. Ҡала урамдарындағы ағастарҙың ботаҡтарын ҡырҡып тороу, ихаталарҙы йөшелләндереү, һыуҙы һүндереү графигы, урамдарҙы яҡтыртыу кеүек мәсьәләләр ҙә иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Түбәндә Ирек Ишмөхәмәт улының ҡайһы бер һорауҙарға яуаптарын тәҡдим итәбеҙ.**

**➔ Өфөнөң киләсәге ниндәй инвестиция проекттары менән бәйле буласаҡ?**

**Яуап.** Өфөлә бизнес үҫеше һәм инвестициялар өсөн яҡшы шарттар булдырылған. 2015 йылда бөтәһе 112 миллиард һумлыҡ инвестиция йәлеп ителгән. Рәсәйҙең башҡа ҡалалары менән сағыштырғанда, беҙҙә уларҙың 90 проценты - шәхси инвестициялар. Быйыл, иҡтисад өлкәһендәге үҙенсәлектәргә ҡарамайынса, беҙ былтырғы күрһәткестәрҙе 5 процентҡа үтеп киттек һәм йыл аҙағына тиклем был һан тағы ла үҫер, тип ышанабыҙ. Иң эре проекттарҙан "Башнефть", "Интер РАО" компаниялары проекттарын, Дим районындағы кабель заводын, "Атлантика" компанияһының бассейндар комплексын атарға була. Ә иң мөһиме, беҙ Өфө эшҡыуарҙарының ҡала иҡтисадына инвестицияларын яйға һалабыҙ.

Июндә Өфөлә үткән Рәсәй ҡалалары Берлеге форумында башҡа ҡалалар, шул иҫәптән сит ил ҡалалары вәкилдәре Башҡортостандың баш ҡалаһын Европа ҡалаларынан айырылмай тип баһаланы. Ысынлап та, парктар, скверҙарҙы реконструкциялау, юл-транспорт селтәрен үҫтереү буйынса ҙур эштәр башҡарылды.

**➔ Өфө ихаталарындағы гараждарҙы һүтеп алыуҙар дауам итәсәкме?**

**Яуап.** Гараждарҙы һүтеп алыу эше былтыр башланғайны. Бөгөнгө көнгә яҡынса 1,4 мең тимер гараж алынған - улар балалар баҡсалары һәм мәктәптәргә яҡын төҙөлгәйне һәм 96 проценты законһыҙ урынлаштырылғайны. Тағы ла 800 ошондай уҡ гараждьы һүтеп алырға кәрәк. Ғөмүмән, гараждар мәсьәләһе буйынса хәл ҡатмарлы ғына. Йорт алдарындағы гараждарҙың яртыһы был йорттарҙа йәшәгән кешеләрҙеке түгел, етмәһә, улар инде күптән ҡулланылмай ҙа. Шуға ла гараждарҙы һүтеп алыу мәсьәләһе буйынса граждандарға ҡала районлары хакимиәттәренә йәки йорттарын хеҙмәтләндергән идара итеүсе компанияларға мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**➔ Өфө халҡын йәмәғәт транспорты үҫеше лә борсой. 2018 йылға ҡала урамдарынан "Газель" автобустары юҡҡа сығасаҡ, тиҙәр, был ысынлап та шулаймы?**

**Яуап.** ЮХХДИ мәғлүмәттәре буйынса, бөгөнгө көндә Өфөлә 8,5 мең автобус рәсми теркәлгән. Транспорт өлкәһе белгестәре баһаһы буйынса, ҡалаға 3,5 мең уртаса ҙурлыҡтағы һәм ҙур форматлы автобус етә. Өфөлә иһә йәмәғәт транспортының 70 проценты "Газель" тибындағы бәләкәй автобустар. Өс йыл эсендә уларҙың хужалары автобус паркын яңыртыу өсөн 2,5 миллиондан ашыу аҡса тотонһа ла, беҙ бөгөнгө хәл менән ҡәнәғәт түгелбеҙ. Ҡалала ҙур форматтағы уңайлы автобустар йөрөргә тейеш, был бөтөн донъяла шулай. Боролоштар, магистралдәр ҙә ошо концепциянан сығып төҙөлә. Шуға ла юлдарҙа тығындар булмаһын өсөн ҙур автобустарға өҫтөнлөк бирәсәкбеҙ. 2018 йылға йәмәғәт транспортының заманса системаһын формалаштырыу бурысы тора. Унда "Башавтотранс" дәүләт предприятиеһы ла, муниципаль электр транспорты идаралығы ла, шәхси компаниялар ҙа инәсәк.

**➔ Ҡала юлдары торошо ҡасан талаптарға яуап бирер?**

**Яуап.** Был проблема Рәсәйҙең бөтөн ҡалалары һәм ауылдарына, шул иҫәптән Өфөгә лә ҡағыла. Быйыл яҙ, ысынлап та, юлдар насарайҙы, сөнки ҡыш буйына һауа температураһы 60 тапҡыр ноль билдәһенән үтеп китте, бында тиклем былдай осраҡтар 10-12-нән артыҡ теркәлмәй ине. 4-5 йыл элек төҙөлгән юлдар бындай һауа торошо тирбәлеүҙәренә сыҙаманы. Республика Хөкүмәте, Юл фонды һәм башҡа ресурстар ярҙамында юлдарҙы ямап, 1 июнгә уларҙы тәртипкә килтерҙек. Өфө урамдарының оҙонлоғо 1522 километр, уларҙың 142 километрының асфальт ябыуы юҡ. Был мәсьәләне хәл итеү өсөн ҙур матди ресурс кәрәк.

**➔ Ҡалала йәшәү сифаты, тәү сиратта, йәшәү өсөн яҡшы шарттар булдырыу менән билдәләнә. Уңайлы торлаҡ, матур парктар һәм скверҙар, инфраструктуранан тыш уңайлы тормош төшөнсәһенә нимә инә?**

**Яуап.** Бында барыһы ла бер үк ваҡытта ябай һәм ҡатмарлы. Мәҫәлән, кеше үҙенең фатиранан таҙа подъезға сығырға, күп ҡатлы йортта йәшәй икән, сифатлы лифтта аҫҡа төшөргә, матур ихатаға сығырға, тукталышҡа барырға йәки үҙенең шәхси автомобиленә ултырып, һәйбәт юлдарҙан йөрөргә тейеш. Һуңғы 5 йыл эсендә Өфөлә 1,1 мең ихата ремонтланған һәм тағы ла 3 меңе тирәһе үҙенең сиратын көтә. Үкенесле, бығa тиклем ихаталарҙы артыҡ аҡса булһа ғына төҙәтеп өйрәнгәндәр, тәүге урында капиталь төҙөлөш, торлаҡ төҙөү торҙо бит. Һуңғы йылдарҙа ғына был хәлде үҙгәртеүгә етди аҙымдар яһала башланы. Миҫал итеп "Фестиваль", "Аҡыллы йорт", "Эверест" кеүек торлаҡ комплекстары квартал төҙөлештәрен атарға була. Унда ихаталар ҙа сифатлы эшләнгән, күп ҡатлы парковка бар, ябыҡ ихата концепцияһы тормошҡа ашырыла - автомобилдәр инеп йөрөй алмай. Бөгөн ҡала төҙөлөшө советына тәҡдим ителгән проекттарҙың барыһы ла тикшерелә һәм комплексы ҡараш булмаһа, объекттарҙы төҙөүгә рөхсәт бирелмәй.

**Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔ Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә аңлатыуҙарынса, 1 октябргә тиклем федераль льготаға эйә булған кешеләр социаль хеҙмәттәр йыйылмаһынан йәки уның бер өлөшөнән баш тартыу йәиһә социаль хеҙмәттәр алыуҙы тергеҙеү тураһында ғариза яҙа ала. Социаль пакеттың хаҡы айына 995,23 һум тәшкил итә.

✔ Чебоксарҙа III Бөтә Рәсәй ауыл мәктәптәре уҡытыусылары съезы булды. Унда бөтә илдән 500-гә яҡын, шул иҫәптән Әлшәй һәм Учалы районлары ике уҡытыусы ауыл ерендә белем биреү системаһын үҫтереү мөмкинлектәрен тикшереүҙә ҡатнашты. Үҙенең сығышында мәғариф һәм фән министры Ольга Васильева, уҡытыусыларҙың эш хаҡының 70 проценты нигеҙ өлөш буласаҡ, тип вәғәҙә итте. Уның әйтеүенсә, хеҙмәт хаҡының нигеҙ өлөшөн тәшкил итеүсе өлөшләрҙең булеү бөтә учреждениеларға ҡағыла. "Был - хәл ителгән мәсьәлә", - тип билдәләне Ольга Васильева.

✔ М. Ҡашғари исемендәге халыҡ-ара хикәйәләр конкурсының төбәк этабы еңеүселәре билдәле булды. Беренсе урынды "Һабаҡ" хикәйәһе менән яҙыусы Тансулпан Ғарипова яуланы. Икенсели - "Барабансы" хикәйәһе авторы Сабир Шәрипов. Өсөнсө премияға "Сәстәреңдән тотоп ҡарар инем" хикәйәһе менән Миңнур Ҡасимова лайыҡ булды. Тамара Искәндәриә, Әхмәр Үтәбай, Мөнир Ҡунафиндың хикәйәләре дәртләндереү призлары менән бүләкләнде.

✔ "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының "Тамыр" балалар телеканалы "СМИротворец-Волга" VIII Бөтә Рәсәй конкурсының Волга буйы федераль округы буйынса төбәк этабы еңеүселәренең береһе булды. "Тамыр" телеканалының "Был беҙ" тапшырыуҙар циклы "Балалар һәм йәштәр киң мәғлүмәт саралары" номинацияһында еңеү яуланы. "СМИротворец-Волга" - "СМИротворец-2016" конкурсының тәүге төбәк этабы. Киләһе этап сентябрь аҙағында Улан-Удэ ҡалаһында уҙа. Беренсе урын алған эштәр автоматик рәүештә федераль исемлеккә эләгә.

✔ Башҡортостанда кизеүҙә иҫкәртеү буйынса халыҡты иммунизациялау дауам итә. Быйыл белгестәр 1,2 миллион кешегә, шул иҫәптән 300 мең балаға прививка яһарға ниәтләй. Тәү сиратта уҡытыусыларға, медицина, торлаҡ-коммуналь хеҙмәт һәм йәмәғәт транспорты хеҙмәткәрҙәренә, 60 йәштән өлкән кешеләргә прививка эшләнә. Бөгөнгә төбәктә 190 меңдән ашыу кешегә, шул иҫәптән 14 мең балаға прививка яһалған.

✓ *Фестиваль талаптары буйынса, ҡатнашыусыларҙан ҡуйылған өс төр ҡорамалда: турниктарҙа, параллель брустарҙа һәм ҡул менән тотоноп йөрөй торған горизонталь баҫҡыстарҙа команда менән дә, яңғыҙ ҙа сығыш яһау талап ителде.*



*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

**Өфөлә үткән Евразия воркаут (воркаут - инглиз һүҙе, турникта тартылыуҙы, күтәрелеүҙе аңлатҡан спорт төрө) фестиваленда сығыш яһап, 14 йәшлек Өфө егете Айнур Дашкин: "Бөтәгеҙҙе лә - воркаутҡа!" - тигән саҡырыу ташланы. Был саҡырыу саранлы ҡанатлы һүҙҙәренә әйләнде лә ҡуйҙы. Ҡайҙа булдымы был ваҡиға? Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендәге "Ватан" этнопаркында! "Воркаут-Башҡортостан" ойошмаһы тарафынан Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте фатихаһы менән ойошторолған "Workout fest" фестивале сиктәрендә 2 мендән ашыу кеше "Бөтә Рәсәй рекорд китабы" на инерлек ҙур эш тә эшләне әле. Барыһы тураһында ла - ентекләберәк.**

# БӨТӘГЕҘҘЕ ЛӘ - ВОРКАУТҠА!

## Йәки Өфөнөң Евразия турниксылары үҙәгенә әйләнгәне

10 сентябрҙә Өфөлә "Workout fest" Евразия воркаут фестивале ойоштороласағы тураһында беҙҙең гәзит биттәрендә лә хәбәр ителгәйне инде. Әле килеп, Рәшит Хәсәнов, Алмас Ғатауллин һәм Роберт Дәүләтшин исемле егеттәребеҙ киң ҡоласлы чемпионатҡа Белоруссиянан, Рәсәйҙең 18 ҡалаһынан, Башҡортостандың 16 ҡалаһынан дүрт тиҫтәнән ашыу батырҙарҙы саҡырып, уларҙы ярыштырып, юғары кимәлдә фестиваль ойоштороуға өлгәште, тип, ауыҙ тултырып әйтергә була. "Воркаут-Башҡортостан" егеттәре теләһә кемде түгел, ә "Street Workout & Street Lifting" Бөтә донъя федерацияһы президенты Денис Мининды (Украина), Бөйөк Британияның баш ҡалаһы Лондонда йәшәүсе воркаут оҫтаһы, бер нисә рекорд эйәһе Ли Вэйд Тернерҙы һәм башҡаларҙы судьялыҡҡа йәлеп иткән.

Ярыштарға старт бирелер алдынан бөтөн тамашасылар ҙа, спортсылар ҙа, әгәр был сағыштырыу урынлы булһа инде, әрмелә бик нығ таралыу алған үҙенсәлекле тәрбиә ысулына - ҡумаҡлап "отжимание" күнекмәһе эшләүгә тотондо. Баҡтиһәң, ойоштороусылар быға тиклем Һамар ҡалаһында ҡуйылған рекордты - бер юлы 1185 кешенең ошо күнекмәне эшләүен ҡуҙәтеп, уны Өфөбеҙҙә лә ҡабатлау хыялы менән янған булған икән. Был эш өсөн "Рәсәй рекордтар китабы" белгесен дә саҡырып ҡуйғандар. Вәкил, үҙ сиратында, иҫәп-хисап мәшәҡәттәре менән булып, рекордҡа дәғүә иткән күнекмәлә нисә кеше ҡатнашыуын һанап сыҡты ла, ҡағыҙға теркәп ҡуйҙы. Шулай итеп, сараға килгән 2131 кеше 30 тапҡыр "отжимание" яһап, Өфө ҡалаһының данлыҡлы эштәре рәтенә ошо рекордты ла яҙҙырҙы.

Рекордта ҡатнашырға, тамаша ҡылырға тип килгән меңләгән тамашасы араһында Өфөнөң Киров районындағы "Олимп", "Тиҫтер", "Аврора", "Лидер" үҫмерҙәр спорт клубтары, "Салауат Юлаев" хәрби-патриотик клубы тәрбиәләнеүселәре һәм тренерҙары ла бар ине. "Тиҫтер" клубы тренеры, Башҡортостандың иң яҡшы тренеры исеменә лайыҡ булған Нурия Ғәлина әйтеүенсә, бындай саралар, бөтөн яҡшы һөҙөмтәләренән тыш, йәштәрҙең сәләмәтлеген яҡшыртыуға этәргес тә булып тора. "Фестивалдә үҙҙәре һымаҡ үҫмерҙәрҙең, олораҡ ағайҙарҙың шундай ҡатмарлы күнекмәләр эшләй алыуына тамаша ҡылған үҫмерҙәр ғүмерлеккә иҫтә ҡалырлыҡ тәьҫорат, сәм, дәрт ала. Донъяны яңы аса, өйрәнә генә башлаған балаларға ошондай саралар тотош бер нисә дәреслек уҡыу курсы һымаҡ тәьҫир итә", - тине тәжрибәле тренер. Тренерҙарының хаҡлығын тәрбиәләнеүселәре лә дәлилләне: 30-ар тапҡыр ыһ та итмәй "отжимание" эшләне, тиҫтерҙәре, үҙҙәренән бер аҙға ғына ҙурыраҡ ағайҙары яһаған "трюк"тарҙы хәтерҙәрендә ҡалдырырға тырышты.

Фестиваль талаптары буйынса, ҡатнашыусыларҙан сәхнәгә ҡуйылған өс төр ҡорамалда: турниктарҙа, параллель брустарҙа һәм ҡул менән тотоноп йөрөй торған горизонталь баҫҡыстарҙа команда менән дә, яңғыҙ ҙа сығыш яһау талап ителде. Спортсылар дәртле ритмлы музыка оҙатыуында һөләүһенгә хас йылғырлыҡ менән турникта сәнғәт әҫәре булырлыҡ "тере скульптуралар" тыуҙырҙы. Уларҙың теге йәки был ауыр элемент ваҡытында ҡатып ҡалыуҙары кеше тигән йән эйәһенең ни тиклем камил икәненә тағы берҙә инандырҙы. Бәғзе берәүҙәр ергә бармаҡтарында ғына таянып, аяғын юғары сөйөп тора алды. Кемдер турникка тотоноп, тәнен офоҡ менән тигеҙ йүнәлештә ҡуйып, күренмәҫ баҫҡыс буйлап "күккә күтәрелде", тән һығылмалылығын һәм ҡулдарының көсөн күрһәтте. Уларҙың бер ниндәй сәбәпләнеүһеҙ аяғын өҫкә күтәреп, ҡулда йә һыңар ҡулда тора алыуы айырыуса аптыраште ҡалдырҙы. Тимәк, был егеттәрҙең ҡулдары, кәм тигәндә, кеше аяғы һымаҡ уҡ көскә эйә бит.

Нисек кенә сәйер тойолһа ла, был ярышта ҡатнашыусылар араһында беҙҙең башҡорт егеттәре күренмәне. Бәлки, беҙ кемдәлер күрмәй ҡалғанбыҙҙыр, тип, Роберт Дәүләтшингә өндәштек һәм: "Фестивалдә беҙ, башҡорт егеттәре, ойошторҙоҡ бит, шуға әлегә үҙебеҙ ҡатнашмай торҙоҡ", - тип яуапланы. Был хәрәкәттең беҙҙең илдә әле яңы таралыуын иҫәпкә алғанда, барыһы ла аңлашыла ла һымаҡ, ойоштороусылар, бәлки, үҙебеҙҙең егеттәрҙе әҙерләп тә өлгөрмәгәндер. Шулай ҙа йәштәребеҙгә, мәктәп уҡыусыларына был спорт төрө өсөн сығымдарҙың сағыштырмаса аҙ талап ителеүен, йәғни воркауттың күпләп шөғөлләнеү мөмкинлеге биргән спорт төрө булыуын иҫкәртеп, баяғы "Бөтәгеҙҙе лә - воркаутҡа!" тигән саҡырыуға ҡолаҡ һалырға кәрәк, тип кәңәш итке килә.

**(Дауамы 6-сы биттә).**



*ҺОРАУ-ЯУАП*



### ЭШТӘН БУШАТЫУ МӨМКИНМЕ?

**Икенсе ай инде, ауырыу сәбәпле, эшкә йөрөй алмайым. Ауырығанлыҡ ҡағыҙы асылған. Мине эштән бушатырға мөмкиндәрме?**

Хеҙмәт кодексында оҙайлы сирләү сәбәпле эштән бушатыу мөмкинлеге биргән статья юҡ. Ләкин һаулыҡ торошо буйынса әлеге эш урынығыҙҙа ҡала алмауығыҙ тураһында медицина һығымтаһы булһа һәм ойошма етәкселегенең һеҙгә тәҡдим иткән башҡа вакансияһы күнелегеҙгә ятмаһа, эштән бушатырға мөмкиндәр.

### УРТАҠ МӨЛКӘТ ИКӘН...

**Ирем менән шәхси йорт төҙөп сыҡтыҡ. Документтар ирем исеменә яҙылған. Ҡыҙыбыҙ беҙҙең менән аралашмай, шуға күрә иремдән өйҙөң улыбыҙға ҡалыуын билдәләүсе васыятнамә яҙыуын һорайым. Нотариус иһә, бындай васыятнамәне мин дә яҙырға тейеш, тип бара. Был ысынлап та шулаймы, әллә нотариус үҙенә өҫтәмә аҡса эшләү юлын ҡайырып ултырамы?**

Нотариус һеҙгә дөрөҫ әйткән. Никах ваҡытында булдырылған мөлкәт, документтарҙың кем исемендә булыуына ҡарамаҫтан, ир менән ҡатындың уртаҡ мөлкәте һанала. Шуға күрә, өй ирегеҙ менән икегеҙгә тигеҙ өлөштә һәм тормош иптәшегеҙ тик үҙенеке һаналған өлөшкә генә генә васыятнамә яҙа ала. Әгәр ҙә өйҙө тулыһынса улығыҙға ҡалдырырға теләһәгеҙ, һеҙгә лә ошондай уҡ васыятнамә яҙырға кәрәк. Ике кешенең, хатта улар ирле-ҡатынлы булһалар ҙа, бер ғариза яҙыуы тыйыла.

### БАЛАЛАР БУРЫСЫ

**Ҡатыным менән айырылышҡас, улыма 18 йәш тулғансы алимент түләнем. Әлеге мәлдә миңә 73 йәш, ғариплек буйынса иҫәптә торам һәм йәшәү өсөн үҙ мөйөшөм юҡ. Улымдың мине ҡарауын талап итеп судҡа мөрәжәғәт итә аламмы?**

Әгәр ҙә һеҙ алиментты ваҡытында һәм тулы кимәлдә түләп барған булһағыҙ, ата-әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителмәһәгеҙ, ә улығыҙ әлеге ваҡытта эшкә ярәклы булһа, һеҙ унан алимент түләтә алаһығыҙ. Алимент күләме улығыҙҙың матди һәм ғаилә хәленән сығып билдәләнә. Әгәр ҙә ата-әсәһе ҡаты сирләһә, ғариплек алһа, икенсе кешенең тәрбиәләүенә мохтаж булған осраҡта балалар уларҙы ҡарарға бурыслы. РФ Ғаилә кодексының 87-се статьяһына ярашлы, бындай осраҡтарҙа суд, алиментттан тыш, өҫтәмә түләүҙәрҙе күҙаллаған ҡарар сығарырға мөмкин.

**Наҙгөл САФУАНОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бауыр

❖ Сәләмәт кешенең бауыры тирәһендә ауыртыу оҙаҡ итеп йүгергәндә, йәйәү йөрөгәндә генә барлыҡҡа килеүе ихтимал. Бауырҙың эшмәкәрлегенә түбәндәгесә ярҙам итергә була. Унда йыйылған шлак, токсиндарҙы яндырыу һәм матдәләр алышыныуын нормаға килтереү өсөн ашарҙан алда махсус күнегеү эшләйһең. Иркенләп ултыраһың, күҙҙәрҙе йомаһың һәм яйлап ҡына танау менән тын алаһың, тынды бер нисә секунд тотоп тораһың һәм яйлап ҡына ауыҙ ҡыуышлығынан сығараһың. 2-3 минут тирәһе ошо күнегеүгә ҡабатлайһың.

❖ Бауыр өсөн үт ҡыуығында үт йыйылып тороуы ла насар. Бигерәк тә был процесс киске 11-ҙән һуң башлана. Быға юл ҡуймау өсөн йоҡлар алдынан ҡара зәйтүн емешенең 2-3 һөйәген йоторға кәрәк.

❖ Бауыр саф һауала булыуҙы, тауҙарға күтәрелеүҙе, шулай уҡ финик, инжир, йөҙөм һәм дөрөҫ туҡланыуҙы "ярата". Ризыҡты яйлап, ентекләп сәйнәп һәм яҡшы кәйефтә ашарға. Ашаған ризығыбыҙ төрлө булһын, тик уларҙы бер юлы ҡушып ашау зыянлы.

❖ Бауыр сәләмәт булһын өсөн иртән ас ҡарынға ярты стакан һыу эсергә, һуңынан күнегеүҙәр яһарға. Кемдең аш һеңдереү системаһы насар эшләй, ашар алдынан ашҡаҙан һәм ҡабырға аҫты яҫылығын тоҙ менән йылытырға. Быны өсөн ярты килограмм тоҙҙо табала йылытырға, етен йәки кизе-мамыҡ туҡымаға төрөп, тәнгә һалырға.

❖ Иртәнге аш алдынан ярты балғалаҡ балды ауыҙ ҡыуышлығына һалып һурырға һәм йотorға. Иртән һоло бутҡаһы ашау файҙалы. Бутҡаға бер ус самаһы йөҙөм, 3 әстерхан сәтләүеге, аҡ май, тоҙ өҫтәргә. Бутҡа бешергәндә шулай уҡ яҡшы кәйефтә булығыҙ.

### Аяҡтар арыһа...

❖ Аяҡ кейеме өйкәһә, сөйәл булһа, аяҡтарҙы ҡайнар һыуға тығып ултырғандан һуң, был урынға ылыҫлы агастарҙың сайырын һалырға, лейкопластырь менән нығытырға һәм бер тәүлек тоторға. Унан яңыһына алыштырырға. 3-5 көн дауалағандан һуң, проблема хәл ителер.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Сәхнәгә еләндә һәм бүректә сыҡтым, сығышымды дәртле ҡурай моңо биҙәне. Мин - рус егете. Был аҙымым менән мин башҡорт булмағандар араһында ла башҡорт мәҙәниәтенә битараф булмаған кешеләр бар, тип әйткем килде.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Башҡорт халыҡ медицинаһында **ҡорот** һәм **һары май** менән дауалау киң таралған. Ҡоротто һыуыҡ тейгәндә тирләү өсөн, эсәктәрҙәге паразит селәүсендәрҙе ҡыуыу, ашау теләгеп уятыу өсөн, эс киткәндә, күңел боғанғанда ашағандар. Йылан саҡҡанда ҡорот менән йәрәхәтләнгән ерҙе ыуғандар, кендек инәйҙәр кендек яраһы тиҙерәк уңалһын өсөн уны ҡорот менән эшкәрткәндәр. Ҡорот эркете өҫтөнә ҡалҡҡан үңәҙҙе боронғолар эренле яраны, ҡутырҙы дауалау өсөн ҡулланған.

Май һәм июнь башында йыйылған **күбек май** ҙа шифалы тип иҫәпләнгән. Әммә дауа булараҡ, бигерәк тә һары майҙы файҙаланғандар. Эс ҡатыу, газлы колика йонсотҡанда, эс ауыртҡанда, эсәктәрҙә паразит селәүсендәр булғанда һары май эскәндәр. Сирле кеше ас ҡарынға бер юлы бер йәки ярты стакан тирәһе йылы май эскән. Әлбиттә, был көслө дауа. Ауырыуҙы өйрәнмәйенсә, былдай миҡдарҙа май эсеү хәүефле. Мәҫәлән, ауыртыу аппендицит йәки башҡа етди ауырыу билдәһе булһа, сирленең хәле насарайып китеүе лә мөмкин.

Яңы һауылған **һыйыр һөтө** лә дауа тип һаналған. Уны дауамлы үпкә сире булғанда, ныҡ ябыҡҡанда, үҙәк көйгәндә, ағыуланғанда эскәндәр. Һыуыҡ тейгәндә һөттө ҡайнатып эскәндәр. Күҙ шешкәндә, тән бешкәндә зарарланған урында ҡатындарҙың яңы һауылған күкрәк һөтө менән сылатҡандар.

**Ҡатыҡ** менән йыуып, баштың ҡауаҡланыуын бөтөргәндәр. Йүткереү йонсотҡанда йылҡы, һарыҡ, ҡаҙ майы иретеп эскәндәр, ә дауамлы үпкә ауырыуы булғанда бурһыҡ һәм айыу майы ла ҡулланылған. Тын юлдары, үпкә ауырыуында ошо майҙарҙың береһен күкрәк тирәһенә һөртөп, массаж да яһағандар. Баш ауыртыуы ныҡ йонсотҡанда башты тауыҡтың эс майын ҡаплап бәйләгәндәр. Күк йүтәл менән йонсоған балаға күгәрсен ите ашатҡандар.

Үт ташы ауырыуы, гастрит булғанда **тауыҡ ашҡаҙаны**ның киптереп онталған лайлалы тиресәһен ашағандар. Һары ауырыуынан һауығыу өсөн йомортҡа һарыһы, һарғылт төҫтәге табан балыҡ менән туҡланырға кәңәш иткәндәр. Аяҡ-ҡул һыҙлағанда ойоҡбаш һәм бейәләйҙе эт йөнөнән бәйләгәндәр. Күҙгә төшкән сүпте сығара алмағанда (мәҫәлән, дегәнәк энәһе эләккәндә) йылан тиреһенең (ҡауының) бәләкәй генә киҫәген алып, уны ныҡ итеп йыуып, күҙ ҡабағы аҫтына һалғандар. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң сүп менән йылан ҡауы сыҡҡан. Бындай дауалау менән миңә 1971 йылда Бөрйән районы Ғәлиәкбәр ауылында танышырға тура килде.

Элек зарарһыҙландырыу сараһы итеп кешенең **ауыҙ һыуын** файҙаланғандар. Күҙ эренләгәндә лә ауыҙ һыуын һөртөп дауалағандар. Ҡолаҡ йомшағын тишкәндә эренләү булмаһын өсөн еп, энәне, тишкән ерҙе ауыҙ һыуы менән сылатҡандар.

Боронғо дауаларҙың береһе - **һөлөк** булған. Уны баш ауыртҡанда, әйләнгәндә һалдырғандар. Һөлөк һалыу тәртибе түбәндәгесә булған: һөлөк ҡуйыр урынды тәүҙә һабынлап йыуғандар. Тире кипкәс, ас һөлөктәр ҡуйылған. Башҡорт халыҡ медицинаһында **ҡырмыҫҡаларҙан** файҙаланыу ҙа билдәле. Аяҡ-ҡул һыҙлағанда сирле кеше 15-20 минутҡа аяҡ йә ҡулын ҡырмыҫҡа иләүенә тығып ултырған. Ҡырмыҫҡанан ыуыныу өсөн дауа ла әҙерләгәндәр. Эсенә шәкәр ҡомо һибелгән банка ҡырмыҫҡа иләүенә ҡуйылған һәм ул ҡырмыҫҡа менән тулғас, йылы мейескә ултыртҡандар. Ҡырмыҫҡалар тарҡалып, иреп бөткәндән һуң барлыҡҡа килгән шыйыҡса менән аяҡ-ҡул һәм башҡа ер һыҙлағанда ыуынғандар.

Тирләтеүсе сара булараҡ, **бал** киң ҡулланылған. Һыуыҡ тейеп, тын юлдары, үпкә ауырыуынан баллап сәй эскәндәр, бал менән күкрәк тирәһен ыуғандар, компресс та яһағандар. Балды артыҡ ҡулланыу ҙа ярамай, сөнки ул йөрәкте "тулата".

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# БӨТӘГЕҘҘЕ ЛӘ - ВОРКАУТҠА!



## Йәки Өфөнөң Евразия турниксылары үҙәгенә әйләнгәне

**(Башы 5-сы биттә).**

### Теманы дауам итеп…

***Илнар Салауатов, Өфө киң профилле белем биреү колледжының физкультура уҡытыусыһы:*** Воркаут - яңы спорт төрҙәренән һанала. Уның өсөн спорт ҡоролмалары, залдар ҙа кәрәкмәй. Үҫеп килгән быуын өсөн бик фәһемле, файҙалы спорт төрө тип һанайым. Бында кешенең бөтөн мускулдарын үҫтереүгә, нығытыуға булышлыҡ иткән күнекмәләр эшләнә икәне лә иғтибарға лайыҡ. Юғиһә, әйтәйек, ауыр атлетика менән шөғөлләнеүселәр йыш ҡына үҙҙәренең белекһеҙлеге арҡаһында күкрәк мускулдарын үҫтерәләр ҙә, аяҡтыҡын онотоп ебәрәләр. Һөҙөмтәлә, аяҡтары көсһөҙ ҡала. Был дөрөҫ түгел. Ә воркаутта күнекмәләр бөтөн мускулдарҙың әүҙемлеген күҙ уңында тота. Тағы, ҡайһы берәүҙәр арҡа мускулдарын нығытмайынса, тота килеп, ауыр тимер ҙә күтәреп, умыртҡа һөйәге бүҫере барлыҡҡа килеү ихтималлығын арттыра. Шуға күрә мин студенттарға йыш ҡына: "Ниндәй генә спорт төрө менән шөғөлләнһәгеҙ ҙә, йүгереүҙе онотмағыҙ - дөйөм торошоғоҙҙо ла яҡшыртығыҙ", - тип иҫкәртә йөрөйөм. Кешенең 2 меңгә яҡын мускулы бар, уларҙың бөтөнөһөн дә "эшкә ҡушырға" кәрәк. Аяҡ эшләгәндә, ҡул ял итһен. Ҡул эшләгәндә - арҡа, һәм башҡалар... Шулай итеп, дөрөҫ план төҙөп, күнекмәләрҙе дөрөҫ үткәрергә кәңәш итәм. Бының өсөн, мәҫәлән, берәй тренерға мөрәжәғәт итеп, уның кәңәштәрен ишетеү ҙә ҡамасауламаҫ. Мәғлүмәтте интернеттан да алырға була.

Ҡалала һуңғы йылдарҙа спортты үҫтереүгә иғтибар артыуы ҡыуандыра. Спорт майҙансыҡтары, ҡаласыҡтары төҙөлә, уңайлыҡтар арта. Беҙҙең уҡыу йортонда физик культура һәм адаптив физик культура бүлектәре уңышлы эшләй. Ошо бүлектәрҙе тамамлаған бер нисә төркөм сығарылыш уҡыусыларыбыҙ ҙа бар. Бөгөнгө сараға студенттар бик ҙур ҡыҙыҡһыныу менән килде. Күңелләнеп ҡарап торалар. "Отжимание" йәғни ҡулдарға таянып ҡалҡыныуҙы башлар алдынан сәхнәгә менеп күнекмә үткәреүсе егеттең - Артур Зариповтың беҙҙең колледж егете булыуы студенттарға ныҡ тәьҫир итте. Бөгөнгө ярышта матур, ҡатмарлы күнекмәләр күрҙек, әммә улар беҙ өйрәнә алмаҫлыҡ түгел. Барыһын да өйрәнергә була, тигән һығымтаға килдек.

***Георгий Пахомов, Бәләбәй ҡалаһы, шәхси беренселектә ҡатнашыусы:*** Былдай киң масштаблы фестивалдә беренсе тапҡыр ҡатнашам. Майҙандан түҙеп торғоһоҙ көс, дәрт бөркөлгәндәй. Мин был сәхнәгә башҡорт кейемендә - еләндә һәм ҡамсат бүректә сыҡтым, сығышымды дәртле ҡурай моңо биҙәне. Килгән ҡунаҡтарҙы башҡорт мәҙәниәте менән таныштырырға, ошо мәҙәниәткә ылыҡтырырға кәрәк, тигән маҡсаттан сығып, сығышыма милли һыҙаттар өҫтәнем. Минең үҙемдең башҡорт тамырҙарым юҡ, мин - рус егете. Был аҙымым менән мин Башҡортостанда башҡорт булмағандар араһында ла башҡорт мәҙәниәтенә битараф булмаған кешеләр бар, тип әйткем килде.

***Алмас Ғатауллин, "Воркаут-Башҡортостан" ойошмаһы идараһы ағзаһы:*** "Воркаут-Башҡортостан" - республикала йәшәүсе 14 йәштән өлкән егеттәр үҙҙәренән-үҙҙәре ойошоп, ярыштар, асыҡ күнекмәләр, мәктәптәрҙә лекциялар, оҫталыҡ дәрестәре үткәреү маҡсаты менән тупланған йәштәр ойошмаһы. Был ҙур чемпионатты беҙҙең республикала уҙғарыу теләге юҡтан ғына барлыҡҡа килмәне. Тәүҙә көс туплаиздыҡ, унан тәүәккәлләргә булдыҡ. Фестивалгә 9 ай буйы әҙерләндек. Стрит-воркауттың халыҡ-ара ойошмаһы, "Рәсәй воркаут федерацияһы" менән менән бәйләнештәр булдырҙыҡ. Бөйөк Британиянан Ли Вэйд Тёрнерҙың килеүенә лә шатбыҙ. Уны "Бөтөн донъя воркаут ойошмаһы" аша саҡырҙыҡ. Испания, Белоруссия, Украина, Ҡаҙағстан спорсылары менән бәйләнештәр булдырҙыҡ. Донъя буйынса воркаут хәрәкәте графигы тығыҙ булғанлыҡтан, барлыҡ батырҙар ҙа килеп етә алманы. Урынын, ваҡытын алдан хәстәрләп, алдағы чемпионатты бина эсендә үткәрербеҙ, тигән уйыбыҙ бар. Бөгөнгө ярышҡа бихисап ҡунаҡтар саҡыра алыуыбыҙҙа партнерҙарыбыҙҙың өлөшө ҙур. Форсатты файҙаланып, уларға оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Юл сығымдарыбыҙҙы ла, ҡунаҡтарҙы урынлаштырыу мәшәҡәттәрен дә, хатта уларҙы ашатыуҙы ла партнерҙар үҙ өҫтөнә алды. Әлбиттә, БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығына айырым рәхмәтлебеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Воркаут-Башҡортостан" ойошмаһы идараһы ағзаһы Роберт Дәүләтшиндың ошо һүҙҙәре менән тамамлайыҡ:" Беҙҙең алда сәләмәт тормошто пропагандалау, воркаут тураһындағы мәғлүмәтте күберәк кешеләргә еткереү маҡсаты тора. Беҙҙең ойошмала күберәк Өфөнөң юғары уҡыу йорттарында белем алыусы 1-2-се курс студенттары ағза булып тора. Ойоштороусылар - беҙ, өс кеше. Төп эшебеҙҙән бушаған арала ошо хәрәкәтте алып барабыҙ. Апрелдән алып ентекләп әҙерләнә башланыҡ, августан алып иртәнән-кискә тиклем ошо фестивалгә әҙерлек менән генә йәшәнек. Фестивалдең ойоштороу моменттарын тағы ла яҡшыртыу ысулдары бар икәнен дә аңлайбыҙ. Эште камиллаштырырға кәрәк әле. Бөгөнгөһө - тәүге тәжрибә. Хатта беҙгә генә лә түгел - башҡа йәштәргә, студенттарға ла ҙур һынау. Беҙ - яңы формация йәштәре, беҙ - мәғрифәтселеккә ынтылған заманса йәштәр. Киләсәк тигәндә, күҙ алдыбыҙҙа бер-ике йылды түгел, бәлки, тотош ярты быуатты күҙ уңында тотоп эшләйбеҙ".**

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

ҺАБАҠТАР

# НИӘТЕҢДЕ КЕШЕГӘ ҺӨЙЛӘМӘ



**"Хоҙайҙы көлдөрөргә теләһәң, уға пландарың тураһында һөйлә", тигән әйтем бар.**

Ысынлап та, бик күптән планлаштырып ҡуйған эштәрең төрлө сәбәптәр арҡаһында тормошҡа ашмаҫҡа ла мөмкин. Йә булмаһа, һин алдыңа алған маҡсаттарыңды үҙгәртеүең дә ихтимал. Баҡтиһәң, был хәл үткән быуатта уҡ бик күп тикшеренеүселәрҙең иғтибарын йәлеп иткән булған.

Әлбиттә, ниҙер эшләргә ниәтләп йөрөүең тураһында дуҫтарға, яҡындарға, таныштарға һөйләп, ҡыуанысыңды уртаҡлашыу кәрәк кеүек. Сөнки улар һинең машина алырға, сит илгә ял итергә барырға, үҙ бизнесыңды асырға, өйләнергә ниәтләнеүең һ.б. тураһында белеп, һинең менән бергә шатланырға, кәрәкле ярҙам күрһәтергә мөмкин. Әммә 1933 йылда уҡ сит ил психологтары тикшеренеүҙәр үткәреп, ниәттәреңде күберәк кешегә бәйән иткән һайын, ҡорған пландарыңды тормошҡа ашырып булмаҫын асыҡлаған.

Ни өсөн былай килеп сыға һуң? Үҙенең уй-ниәттәре тураһында башҡаларға һөйләгәндә кешенең аңында быларҙың барыһы ла үтәлгән эш кеүек һаҡланып ҡала, тип иҫәпләй Вера Малер исемле белгес. Ә аң кимәлендә маҡсатына өлгәшеүен тойғас, кешенең ынтылышы, теләге һүрелә. Нью-Йорк университетының психология фәндәре профессоры Питер Голлуитцерҙың 1982 йылда баҫылған "Символическое самозаполнение" тигән китабында ла ошо хаҡта телгә алына. Ул үткәргән бер нисә тикшеренеүҙә 63 кеше ҡатнаша. Һөҙөмтәлә, башҡалар менән серҙәрен бүлешеүселәргә ҡарағанда пландары тураһында береһенә лә һөйләмәгән кешеләрҙең хыялдарын тормошҡа ашырыу өсөн күберәк көс һалыуы һәм маҡсаттарына өлгәшеүе күҙәтелгән. Ниәтең тураһында һөйләү кешелә "ваҡытынан алда эшләп бөтөрөү тойғоһо" уята, тип иҫәпләй профессор Голлуитцер.

Мейелә һәр кемгә үҙен аңларға ярҙам итеүсе "оҡшашлыҡ символдары" тип аталған нәмә бар. Был символ барлыҡҡа килһен өсөн ниндәйҙер эш башҡарыу урынына шул турала һөйләшеү ҙә етә. Мәҫәлән, һеҙ диссертация яҙырға ниәтләнеүегеҙ хаҡында кемгәлер һөйләнегеҙ ҙә, үҙегеҙҙе фән кандидаты йәки доктор итеп күҙ алдына килтерҙегеҙ, ти. Мейегә ошо фараздар ҙа етә, артабан был маҡсатҡа өлгәшеү өсөн аспирантураға уҡырға инергә, ғилми етәксе эҙләргә, кәрәкле мәғлүмәт тупларға һеҙҙең ялҡауығыҙ киләсәк, сөнки стимул юғала...

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

**2004 йылда баш ҡалабыҙ Өфөнөң 430 йыллығы билдәләнеп, байрам тантаналары ойошторолғайны. Эйе, 1574 йылда Иван Грозный әмеренә буйһоноп, Мәскәү баяры Иван Нагой командалығы аҫтында бында килгән батша стрелецтары Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалғанын бер кем дә инҡар итергә йыйынмай. Әммә боронборондан тап ошо урынды яҡын-тирәлә йәшәгән ҡәүемдәр төйәк иткән, уларҙың торлаҡ, оҫтахана, нығытма урындары әле лә табыла тора. Боронғо риүәйәттәр ҙә, тарихи документтар ҙа ошоға дәлилдәр. Академик, тарих фәндәре докторы, билдәле археолог Нияз Мәжитов етәкселегендә асылған "Өфө-2" ҡаласығында табылған ҡомартҡылар ҙа ошо хаҡта һөйләй. Эҙәрмән-тикшеренеүсе Радик ВӘХИТОВтың "Сәмрегош ҡанаты аҫтына" исемле китабында бәйән ителгән, ошо мәсьәләгә арналған аналитик мәғлүмәттәр уҡыусыларыбыҙҙа ҡыҙыҡһыныу уятыр, тип уйлайбыҙ.**

# ӨФӨНӨҢ БАРЛЫҠҠА КИЛЕҮЕ -

## миф һәм ысынбарлыҡ



XIX быуат аҙағында Өфө ҡала башлығы булған Д.С. Волков "Өфө ҡалаһы тарихы буйынса материалдар" тигән хеҙмәт ҡалдырған. Өфөнөң Рәсәйгә тиклемге осоро тураһында ул былай тип яҙа: "Был ҡаланың һуңғы хакимы Түрә Бабату Клюсов (дөрөҫөрәге, Түрә баба - Түҡләс. **- Р.В.**) исемле нуғай ханы булып, бында бары тик ҡыш айҙарында йәшәгән, ә йәйҙәрен Өфөнән 50 саҡрым тирәһендә Дим йылғаһы буйлап күсенеп йөрөгән".

Ҡала башлығы Д.С. Волковтың ошо мәғлүмәтенән күренеүенсә, Өфө ҡалаһы башҡорттарҙың Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуына тиклем нуғай ханы осоронда ла, уға тиклемге дәүерҙә лә уҙ урынында булған, сөнки нуғай ханы урыҫтарға тиклем Өфөнө биләп торған һуңғы хаким, тип иҫкә алынған. Тимәк, ҡаланың нуғай ханына тиклем дә башҡа хужалары булған.

Шулай итеп, урыҫ батшаһы Иван Грозный Ҡаҙанды алғанға һәм башҡорттарҙың Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуына тиклем 200 йыл элек үк Өфө йылғаһының текә ярында Өфө ҡалаһы булып, Алтын Урҙа структураһында административ үҙәк функцияһын үтәгән. Урҙа тарҡалғандан һуң Өфөлә Ҡаҙан ханлығы наместнигы хеҙмәттәре, һуңынан нуғай ханы ставкаһы урынлашҡан.

Әммә түрәләргә тоғролоҡ һаҡларға тырышҡан тарихсыларыбыҙ ул замандарҙағы ҡаланы күрмәмешкә-белмәмешкә һалышып, Петербург академигы, элекке өфөлө П. Пекарскийҙың Өфөгә 1586 йылда нигеҙ һалыныуы тураһындағы мәғлүмәтен бер һүҙһеҙ ышанып ҡабул итте. П. Пекарскийҙың был мәғлүмәте Мәскәүҙең нуғайҙар менән 1586 йылдағы дипломатик хатлашыуына нигеҙләнгән.

1586 йылдың яҙында нуғай кенәзе Урус урыҫтарҙың дүрт ҡала һалыуы тураһында яҙған: "... Өфө йылғаһында, тағы Увекала, тағы Һамарҙа, тағы Белая Воложкала". Ул батшаға былай тип дәғүә белдерә: " Был ҡалаларҙы дуҫлыҡ өсөн түгел, яуыз ниәт менән ҡорғанһың...".

Күреүегеҙсә, бында Өфө йылғаһы үрендәге урыҫтарға 1399 йылдан бирле билдәле булған Сәгәтин ҡалаһындағы ҡәлғә һәм Ағиҙел буйында Өфө ҡалаһы янында урыҫтар тарафынан төҙөлгән нығытма тураһында һүҙ бара. Был башҡорт ҡалаларының бында урыҫтар килмәҫтән байтаҡ элегерәк башҡорт ерендә булыуын тарихсылар нығклап йөшерә килә. Әммә беҙ ҡапсыҡта ятмаған кеүек, ул туралағы мәғлүмәт үҙенән-үҙе беленеп тора. Шулай ҙа Өфө ҡалаһының урыҫтар тарафынан һалыныуы тураһындағы мифты улар көсәнә-бөртәнә яҡларға тырышып ята.

Ошо йәһәттән Ә. Усмановтың позицияһы бигерәк тә үҙен-үҙе фашлап тора: "Өфө" атамаһы ҡала төҙөлгән ваҡытта, йәғни 1574 йылда, йәиһә 1586 йылда барлыҡҡа килмәгән; ул XVI быуат башында уҡ иҫкә алына", - тип яҙа ул. Хөрмәтле тарихсыбыҙ Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыуҙың урыҫ версияһын иҫбатлайым, тип, шул тиклем буталып бөткән, хатта ки ҡаланың атамаһы ҡала төҙөлгәнгә тиклем 70-80 йыл элегерәк барлыҡҡа килеүе тураһында яҙа башлаған. Быны булыуы мөмкинме һуң?

Күрәһең, фекер ни тиклем туҙға яҙмағанырак булһа, уға шул тиклем енелерәк ышаналар, тиеү дөрөҫтөр. Югиһә, И.В. Нигмәтуллина ла үҙенең "Иҫке Өфө" тигән хеҙмәтендә ҡалабыҙҙың нигеҙләнеүенән алдараҡ барлыҡҡа килгән атамаһы тураһындағы ялғанды күсереп яҙмаҫ ине. Ҡала исеменең үҙе төҙөлгәнсе 70-80 йыл элек булыуы мөмкин түгел. Әгәр XVI быуат башында ҡаланың исеме булған икән, батша Иван Грозный тыумаҫтан алда уҡ ҡала үҙе лә булған.

Ә. Усмановтың иҫкә алынған китабында Өфө ҡалаһы тарихын яҡтыртыуҙың тағы ла бер ҡыҙыҡлы һәм иҫәпкә алырлыҡ, әммә күҙгә бик салынып бармаған нескәлеге бар. XVI быуат башында башҡорттарҙың Ҡаҙан ханлығы хакимлығы аҫтында йәшәүе тарихын хикәйәләгәндә, ул бер нисә тапҡыр Өфөнө иҫкә алып, бында нуғай ханы Аҡназарҙың былҡыу тураһында яҙһа ла, Өфөнө бер тапҡыр ҙа ҡала тип атамай. Ысынлап та, исеме бар, ә ҡалаһы юҡ! Был шәүлә-ҡала түгел. Был башҡорттарҙың Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуынан һуң Өфө ҡалаһына урыҫтар тарафынан нигеҙ һалыныуы тураһындағы миф.

Ә. Усманов хеҙмәтенең Өфөнө нигеҙләүгә арналған бүлегендә ошо миф ҡыҫҡаса ошолай нарыҡлана: "Буласаҡ Өфө ҡалаһының нигеҙен 1574-1586 йылдарҙа төҙөлгән "Кремль" хасил иткән. Ул Сутолока йылғаһы Ағиҙелгә ҡойған ерҙә, унын уң яҡ ярындағы бейек морондоң көньяҡ осон биләп торған".

Был йылғасыҡ тәүҙә Суколака тип аталып, башҡортса һыу ҡолағы (су колағы) һүҙенән килеп сыҡҡан. Күрәһең, был йылға Ағиҙелдең үҙенә түгел, ә ҡасандыр бында булған йылға ҡултығына, йәғни һыу ҡолағына ҡойған. Бында электән үк пристань булыуы ошоно йөпләп тора.

Бындағы кремлгә нигеҙ һалынғанға тиклем 200 йыл элегерәк үк Европала ошо урында ҡала булғанлығын белгәндәр, уны карталарына төшөргәндәр, ә беҙҙең тарихсыларыбыҙ европаларҙан һуң 600 йыл үткәс тә ошо турала яҙырға ҡыймай. Һуңғы йылдарға тиклем тиерлек беҙгә Башҡортостанды һәм уның ҡалаларын боронғо карталарҙа күреү мөмкинлеге булманы. Ә быныӊ өсөн әллә ниндәй ҡыйынлыҡтар ҙа юҡ ине бит. Рәсәйҙә XIX быуат аҙағында ошо карталар тураһында беләләр һәм яҙалар. 50 йыл элек был турала Татарстан тарихсылары ла хәбәрҙар ине. Әйтергә кәрәк, Татарстан Республикаһында Ҡаҙан ханлығы тарихы буйынса сыҡҡан китаптарҙа, карталарҙа Иван Грозный ғәскәрҙәре Ҡаҙанды алғандан күпкә әүәлерәк, иң кәмендә XV быуат урталарынан бирле Ағиҙел һәм Өфө йылғалары ҡушылған ерҙә ҡала булыуы билдәләнә. Бына тик үҙебеҙҙең туған Өфөбеҙҙә генә Ҡаҙандың еңелеүенән һуң 22 йыл үтеүгә урыҫ стрелецтары тарафынан Өфөгә нигеҙ һалыныуы тураһында ярамһаҡланып тәкрарлауҙы дауам итәләр.

**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Беҙҙең боронғо уғыр ата-бабаларыбыҙ тураһында Геродоттан тыш бик күптәр яҙып ҡалдырған. Эпостың өҙөгөнән күренеүенсә, алтын хаҡындағы мәғлүмәт ысынбарлыҡ менән тулыһынса тура килә. Бронза дәүеренән һуң Уралға алтын быуаты килә. Һәм Башҡорт ғалимы Р.Вәхитов яҙыуынса, ул саҡта тарихи аренала "өлкән ағай"төшөнсәһе булмаған. Улар өсөн - урыҫ халҡына боронғо башҡорттарҙың бер ниндәй мәҙәниәте лә, алтыны ла булмаған, хәйерселек һәм томаналыҡ хөкөм һөргән! (49, 98-107-се биттәр). Б.э.т. XVIII-XVI быуаттарға ҡараған Һынташ ҡәберлектәрендә табылған ҡомартҡылар башҡорттарҙың ата-бабаларының ныҡ үҫешкәнлеге хаҡында һөйләй. Бронза дәүерендә хәҙерге Башҡортостан территорияһында мәгдән иретеү сәнәғәте үҫешкән булған. Был ерҙәрҙәге боронғо ҡалаларҙа йәшәүселәрҙең һаны 2500-4000-гә еткән. Шулай уҡ был ҡалаларҙың "Калалар иле" сиктәрендә башҡа ҡалалар менән дә бәйләнеше һиҙелә. Бындай ҡалаларҙың һаны 30-ға тиклем барып етеүе хаҡында ла һүҙ алып барырға була. Бронза дәүеренән беҙҙең көндәргә тиклем этнографик элементтары булған бер нисә ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәре килеп еткән, Һынташта табылған ҡашмауҙар мәҫәлән, хәҙерге башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары милли кейемдәренән әллә ни айырылмай. Ундай кейемдәрҙе шулай уҡ хантыларҙа, мансиларҙа, шулай уҡ Евразияның башҡа халыҡтарында осратырға була. Был оҡшашлыҡ ошо төбәктә йәшәүсе халыҡтарҙың, шул иҫәптән хәҙерге башҡорттарҙың этногенез тарихын бронза дәүерендә бәйләргә мөмкинлек бирә.

Б.э.т. 2000 йылдарҙа хәҙерге Башҡортостан территорияһында йәшәүселәр, асылда, европеоидтарҙан торған ҡәбиләләр булып, б.э.т. VIII быуатта бында көнсығыштан монголоид ҡәбиләләр килгән, улар б.э.т. VII быуатта уҡ Көнбайыш Себерҙә, Көньяҡ Уралда һәм Кама буйында йәшәүселәрҙең асылында сағылыш тапҡан. Урындағы халыҡ икһеҙ-сикһеҙ далаларҙы үҙләштереүен дауам иткән. Ошо нигеҙҙә яңы мәҙәни традициялар формалашҡан. Мәгдәнселәр төҫлө һәм башҡа металл яткылыҡтарын асыуға өлгәшкән. Урал алдындағы урманлы һәм урманлы-далалы урындарҙа йәшәүселәрҙең иктисад өлкәһендәге унышы шуның менән бәйле. Уралда ҡеүәтле металлургия усағы ошо рәүешле тоҡанған. Көньяҡ Уралда иң боронғо тимер ҡоралдар Ырымбур өлкәһендә табылған. Улар: йөҡаҡ тимер пластинанан эшләнгән бөгөлгән тәрилкә, ағас һабының остоҡтары һаҡланған тимер ҡасау, баҡыр ҡаплыпы тимер уймыр (арҡыры балта), тар йөҙлө хәнйәр. Был ҡомартҡылар б.э.т. III быуат уртаһына ҡарай (93,168-сы бит). Был төбәктә йәшәүселәрҙе Геродот агриппейҙар тип атаған, улар урта Иртышта, көнбайыш Себерҙә йәшәүсе ҡәбиләләр менән тығыҙ аралашҡан. Геродоттың был ерҙәргә Ҡара диңгеҙ буйындағы ҡалаларҙан сауҙа каруандары йөрөгән тип яҙыуы ундағы ете телдә һөйләшеүсе ҡәүемдәрҙең барыһына ла яҡшы билдәле булыуы хаҡында һөйләй. Агриппейҙар уларҙың арьяғында йылына алты ай буйына йоҡлай торған халыҡ йәшәүе хаҡында һөйләр булған. Агриппейҙарҙан көнсығышта иссedондар йәшәгән, улар үҙҙәренән алыҫ түгел урында бөркөттәрҙең алтын сыҡҡан урындарҙы һаҡлауҙары тураһында һөйләгән (97, 34-се бит).

**(Дауамы бар).**

*✓ Илдең тәбиғи байлыҡтары, ауыл хужалығы, сәнәғәт, транспорт, төҙөлөш ҡеүәттәре ҙур олигархтар ҡулына күсте бит хәҙер. Ә дәүләт ҡарамағындағы потенциал бик әҙ ҡалды. Был дөрөҫ йүнәлеш түгел.*

# КӨРСӨК

## дөрөҫ булмаған

**Редакциябыҙҙа ҡунаҡта - Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы академигы, иҡтисад фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Федерацияһының, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры Мәҙһәр Насибулла улы ИҪӘНБАЕВ. Оҙаҡ йылдар Башҡортостандың иҡтисади төбәктәренең йәшәйешен өйрәнгән абруйлы ғалим халҡыбыҙ алдында торған ҡайһы бер иҡтисади мәсьәләләргә бөгөнгө заман ысынбарлығынан сығып баһа бирә, уларҙы хәл итеү юлдарын күрһәтә.**

**▶ Совет осоронда иҡтисадсылар аҙ булһа ла, илдә үҙгәртеп-ҡороуҙар башланғас, улар күҙгә күренеп артты. Һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә күҙәтелгән был тенденция илдең үсешенә ыңғай йоғонто яһанымы?**

- Иҡтисадсыларҙың күп булыуы һәйбәт күренеш. Сталин ваҡытында Мәскәү дәүләт университетынан башҡа юғары уҡыу йорттары иҡтисадсылар әҙерләмәне. Иң беренсе иҡтисадсы - Сталин үҙе иҫәпләнде, ул да үҙен шулай һананы. Шуға күрә, ул осорҙа иҡтисад өлкәһе - етешһеҙлектәре тулып ятҡан, артта ҡалған өлкәләрҙең береһе ине. Партияның 1965 йылдың сентябрендә үткән пленумынан һуң ғына әһәмиәт бирелде был өлкәгә. Пленумда иҡтисадты үҫтереү, етештерелгән продукцияның үҙкиммәтен түбәнәйтеү, үҫеш темптарын тиҙләтеү мәсьәләләре иғтибар үҙәгенә ҡуйылды. Юғары уҡыу йорттарында иҡтисад факультеттары ошо пленумдан һуң барлыҡҡа килде. Мин тағы шуны әйтер инем: совет власы йылдарында юғары уҡыу йорттарының иҡтисад факультеттарында етештерелгән кадрҙар бик кәсле булды. Улар етәксе урындарҙа, иҫәп-хисап эштәрендә, хужалыҡ тармаҡтарында эшләне, халыҡ хужалығының юғары темптар менән үҫеүенә булышлыҡ итте.

90-сы йылдарҙа был күренеш икенсе - кире яҡҡа боролош алды, тиһәк тә хата булмаҫ. Илдә иҡтисад һәм хоҡуҡ йүнәлешендә асылған коммерция уҡыу йорттары күбәйеп китте. Түләүле юғары уҡыу йорттары, бер-береһе менән ярышып, иҡтисадсыларҙы күпләп уҡытып сығарҙы ла бит, әммә яҡшы белгестәр әҙерләнмәне тиерлек. Һөҙөмтәлә нимә килеп сыҡты? Әҙерлекһеҙ йәш иҡтисадсылар халыҡ хужалығына, илдең үҫешенә артыҡ йоғонто яһай, файҙа килтерә алманы. Шуға күрә, беҙҙең илдә бөгөн дә иҡтисадсылар отряды, юристар отряды саманан тыш күп. Был белгестәр хужалыҡтың бөтөн тармаҡтарында эшләргә мәжбүр. Унан һуң, дәүләт уҡыу йорттарында тик яҡшы билдәләргә генә өлгәшеп диплом алған йәш белгестәр эш таба алмаған мәлдә, эш урындарын түләүле вуздарҙа насар ғына уҡып сыҡҡан, аҡса түләп, диплом алған белгестәр биләне. Уларҙан илгә, халыҡ хужалығына әллә ни файҙа юҡ, әлбиттә.

**▶ Кәрәкле урындарҙа белемле иҡтисадсылар ултырмауы Рәсәйҙәге иҡтисади көрсөктөң бер сәбәбе тип һанала аламы?**

- Был да көрсөккә булышлыҡ итә, әлбиттә. Ни өсөн тигәндә, ҡайҙа ғына булмаһын - юғары квалификациялы кадрҙар кәрәк. Әммә көрсөктөң икенсе төп сәбәбе - илдә алып барылған иҡтисади сәйәсәттең тейешле кимәлдә уйланып етмәүе һәм тормошҡа ашырылмауы. Илдең тәбиғи байлыҡтары, ауыл хужалығы, сәнәғәт, транспорт, төҙөлөш ҡеүәттәре ҙур олигархтар ҡулына күсте бит хәҙер. Ә дәүләт ҡарамағындағы потенциал бик әҙ ҡалды. Был дөрөҫ йүнәлеш түгел. Хужалыҡты тотороҡло эшләтеү, үҫтереү өсөн иҡтисади мөмкинлектең 50-60 проценты дәүләт ҡарамағында булырға тейеш. Мәсәлән, оборона сәнәғәте дәүләт ҡулында булғас, был өлкә яҡшы үҫешә. Ә ни өсөн беҙҙең шундай уҡ алға киткән машиналар төҙөү, авиация, радио-техник, электро-техник приборҙар төҙөү тармаҡтары олигархтар ҡулында күтәрелеп китә алманы? Уларҙың үҫеше юҡҡа сыҡты. Күп сәнәғәт предприятиелары эшен туҡтатты.

Башҡортостанда ниндәй генә алдынғы сәнәғәт тармаҡтары, предприятиелар булманы: приборҙар төҙөү булһынмы, станоктар төҙөү, электротехник, радио-техник тауарҙар, хатта космос ҡорамалдары өсөн приборҙар, оборона өсөн кәрәк булған деталдәр тиһеңме. Уларҙың байтағы 90-сы йылдарҙа ил буйынса алып барылған дөрөҫ булмаған сәйәсәт арҡаһында эшләүҙән туҡтаны. Машиналар төҙөүҙә генә түгел, аҙыҡ-түлек сәнәғәтен, йә булмаһа еңел сәнәғәтте алып ҡарағыҙ - улары ла юҡҡа сыҡты тиерлек бит. Сибай ҡалаһында, мәсәлән, совет власы йылдарында ҙур, СССР-ҙа өсөнсө предприятие иҫәпләнгән балалар аҙыҡтары етештереү комбинаты бар ине. Ошонда уҡ бик шәп ит комбинаты, тегеү фабрикаһы, леспромхоз эшләп килә ине. Хәҙер уларҙың береһе лә юҡ. Дөрөҫөрәге, Мәскәү олигархтары уларҙы һатып алғайны, предприятиеларҙың эше туҡталды ла ҡуйҙы. Өфөләге, бүтән ҡалаларҙағы бынамын тигән предприятиелар ҙа шул арҡала эшләмәй. Ил буйынса ошондай хәл...

**▶ Шуға ла көрсөк уйлап сығарылған йәки компетентһыҙ етәкселәр тарафынан булдырылған хәл тип ҡабул ителә түгелме?**

- Ысынлап та, "көрсөк" тигән нәмә юҡ ул. Беҙҙең иҡтисади сәйәсәттең дөрөҫ алып барылмауы арҡаһында килеп сыҡҡан ситуация ғына ул - көрсөк. Анализлап ҡарайыҡ. Республикалағы ниндәй генә төбәкте алып ҡарама, унда урындағы тәбиғи байлыҡтар, хеҙмәт мөмкинлектәре, бүтән саралар нигеҙендә ниндәйҙер сәнәғәт предприятиеһы ойошторорға, эшләтеп алып китергә була. Халыҡ та быны теләй. Ләкин әлеге лә баяғы олигархтар барыһын да "ҡулдарына төшөрөп", предприятиеларҙы артабан үҫтерергә мөмкинлек ҡалдырмай. Был махсус уйлап сығарылған нәмәләр, тип тә уйланыла.

Сит илдәрҙә көрсөктәр кеше ихтыярына бәйле булмаған, объектив сәбәптәр нигеҙендә барлыҡҡа килә. Әммә беҙҙәге көрсөктәрҙең төп нигеҙе иҡтисади сәйәсәттең дөрөҫ алып барылмауына бәйле. Рәсәй Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына (ВТО-ға) ингән саҡта, иҡтисадсы ғалимдар: "Беҙгә ВТО-ға инергә ярамай, ил үҙ алдына үҫешергә тейеш", - тип, ҡайҙа ғына мөрәжәғәт итмәне. Беҙ ҙә ил, республика етәкселегенә хаттар яҙҙыҡ, ниндәй генә гәзит-журналдарҙа, конференцияларҙа сығыш яһаманыҡ. Ил етәкселеге белгестәр фекеренә иғтибар итмәне һәм 2012 йылда Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына барып индек. Нимә килеп сыҡты? Конкурентлыҡ, баҙар шарттарында беҙҙең тауарҙар сит ил тауарҙары менән ярыша алманы. Һөҙөмтә булараҡ, бөтөн сәнәғәт: аҙыҡ-түлек, еңел, урман, машиналар төҙөү сәнәғәттәре юҡҡа сыҡты. Ярай әле, санкциялар килеп сығып, "тегеләр" беҙгә үҙ продукттарын индереүҙе туҡтатты, беҙ үҙ сәнәғәт тармаҡтарыбыҙҙы үҫтереү мөмкинлеге алдыҡ. Хәҙер аҙыҡ-түлек сәнәғәтен, урман, ағас эшкәртеү сәнәғәтен, еңел сәнәғәтте үҫтереүгә тәүге аҙымдар яһайбыҙ. Машиналар төҙөү сәнәғәтен әкренләп аяҡҡа баҫтырабыҙ. Был санкциялар беҙҙең сәнәғәтте аяҡҡа баҫтырыуға булышлыҡ итә. Ауыл хужалығы өлкәһендә лә иген баҫыуҙарын, һөрөнтө ерҙәрҙе киренән һөрөп, эшкәртеп, сәсеп, иген, техник культуралар үҫтереү мөмкинлеге алдыҡ. Бөгөн юғары уныш алабыҙ. Хатта хәҙер етәкселәр халыҡты урында етештерелгән, үҙебеҙҙең продукция менән тәьмин итеү бурысын ныҡлап алға һөрә башланы. Шулай эшләнергә тейешлекте беҙ, иҡтисадсылар, элек тә әйткәйнек бит инде - тыңламанылар.

**▶ Беҙҙә ғалимдарҙы тыңламайҙар, әммә уларҙы сит**



*Төбәктәргә йәҙ менән боролорға, үҫтерергә кәрәк. Тәбиғәт байлыҡтарыбыҙ күп. Беҙҙә үҫешеү мөмкинлектәре бик ҙур. Уларҙы рациональ, юғары һөҙөмтәле итеп файҙаланыу зарур. Шунһыҙ беҙҙең ил иҡтисады ҡеүәтле, юғары темптар менән үҫешә алмаясаҡ. Быны аңламайҙармы, әллә аңлап та эшләмәйҙәрме? Быныһы - икенсе мәсьәлә. Башҡортостан урманға бай. Әммә урмандар беҙҙең милек түгел - Үҙәк милке. Республика милке һаналған урман бик әҙ генә. Тик уларын да Мәскәү олигархтары ҡуртымға алып бөтөргән. Ҡуртымға алған ваҡытта урман ресурстарын юғары кимәлдә эшкәртеп, урман сәнәғәте комплексын үҫтерергә тигән йөкләмә менән килеләр ҙә, бер ни ҙә эшләмәйҙәр ҙә ҡуялар. Ағасты ҡырҡалар ҙа һаталар. Төп эштәре - шул.*

***✓ Ауылдарҙа үҫеш перспективалары ҙур ғына ул. Бының өсөн урындағы байлыҡтарҙы дөрөҫ һәм һөҙөмтәле файҙаланыу зарур. Ер ресурсын файҙаланыу кәрәк. Ерҙәр хәҙер һөрөлмәй, эшкәртелмәй ята, сәселмәгән баҫыуҙар күп.***

# ЮҠ УЛ,

## иҡтисади сәйәсәт кенә бар

**илдәрҙә тыңлайҙар, шуға ла "аҡыллы баштар" ситкә ағыла...**

- Тап шулай. Ошо йәһәттән мин шуны ла билдәләргә теләйем: Ҡытай ни өсөн иҡтисады буйынса алға китә? Ҡытайҙа тәртип икенсе. Ғалимдарҙың хеҙмәттәрендәге генә түгел, хатта юғары уҡыу йорттарындағы студенттарҙың диплом эштәрендә, бүтән хеҙмәттәрендә иҡтисадты үҫтереү буйынса ниндәйҙер файҙалы тәҡдим әйтелә икән, уны шунда уҡ теркәп, тематик төркөмдәргә туплап, юғары дәүләт органдарына эшкәртеүгә ебәрәләр. Ул тәҡдимдәрҙе ил, халыҡ хужалығы мәнфәғәтендә файҙаланалар. Бер генә тәҡдим дә иғтибарһыҙ ҡалдырылмай. Ә беҙҙә юғары дәрәжәле ғалимдарҙың ниндәй әһәмиәтле асыштары иғтибарһыҙ ҡала. Ә сит илдә уларҙы эләктереп алып, тормошҡа ашыралар.

Быны нимә менән аңлатырға? Рәсәй Хөкүмәтенең премьер-министры Медведев ике мәртәбә: "Илгә дәүләт милке кәрәкмәй - барыһы ла шәхси булырға тейеш", - тине. Был тамырынан дөрөҫ түгел. Милектең 50-60 проценты дәүләттеке булырға тейеш икәнлеген алдараҡ әйтеп үткәйнем инде. Мин бәләкәй, урта эшҡыуарлыҡтың үҫеүен инҡар итмәйем - улар ҙа булырға тейеш. Ә төп урында дәүләт милке торорға тейеш. Хужалыҡ тармаҡтарын ил, дәүләт мәнфәғәтенән сығып үҫтерергә кәрәк. Уйлап сығарылған нәмәне - көрсөктө - бары тик аҡыл ярҙамында ғына еңеп була. Иҡтисади сәйәсәт менән ныҡлап шөғөлләнгәндә, бөтөн дәүләт органдарын эшкә еккәндә, "көрсөк" тип аталған әйберҙе булдырмаҫҡа ла, уның тураһында һөйләмәҫкә лә мөмкин ине.

Ҡытай юғары темптар менән үҫешә. Ҡайһы бер күрһәткестәр буйынса хатта Американы үтеп китте. Ҡытайҙың юғары темптар менән алға китеүенең икенсе бер ҡануны ла бар: элек артта ҡалған илдәрҙә юғары темптар барлыҡҡа килеүсән. Улар ниндәйҙер бер кимәлгә еткәнсе ошо динамиканы һаҡлап килә-килә лә, темптарын кәметә. Ә иҡтисады электән ныҡ үҫешкән илдәрҙең үҫеш темптары юғары була алмай. Улар темптарҙы түбәнәйтмәй генә алға баралар. Иҡтисадҡа шундай процестар хас. Ҡытайҙың юғары темптар менән үҫеүе уның элекке ваҡытта иҡтисадының, халыҡ хужалығының үҫеш темптары буйынса сағыштырмаса артта ҡалыуы менән аңлатыла. Килер бер көн - ниндәйҙер бер кимәлгә барып етеү менән бөгөнгө юғары темптар түбәнәйәсәк. Әлбиттә, ил был хәлде булдырмаҫҡа тырышасаҡ.

Ә беҙҙең темптарға килгәндә, үҫеш бара, әммә яй бара. Кәрәкле темптарҙы ала алмайбыҙ әле. Илдең иҡтисадын, халыҡ хужалығын үҫтереү өсөн төбәктәргә: республикаларға, өлкәләргә, крайҙарға иҡтисади үҙаллылыҡ бирергә кәрәк. Улар үҫеш йүнәлештәрен үҙаллы - урындағы шарттарҙан сығып, ниндәй тармаҡтарҙы үҫтерергә кәрәклегенән сығып билдәләргә тейеш. Йәғни, халыҡ хужалығына, илгә ниндәй продукттар, ниндәй тауарҙар етештереүҙе төбәктәр үҙҙәре билдәләргә тейеш. Һалым системаһын үҙгәртеп ҡорорға кәрәк. Хәҙер төбәктәрҙә етештерелгән бөтә байлыҡ үҙәккә китә. Финанс ресурстары - Мәскәү өлкәһендә. Бөтөн халыҡ шунда ағыла.

Төбәктәргә йөҙ менән боролорға, үҫтерергә кәрәк. Тәбиғәт байлыҡтарыбыҙ күп. Беҙҙә үҫешеү мөмкинлектәре бик ҙур. Уларҙы рациональ, юғары һөҙөмтәле итеп файҙаланыу зарур. Шунһыҙ беҙҙең ил иҡтисады ҡеүәтле, юғары темптар менән үҫешә алмаясаҡ. Быны аңламайҙармы, әллә аңлап та эшләмәйҙәрме? Быныһы - икенсе мәсьәлә.

Башҡортостан урманға бай. Әммә урмандар беҙҙең милек түгел - Үҙәк милке. Республика милке һаналған урман бик әҙ генә. Тик уларын да Мәскәү олигархтары ҡуртымға алып бөтөргән. Ҡуртымға алған ваҡытта урман ресурстарын юғары кимәлдә эшкәртеп, урман сәнәғәте комплексын үҫтерергә тигән йөкләмә менән киләләр ҙә, бер ни ҙә эшләмәйҙәр ҙә ҡуялар. Ағасты ҡырҡалар ҙа һаталар. Төп эштәре - шул. Унан һуң, урманды ҡырҡыу - бер, уның урынына ағас ултыртырға ла кәрәк бит. Былары ла эшләнмәй. Ошоларҙы төп етешһеҙлектәр итеп, ҡуртым килешеүен киренән суд аша ҡаратып, урман ресурстарын республика мәнфәғәтенә, дәүләт мәнфәғәтенә ҡайтарып алыу мөмкинлеге бар ҙа бит...

**▶ Бөгөн беҙҙе ауылдарҙағы иҡтисади көрсөк, эшһеҙлек, шул арҡала ир-егеттәрҙең ситкә, Себергә эшкә таралып бөтөүе борсой. Ауылдарҙы үҫтереүҙең, уларҙы эшле итеүҙең ниндәй перспективалары бар тип уйлайһығыҙ?**

- Ауылдарҙа үҫеш перспективалары ҙур ғына ул. Бының өсөн урындағы байлыҡтарҙы дөрөҫ һәм һөҙөмтәле файҙаланыу зарур. Иң беренсе ер ресурсын файҙаланыу кәрәк. Ерҙәр хәҙер һөрөлмәй, эшкәртелмәй ята, сәселмәгән баҫыуҙар күп. Ер пайҙары ла файҙаланылмай. Урындағы тәбиғи шарттарға нигеҙләнеп, ерҙәрҙе эшкәртеп, кәрәкле продукттар етештереп, ауыл хужалығын алға сығарырға кәрәк. Был бәләкәй фермерҙарҙың ғына хәленән килмәй. Уларҙы ла үҫтерергә кәрәк, һүҙ ҙә юҡ. Әммә беҙгә хәҙер кооперацияны үҫтереүҙе хәстәрләргә кәрәк. Кооперацияны үҫтермәйенсә тороп, ауыл хужалығын үҫтереп булмай. Элекке термин менән әйткәндә, колхоздарҙы киренән тергеҙергә кәрәк. Совет власы йылдарында иҡтисадтағы иң мөһим сәйәсәттәрҙең береһе - колхоздарҙы барлыҡҡа килтереү булды, тип иҫәпләйем. Уларҙы юҡҡа сығарыу - ауыл хужалығын емереү, тигән һүҙ ул. "Колхоз" тиһәң, күп кешеләрҙең сәстәре үрә тора. Колхоз - күмәк хужалыҡ тигәнде аңлата. Ерҙе бер генә ғаилә эшкәртә алмай. Уны күмәкләп эшкәртергә кәрәк. Кооперацияны унлаған ғаиләнең көсөн берләштереп төҙөргә мөмкин. Мин элекке колхоздарҙы тиҙ арала яңынан тергеҙеү мөмкинлеге юҡлығын беләм. Уға техникаһы ла, ойоштороу ҙа, башҡаһы ла кәрәк. Тәүҙә айырым шәхси хужалыҡтарҙы берләштерергә кәрәк. Берләшеү туғанлыҡ, күрше-күләнлек, ауылдашлыҡ нигеҙендә лә була ала. Кооперацияны колхоз тип атамаһаң, икенсе төрлө атама бир әйҙә. Башҡорт ырыуҙары миҫалын алып ҡараһаң, ерҙәрен элек-электән күмәкләп эшкәрткәндәр. "Общинное землепользование" тигән төшөнсә юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән.

Ауыл хужалығын, ит, һөт, йөн, иген эшкәртеү, икмәк бешереү кеүек етештереү сәнәғәте тармаҡтарын үҫтереү зарур. Мәҫәлән, беҙҙең Урал аръяғы райондарында хәҙер күпләп йылҡы аҫырайҙар. Айырым хужалыҡтарҙа 5-әр, 10-ар баш, унан да күберәк йылҡы бар. Етеш, өлгөр ғаиләләр аҫырай уларҙы. Улар ҡымыҙ эшләй, ҡымыҙ һата. Ошо ерлектә, әйтәйек, хужалыҡтарҙан ҡымыҙҙы йыйып алып, хаҡын түләп, Сибайҙамы, Баймаҡтамы ҡымыҙ бешеү заводы эшләтеп ебәрергә мөмкин булыр ине. Ул ҡымыҙҙы йөк-йөк итеп Өфөгә алып килеп, магазиндар асып, йә булмаһа, баҙарҙарҙа һатыуҙар ойошторһаң, бына тигән килем бит. 50-60-сы йылдарҙа ҡымыҙ кибеттәре була торғайны әле. Хәҙер юҡ. Өфө магазиндарында һатылған бәләкәй һауыттағы ҡымыҙҙың хаҡы 120 һум булһа, Баймаҡта литр ярымлыҡ һауыттағыһын 100 һумға һаталар.

Һис һүҙһеҙ, ауылға иғтибар арттырыу кәрәк. Республиканың ғына түгел, тотош илде алып ҡараһаң да, бөтөн үҫештең нигеҙен ауыл тәшкил итә. Бөтөн ресурстар ауылда бит: ер, һыу, урман, иген, мал. Күҙәтеүҙәр буйынса, хатта илдең етәксе органдарында эшләгән кадрҙарҙың күбеһе ауылдан сыға. Таланттарҙы ауыл бирә. Ҡалаларҙан сыҡҡан талантлы кадрҙар ауылдан сыҡҡан талантлы кадрҙарға ҡарағанда сағыштырмаса аҙыраҡ...

**▶ Ә иҡтисад өлкәһенә,ниңәлер, ҡала кешеләре нығыраҡ ылыға. Һеҙҙең һымаҡ ауылдан сыҡҡан иҡтисадсылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ түгелме?**

- Ҡала кешеләре иҡтисад өлкәһенә, әлбиттә, тиҙерәк ылыға. Ни өсөн тигәндә, уларҙың тыуыуы ошо ҡала иҡтисады менән бәйләнгән. Атаәсәләре күсеп килеп, ҡалала ғаилә ҡорған. Бала беренсе көнөнән алып ҡала шарттарына яраҡлашып үҫә. Урындағы сәнәғәт предприятиелары булһынмы, аҙыҡ-түлек предприятиеларымы, бала әкренләп шул процесҡа инеп, аралашып үҫә. Ә ауылда үҫкән йәштәр 18-20 йәшкә етмәйенсә, был өлкәгә килеп инә алмай. Был йәһәттән, әлбиттә, ҡала халҡы алдараҡ тора.

**▶ Һеҙ был өлкәгә нисек килеп индегеҙ, нисек иҡтисадсы булып киттегеҙ?**

- 1955 йылда Темәс педучилищеһын тик яҡшы билдәләргә тамамлаған сағымда студенттарҙы эшкә йүнәлтеүсе комиссия мине уҡырға ебәрергә өгөтләне. Ул ваҡытта училищены "бишле"гә бөтөргәндәрҙе юғары уҡыу йорттарына имтиханһыҙ алалар ине. Комиссия ағзаларына: "Мин ауылға ҡайтып, әсәйгә ярҙам итәм. Йүнәлтмәне башҡаларға бирегеҙ", - тим. "Юҡ! Һин уҡырға китергә тейешһең!" - яуап бер. Беренсе көнөндә минең ризалыҡты ала алманылар. Икенсе көнөндә лә ризалашманым. Районның мәғариф бүлеге мөдире лә "Һин уҡырға кит!" тип ныҡышты. Мин, көсләшеп, ауылға ҡайттым. Мәктәптә директор булып Сәйет Ғәли улы Ниәтшин эшләй ине. Сәғәттәр юҡ, тинеләр. Әммә башҡа уҡытыусыларҙың 1-әр, 2-шәр сәғәтен алып, миңә 17 сәғәт йыйҙылар шулай ҙа. 9 предметтан уҡытып (ҡайһы бер предметтарҙы махсус өйрәнергә тура килде) йөрөгән сағымда, шундай һығымтаға килдем: "Иҡтисад буйынса уҡырға китергә кәрәк!" 1956 йылда уҡырға индем. Университетты тик яҡшы билдәләргә генә тамамланым. Хәҙер мине Мәскәүгә аспирантураға ебәрергә булып киттеләр. Ризалаштым. Тик бер әтнәкә килеп сыҡты - аспирантураға барырға тәҡдим алырҙан алда мин Баймаҡҡа эшкә ҡайтырға йүнәлтмә алып өлгөргәйнем. Министрлыҡ аспирантураға ебәрмәне лә ҡуйҙы. Закон ҡаты ине. Шулай итеп, аспирантураға юлланыр алдынан ике йыл Баймаҡҡа ҡайтып эшләнем. 1963 йылда СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалына Иҡтисад буйынса ғилми-тикшеренеүҙәр бүлегенә кесе ғилми хеҙмәткәр булып эшкә урынлаштым. Мәскәү иҡтисад институтына аспирантураға индем. Диссертацияны уңышлы яҡлап, иҡтисад фәндәре кандидаты булып, Өфөлә эшләй башланым. 1973 йылда сектор мөдире итеп һайланылар. 1987 йылда докторлыҡ диссертациямды яҡланым. 90-сы йылдарға тиклем 19 ғилми хеҙмәткәрҙән торған ошо сектор менән етәкселек иттем. 1990 йылда Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов иҡтисад буйынса үҙенең кәңәшсеһе сифатында Президент аппаратына эшкә саҡырҙы. 1997 йылда миңә 60 йәш тулып китте. Дәүләт хеҙмәтендә 60 йәштән пенсияға оҙаталар. Шунан мин фән өлкәһенә кире ҡайттым. Бөгөнгө көндә мин Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең иҡтисад институтында һәм Башҡортостан Фәндәр академияһында эшләйем, шулай уҡ Башҡорт дәүләт университеты Иҡтисад, бизнес, финанс институтының Менеджмент һәм Маркетинг кафедраһы профессорымын. Унда башлыса аспиранттар, магистрҙар менән эшләйем.

**▶ Һеҙгә ошо көндәрҙә 80 йәш тулды. Шундай ауыр өлкәлә эшләп, нисек шундай яҡты зиһенле, йәш ҡала алдығыҙ?**

- Әлеге уңыштарымды, һеҙҙенсә әйткәндә, йәш күренеүемде эшкә бирелгәнлегем менән аңлатыр инем. Мин эшләргә яраттым. Фән - минең тормошомдоң иң яуаплы, иң ҡыҙыҡлы өлөшө. Йәш ваҡытта отпускыларҙа ла ял итмәй эшләй торғайным. Шәмбе, йәкшәмбе көндәрендә сәғәт 6-нан тороп, ғаиләнән ҡасып, эшкә китеп, 10-12 сәғәттәргә тиклем эшләп ҡайта инем. Фәнгә бирелгәнлегем мине төрлө алама ғәҙәттәрҙән дә һаҡлағандыр, тип уйлайым. Беҙҙең заманда эскелек көслө булды бит. Шул арҡала бынамын тигән егеттәр әрәм булды. Фәнгә бирелеүем был афәттән ситтәрәк торорға ла ярҙам иткәндер, тип уйлайым. Хеҙмәткәрҙәремә генә түгел, мин үҙемә-үҙем дә ныҡ талапсан кешемен. Һәр көнөмә план ҡорам, шул пландарҙы үтәмәйенсә, эш көнөмдө тамамламай торғайным. Әгәр ҙә төрлө йыйылыштар, ултырыштар арҡаһында планлаштырылған эшем ҡалһа, уларҙы өйгә ҡайтып, барыбер тамамлап ҡуя инем. Эшкә бирелгәнлек һәм фән юлынан тайпылышһыҙ барыу фекерләү ҡеүәмде үҫтергәндер, мине илһамландырғандыр. Миңә фән донъяһына юл асҡаны өсөн Аллаға рәхмәтлемен.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Абруйлы ҡунағыбыҙ Мазһар Насибулла улы менән ике сәғәткә яҡын аралашып, уның республика төбәктәре өсөн бихисап эш башҡарыуы тураһында белдек. Атап әйткәндә, Башҡортостандың Урал аръяғы һәм төньяҡ-көнсығыш райондарҙың иҡтисади хәлен яҡшыртыу буйынса оҙаҡ йылдар эшләгән белгес бөгөн дә ошо йүнәлештә тикшеренеүҙәрен дауам итә. "Беҙҙең тәҡдимдәрҙе тормошҡа ашырыуға республиканың мөмкинлектәре генә самалы. Юғиһә, ошо райондарҙың хәле күпкә яҡшыраҡ булыр ине", - ти ул.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ
яҙып алды.**

**✓ Кабинетҡа теге ҡатын килеп инде. Һәр ваҡыттағыса, биҙәнгән-яһанған, хуш еҫ килә. Иң аптыратҡаны шул, ул тап үткәндәгесә кейенгән, тик костюм-салбары ла, башындағы эшләпәһе лә, ҡулындағы сумочкаһы ла ҡара төҫтә.**




Иван Иванович бар йәһәттән зыялы, күп уҡый, күпте белә, униң менән аралашыуы мауыҡтырғыс, һәм шул уҡ ваҡытта ауыр һәм яуаплы ла, уйламағаныраҡ хәбәр ысҡындырһаң, таҡыр аҡыл, наҙан кимәлендә ҡалыуыңды көт тә тор. Уларҙың һәр береһенең башҡараһы мәшәҡәттәре көнәлгәре билдәле, ә фельдшерҙар араһында эш түбәндәгесә бүленгән, мин - табип урынында ауырыуҙарҙы ҡабул итәм, Андрей - йәнәшәләге кабинетта уколдар ҡаҙай, кирза итек өйкәүҙән күберсегән яраларҙы бәйләй, ҡатмарлы булмаған физиотерапевтик процедураларҙы үткәрә. Күптән түгел старшина погондарын таҡтым, ә Диденко һаман да өлкән сержант, шулай булғас, икебеҙ араһындағы өлкәнлек, беренселек кемдең яғында икәнлеге һүҙһеҙ ҙә аңлашыла. Диденко - бурыстарына илкеһалҡы ҡараған, белем кимәле лә урта саманан уҙмаған, өҫ-башын әрпеш, шаптыр йөрөткән, табәнәк буйлы тыңҡыш кәүҙәле кеше, өҫтәүенә, үҙ яйын һәм файҙаһын ҡараған, ҡайырган шылғаяҡ та. Шул йылғырлығы арҡаһында һайлап алыуҙы унышлы үтеп, сержант мәктәбендә хеҙмәт итергә ҡалды ла инде. Ул башта ауыл хужалығы техникумының ветеринария бүлеген бөтөрөп, бер аҙ ауылда һөнәре буйынса эшләп алғас, медицина училищеһен тамамлаған, шуға йыш ҡына, ике дипломлы белгесмен, тип шапырынырға ярата. Ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙ тап килмәй, әңгәмәбеҙ берекмәй, борсағыбыҙ бешмәй, шуға униң менән фәҡәт эш буйынса ғына аралашырға тырышам. Шулай ҙа Андрей Диденко эшкә ашмаҫ йән түгел, ҡара шөгөлгә талымһыҙ, әрһеҙ, үпкә-йәбергә тиҙ онотоусан, ихласлығы ла бар. Ул ҡырҡҡан түмәрҙәй ҡыҫҡа буйлы булһа, мин, киреһенсә, һонтор кәүҙәле, аҫҡалаҡ йөҙлө, төҫ-башҡа урта саманан уҙмағанмын. Гүзәл заттарҙың иғтибарын артыҡлап йәлеп итерлек булмағас, баҙнатһыҙлыҡ та барҙыр, ҡыҙ-ҡырҡын, билдәле, әрһеҙҙәрҙе, эт ҡайыштарын ярата, яҡын күрә. Сервантестың әҫәрендәге геройҙарға сағыштырырға теләп, Диденко менән мине йәнәш баҫтырһалар, моғайын да, ҡарт алаша өҫтөндәге Дон Кихотҡа һәм ишәккә атланған Санчо Пансаға оҡшап ҡалыр инек.

Өлкән лейтенант Лыков тотош санчасты миңә ышанып тапшырған, тиһәң дә була, ә үҙе униһын-быныһын йүнләп, хужалыҡ эштәре менән мәшғүл, башҡа ойоштороу мәшәҡәттәре артынан йүгерә. Ул йыш ҡына: "Һинең Хоҙай тарафынан бирелгән һәләтең бар, ауырыуҙы күнелең менән һиҙәһең, тояһың, шуға диагнозды ла хаталанмай ҡуяһың",- тип маҡтай. Бәлки, шулайҙыр ҙа, өләсәйем тирә-яҡта билдәле имсе, кендек әбейе, өшкөрөм-төкөрөмө килешкән зат булған, уны эҙләп ер аяғы, ер башынан килгәндәр. Офицер ҡатындары, бала-сағаһы ҡала поликлиникаһына барып тормай, тура бында мөрәжәғәт итә. Ҡабул итәм, ҡулымдан килгән ярҙамымды күрһәтәм.

Санчастең бер мөйөшөндә караушат, тумбочка һыймалы бәләкәй генә бүлмәм дә бар, шунда йоҡлап, ашханала көнөнә өс мәртәбә офицерҙар паегы менән тамаҡланам. Ашнаҡсыларҙың үтемле ризыҡты бүлмәй һәлдәре юҡ, проба алғандан һуң, рөхсәт биреп, ашарға яраҡлы, ашханала тулы тәртип, таҙалыҡ, тип журналға ҡултамғамды ҡуйғас ҡына бешерелгәнде курсанттарға тараталар. Ҡайһылыр кимәлдә бойондороҡһоҙ, үҙаллы көн итеүем Андрейға оҡшамай, оҡшамай ғына түгел, һарыуын ҡайната, шуға ул яйы сыҡҡан һайын бәйләнеп, ҡаҙалып, төрттөрөп алырға әҙер.

Иртәнге ҡабул итеүҙе башлап та өлгөрмәнем кабинетҡа өҙә баҫып майор Слуквин килеп инде. Униң атлап йөрөшөнән, үҙен тотошонан башкөллә хәрби кеше икәнлеген күҙалларға мөмкин. Башҡа политработниктар ише оҙон-оҙаҡ сәйәси вәғәз һөйләргә ярамтай, әйтерен ҡыҫҡа, әммә аңлайышлы итеп еткерә. Урта буйлынан юғарыраҡ, ныҡ, сыныҡҡан кәүҙәһен бөтә ерҙә лә килешле тота, ә хәрәкәттәре ышаныслы, киҫкен, бит-йөҙө лә ирҙәрсә сибәр, бер һүҙ менән әйткәндә, ҡатынына бынамын тигән иш. Уставҡа ярашлы үрә ҡаттым.

- Ни эш бөтөрәһең? - Майор шөғөләмдә дауам итергә ишаралап, илтифатһыҙ ҡул һелтәне. - Ә һин эш урынында санчаста бит, шулай булғас, уҡлау йотҡандай һеребмә!

- Билдәле, ауырыуҙар ҡабул итәм. - Һүҙ булмағанда һүҙ булһын тип бирелгән дежур һорауға яуап ҡайтарҙым да урыныма ялпашып, инеүсегә һынаулы текәлдем. - Һеҙ ҙә ултырығыҙ. - Урын тәҡдим итеп эргәмдәге кушеткаға ымланым.

- Нимә? - Слуквин үсал тексәйҙе, мин дә субординацияны боҙоуымды, урынһыҙ һүҙ ысҡындырыуымды шәйләп, шымып ҡалдым.

Майор үҙенә урын тапмағандай, кабинетты иңләп, улай-былай йөрөп алды ла ҡаршыма баҫып, йомолған йоҙроҡтарын өҫтәлгә ҡуйып таянды:

- Старшина, коридорҙағы һалдаттарҙы кире роталарына ҡайтарҙым, берәй сәғәттән йә төштән һуң килерҙәр.

- Ә миңә нимә эшләргә бойорорһоғоҙ, иптәш майор?

- Һинә тип килдек. Минең ҡатынымды ҡабул ит!

- Бәлки, һеҙгә ҡала поликлиникаһына барырға кәрәктер, унда тар профилле, юғары белемле белгестәр эшләй, кәрәкле аппаратуралар ҙа етерлек. - Бер ҡатлылығыма барып тағы үҙемдекен тыҡыным.

- Быны нимә, һалдат! - Дорфа бүлдерҙе. - Ҡайҙа барырға, кемгә мөрәжәғәт итергә үҙебеҙ беләбеҙ! Бындабыҙ икән, һин хәҙер, кисекмәҫтән беҙҙе ҡабул итәһең!

- Үтәргә рөхсәт итегеҙ! - Йәнә үрә ҡаттым.

- Ултыр, тим бит. Быны шулай! Коридорҙа көтәм!

Бер нисә минуттан кабинетҡа теге ҡатын килеп инде. Һәр ваҡыттағыса, биҙәнгән-яһанған, һәр ваҡыттағыса унан иҫерткес хуш еҫ килә. Иң аптыратҡаны шул, ул тап үткәндәгесә кейенгән, тик костюм-салбары ла, башындағы эшләпәһе лә, ҡулындағы сумочкаһы ла ҡара төҫтә.

Пациентым тыйнаҡ ҡылаһып, ҡаршыма ултырҙы, алдыма медицина картаһын һалды. Бер-беребеҙҙе һынап һирпелешкәс, унайһыҙ тынлыҡ урынлашты.

- Слуквина Яна Григорьевна... - тип уҡый башланым йоҡа карта тышына күҙ һалып.

- Хәйретдиновна. - Төшөнөп етмәүемде күреп өҫтәне. - Яңылыш ишетмәнегеҙ, ул мин булам.

- Быны, ниһайәт таныштыҡ та Яна Хәйретдиновна. Ә мин старшина Азамат Баймөхәмәтов.

- Майор Лобановтың ҡатыны кисекмәҫтән санчасть фельдшерына мөрәжәғәт итергә ҡушҡайны. Ул һеҙ булып сыҡтығыҙмы?

- Эйе, мин. Училищынан армияға алғайнылар.

- Ә мин Ленинград университетының графика бүлеген тамамлағайным. Йәшәү урындарыбыҙ йыш алышынғанлыҡтан, һөнәрем буйынса эшләмәнем дә тиерлек. Әле ваҡытлыса урындағы сәнғәт мәктәбендә дәрестәр алып барам.

- Быны, ҡайһылыр кимәлдә таныштыҡ та.

- Һеҙҙе һәйбәт белгес тиҙәр. Шул Лобановтың малайына дөрөҫ диагноз ҡуйып, мәләндә өлкә дауаханаһына барырға ҡушып, үлемдән алып ҡалғанһығыҙ икән.

- Эйе, хәтерләнем, малайҙа менингит симптомдары бар ине, ә врачтар уны грипптән һуң ҡалған өҙләгөү, тип ҡабул иткәндәр. Был урында ниндәйҙер шаҡ ҡатырлыҡ асыш яһамаһым бит, бары һөнәри бурысымды ғына үтәнем. Һәйбәт белгеслеккә килгәндә, арттырыңҡырап ебәргәндәр. Үҙемә ҡалһа, махсус урта белемле, һоро ғына медицина хеҙмәткәремен.

- Шәхесегеҙҙе түбәнһетмәгеҙ. Килешмәй. Маҡтайҙар икән, тимәк, быға лайыҡһығыҙ.

- Иғтибар менән тыңлайым. - Алдымдағы медицина картаһының биттәрен асып, унда яҙылғандарҙы ҡараштыра башланым. - Нимә борсой, нимәгә зарланаһығыҙ?

- Һис ҡасан, бер нәмәгә лә зарланмайым!

- Мин дә ҡайһы саҡ уйымдағын уйлап әйтмәй хата ебәрәм. Ни сәбәптән беҙгә мөрәжәғәт итергә булдығыҙ, тимәксемен.

- Сәбәптәрме? - Яна әйтергәме-юҡмы тигәндәй, икеләнеп ҡалды. - Сәбәптәрме?.. Әсәйем дә яман сирҙән вафат булғайны... Бында шикләнеү һәм ҡурҡыу алып килде...

- Әйҙәгеҙ, ваҡытынан алда ҡурҡмай торайыҡ. Бөтә кеше лә сирләй, сирләй һәм сәләмәтләнә. Тартынмай һәм йәшермәй генә әйтегеҙ, ҡайһы ерегеҙ ауырта?

- Эсемдең түбәнге яғы...

- Ҡарайыҡ улайһа...

Яна һынын турайтты. Дауаханаға килгән һәр пациенттың кисерештәре билдәле, улар дарыу еҫе һеңгән, медицина инструменттары урынлашҡан кабинетта, аҡ халатлыларҙың алдында ҡурҡып, юғалып ҡалалар. Пациентымды ҡабул итеү шарттарына яраҡлаштырырға теләп, гәҙәти генә итеп тәҡдим иттем:

- Иң башта йөрәгегеҙҙе, үпкәгеҙҙе тикшерәйек, шунан тонометр ярҙамында ҡан баҫымын үлсәрбеҙ.

- Униң өсөн миңә сисенергәме?

- Кейем аша тыңлай алмайым... Әгәр мөмкин булһа... - Сәбәпһеҙгә бурҙаттай ҡыҙарындым.

- Мөмкин булмаһа нимә эшләрһегеҙ?

- Барыбер әйткәндәремде үтәргә тура килер, барлыҡ дауалау учреждениеларында ла тәртип ошолай ҡуйылған.

- Улайһа, артығыҙ менән борологоҙ...

- Мөйөштәге ширма артында кейемдәрегеҙҙе ҡалдырһағыҙ, ҡулайлыраҡ булыр.

Яна шаршау артында апаруҡ ваҡыт юғалып торғандан һуң, сыҡты ла ҡарашын иҙәнгә ҡаҙап, ҡаршыма баҫты. Өшөгәндәгеләй ҡулдары менән тәнен ҡосаҡлап, түштәрен боҫормалаған. Ярым шәрә ҡатынҡыҙ алдында ҡойолдом да төштөм: көтмәгәндә тәнем уттай янды, маңлайымды тир дымы ҡапланы, күҙ алдарым ҡараңғыланды, ят әйбергә тәүләп ҡағылғандай, ҡулдарымдың енелсә дерелдәүен тойҙом. "Иҫәүән, аҙғын, тинтәк, һин бит ҡатынҡыҙҙы түгел, ауырыуҙы ҡабул итәһең!.." Үҙ-үҙемде битәрләү ҡайһылыр кимәлдә тынысландыра төштө, фонендоскоп осон ҡолаҡтарыма кейеп, мембрананы түштәрҙе ярым-ярты ҡаплаған, тән һыҙаттарын үтәләй күрһәткән йоҡа бюстгалтер аҫтына терәнем. Яна ла минең һымағыраҡ тулҡынланыулы тойҙо кисерәләр, йөрәге күкрәк ситлеген дөбөрҙәтеп бейей, аҡтан-аҡ тәнендә ҡош тиреһе ҡалҡҡан, бармаҡтарым яңылыш ҡына яланғас еренә тейгәйне, өйрәтелмәгән байталдай тертләп китте. "Егет-еләң ҡулы яңылыш ҡына ла ҡағылмаған йәш ҡыҙ һымаҡ, ир ҡатыны тип әйтмәҫһең дә..."

- Йөрәгегеҙҙең һүғыуы, пульсығыҙҙың тирбәлеүе норманан юғары, ул, әлбиттә, ауырыу түгел, тулҡынланыу билдәһе генә, үтер. Ә бына үпкәгеҙ таҙа. Хәҙер салбарығыҙҙың төймәһен ысҡындырып, кушеткаға ятығыҙ...

- Миңә? Ятырға?

- Кабинетта икәүбеҙ генә бит.

Кире ҡаҡҡыһыҙ талабыма ирекһеҙҙән ғәйре буйһонған Яна әйтелгәнде үтәне.

- Тубыҡтарығыҙҙы бөгөгөҙ, ҡорһаҡ мускулдарын көсәндермәгеҙ, тигеҙ тын алып, ҡулдарығыҙҙы кәүҙәгеҙ буйғайына һалығыҙ... - Бармаҡтарым менән тығыҙ һәм шул уҡ ваҡытта бәрхәттәй шыма ҡорһаҡтың аҫҡы өләшен ҡапшаным. - Эсегеҙ йомшаҡ, киҫкен ауырыу билдәләре юҡ... Аппендицитҡа операция яһатҡанһығыҙ икән...

- 5-6 йыл элек.

- Балаларығыҙ бармы?

- Павел Сергеевич менән икәү генәбеҙ.

- Ауырға ҡалғанығыҙ ҙа булманымы?

- Бер тапҡыр. Ике ай ғына йөрөттөм. Старшина, һеҙ бөтә ауырыуҙарҙы ла бына ошолай тәпсәнеп йәҙәтәһегеҙме?

- Ситуацияға ҡарап. Һайлаған һөнәрем документаль, тарихи прозаға оҡшаш, әммә шиғырҙар ҙа уҡырға яратам.

- Әлеге мәлдә кемде уҡыйһығыҙ? - Сәстәре таралып һибелгән баш юғарыраҡ ҡалҡты.

- Бында бит санчасть. Һеҙ ҡабул итеүҙә, ә мин тәғәйен үтәргә тейеш бурысымды башҡарам. Ә шиғырҙар уҡыуымды һүҙ булмағанда һүҙ булһын, тип кенә әйттем.

- Барыбер. Сирле кешене әсе дарыуҙар менән генә түгел, һүҙ менән дә дауалайҙар ҡайһы саҡ.

**(Дауамы бар).**

*Зөлфиә ХАННАНОВА*

# УРАП ТА ҒЫНА ҠАЙТЫР ЕРҘӘР ҘӘ БАР,

## Ҡурай ҙа ғына тартыр ирҙәр бар!



### Ағинәйҙәр маршы

Ағинәйҙәр күңеле - талир тәңкә,
Шуға нурлы минең баш йортом.
Милләт рухын бәпләр
Ил инәһе барҙа
Йәшәр әле, йәшәр башҡортом!

Ағинәйҙәр аҡылы - алтын һандыҡ
Ябай түгел улар: сер-ҡатын!
Иргә инен терәр
Ил инәһе барҙа
Йәшәр әле, йәшәр башҡортом!

Ағинәйҙәр рухы - изге бетеү
Ят күҙҙәрҙән һаҡлар ил ҡотон.
Ил, тип, доға ҡылыр
Ил инәһе барҙа
Йәшәр әле, йәшәр башҡортом!

### Ултыртайыҡ ҡарағайҙар!

Ҡарағайҙы ҡолаттылар,
Торманылар һис бер аяп.
Ул йығылғас, урынында
Ҡалды төпһә, ҡалды таяҡ.

Ҡарағайҙы ҡолаттылар -
Ул урманда берәү ине,
Йәш үҫенте ағастарға
Таяныс һәм терәү ине!

Дауылдарҙа ҡалҡан булған
Ундай ағас үҫә һирәк,
Ул йығылғас, урындарын
Баҫып алды тал да тирәк.

Ә илде һуң кем ҡурсалар,
(Арта бара шөбһәләрем,
Күргән һайын урмандарҙа
Ҡарағайҙың төпһәләрен...)

Тал да тирәк әрһеҙ инде,
Ҡайҙа ғына юҡтар улар.
(Шыйыҡ талдан һуйыл эшләп,
Халҡыбыҙҙы һуктыралар!)

Бер көн минең башымды ла
Оҙатһалар Кроношпанға,
Кемдер әйтер: "Батыр ине!"
Кемдер әйтер: "Алдашҡанға!"

Яла яғып маташырҙар,
Ундай халыҡ ялағай ныҡ,
Тик шыйыҡ тал үрсей алмай,
Үҫкән ерҙә ҡарағайлыҡ!

Тәрҙәгеһен ҡолатһалар,
Төпкөлдәрҙә бар ағайҙар!
Бейек тауҙың үренә лә,
Ил-йортобоҙ түренә лә
Ултыртайыҡ ҡарағайҙар!
Ултыртайыҡ ҡарағайҙар!

### Кемегеҙгә нимә ҡалдырырға?

Кемегеҙгә нимә ҡалдырырға:
Алдарымда ята аҡ ҡағыҙ:
Һеҙ үҙ-ара мөлкәт бүлешкәндә
Бер-берегеҙҙе, зинһар, ҡаҡмағыҙ!

Ни үкенес әгәр ҡыҙыҡһағыҙ
Мал-мөлкәткә, затлы әйберҙәргә,
Өйрәнегеҙ йәндәй туған күреп
Бер-берегеҙҙе тәүҙә ҡәҙерләргә.

Һаулығығыҙ булһын, аҡсаға ни
Һатып алып була йөҙ юрған,
Тик булмаһын һөмһеҙ әҙәмдәр, тип,
Һеҙҙең тарафтарҙан йөҙ борған!

Иманығыҙ булһын. Иманһыҙлыҡ -
Ул ҡыуаныс түгел, ҙур гәрлек!
Изге эштәр күберәк башҡарығыҙ,
Бәндәселек менән ҡайсаҡ ҡылған
Бар гонаһтар өсөн түләрлек.

Балаларым! Китеп барһам әгәр,
Кәфендәргә мине төрөгөҙ,
Риза булһын һеҙҙән Хаҡ Тәғәлә,
Тыуып ҡына үҫкән ерегеҙ.
Риза булһын халҡым! Ейәндәрем
Туған телдең бөҫөн һаҡлаһын!
...Бер көн килеп әгәр Әжәл ҡаҡһа,
Мин йәшәгән йорттоң ҡапҡаһын,

Илашмағыҙ. Үкенерлек булмаҫ,
Әйткәнемде теүәл тотһағыҙ!
Кемегеҙгә нимә ҡалдырырға?
Алдарымда ята аҡ ҡағыҙ...

### Һаҡлар өсөн

Ырымбурҙан Силәбегә тиклем
Һарытауҙан алып Һамарға
Киҫкеләнгән башҡортомдоң ерен
Нисек итеп бөгөн ямарға?..

Ошо ергә беҙ бит һәр саҡ хужа,
Беҙ ошонда һәр саҡ аҫаба.
(Сит ҡулдарға күсеп үкһеҙ ҡалған
Нисә ауыл, нисә ҡасаба!)

Йәсин уҡып урап сығыр инем,
Еребеҙҙе ҡайҙан ҡамарға?
Минзәләмдең башҡорттарын барлап,
Ҡуҙғалайым микән Һамарға?

Пермь менән Ҡурған тарафына...
Мин юлдармын шунан доғамды,
Таныр өсөн һәр бер изге затты,
Табыр өсөн һәр бер туғанды...

Сәләмдәрем Силәбегә етер,
Доға көсөн тойор Ырымбур!
Һаҡлар өсөн ерем бөтөнлөгөн
Беҙ йыйырбыҙ шунан оло ҡор...

Иҫбатларға теләп башҡортлоҡто
(Күрһәтергә кемдең кемлеген),
Яуға сабыр өсөн түгел, дуҫтар,
Һаҡлар өсөн Ерҙең кендеген!

### Утайҙар...

Утайҙар халҡымды, утайҙар.
Кем ҡалыр был ерҙә - ҡытайҙар?
Һағынып ирәбе саҡтарын
Ер-һыуҙар, сал тауҙар һыҡтайҙар.
Берәүҙәр ҡаныға тауыма,
Берәүҙәр телемде быуырҙай.
Берәүҙәр юхалап күҙ быуа,
Берәүҙәр ҡылана убырҙай.
Ҡулдәр бит - ул беҙҙең күҙ йәштәр,
Йылғалар - ул ҡанлы ярабыҙ.
Ҡәҙерле беҙгә һәр беребеҙ
(Былай ҙа аҙ ҡалып барабыҙ)!
Тарханлыҡ юҡ хәҙер... Тарҡаулыҡ!
Белмәйем, ҡасан һуң туктайҙар?..
Береһен бер(е)һенә һөсләтеп,
Утайҙар халҡымды, утайҙар...

### Кем һуң нимәне һайлай...

Халыҡтан көләп була,
Халыҡты бүлеп була,
Ҡурҡыштан бөләп була,
Халҡым, тип, үлеп була -
Кем һуң нимәне һайлай...

Халыҡты һөрөп була,
Алҡымын бөрөп була,
Эт һымаҡ өрөп була,
Илгә йән өрөп була -
Кем һуң нимәне һайлай...

Халыҡтан ҡасып була,
Халыҡты аҫып була,
Халыҡты баҫып була,
Уға юл асып була -
Кем һуң нимәне һайлай...

Халыҡты һөйөп була,
Уға сүп өйөп була,
Бошоноп, көйөп була,
Ҡуҡтәргә сөйөп була -
Кем һуң нимәне һайлай...

### Ватаным, тип...

Ҡыйыҡтағы ике әләм
Әллә бәхетем, әллә бәләм.
Береһе менән күккә ашам,
Береһе өсөн түбәләнәм.
Ҡыйыҡтағы ике әләм
Йыраҡтарҙан бирә сәләм.
Берсә һөйөп, берсә көйөп -
Ватаным, тип, үрһәләнәм...

### Сөйөмбикә манараһы янында

Ҡыҙыҡтырмай мине бер ҙә
Һинең йәшәгән өйөң,
Көс алыр өсөн йәнемә
Килдем мин, ғорур Сөйөм!

Манараңда ай йылмая,
Алаһыңдыр ҡот унан,
Милли рухың көсләрәктер
Хатта тамуҡ утынан.

Һин йәнеңде фиҙа ҡылдың
Һаҡлап иман-ырыҫты,
Бөгөн нисә татар ҡыҙы
Ҡыуандыра урыҫты?

Сөйөм! Милли ғорурлыҡтың
Тарат ергә ҡуҙҙарын,
Рухың менән ҡурсалап тор
Башҡорт, татар ҡыҙҙарын!

Уңда тәре, һулда тәре,
Күреп милләт аҙғанын,
Һинең кеүек манаранан
Ташланырға яҙмаһын!

### Өфө етә барыһына ла...

Йә, әйтегеҙ кемдән беҙҙә
Баш ҡаланы тарһыналар?
Өфө етә барыһына ла:
Ҡараһына, һарыһына ла.

Өфө етә һәммәһенә:
Төрөгөнә, әрмәненә,
Ҡытайҙар ҙа фатир табып,
Йәшәп ята эре генә.

Килгән бере сат йәбешә,
Береһе лә кире китмәй!
Илем, тиеп йәнен атҡан,
Ятаҡ тапмай башы ҡатҡан
Бер башҡортҡа урын етмәй...

* * *

Телһеҙ, моңһоҙ мин кем инде?
Йортһоҙ-илһеҙ - мин ҡайҙа?
Ауыҙлыҡһыҙ уйҙар кеүек
Аттар саба туғайҙа...

Аттар саба. Азатлыҡтың
Белә улар хаҡтарын.
Төнгәләккә тышамағыҙ,
Зинһар, башҡорт аттарын.

Тышамағыҙ. Ер күп бит ул
Рәсәй тигән киңлектә.
Исмаһам, бер таңға саҡлы
Аттар сапһын иректә!
Аттар сапһын иректә...

### Ҡыуанмағыҙ!

Йәнем ҡубарыла һөйләһәләр
Тыуған илкәйемде бөлгән, тип,
Кемдер уға бысраҡ өйгән, тип,
Кемдер унан әсе көлгән, тип.
Бер бөгөнмө беҙгә ҡаныҡҡандар,
Һөйләгәндәр әсе ялғанын.
Онотолған, тиеп, уйлайҙармы
Ошо ерҙең көлгә ҡалғанын?!
Көлгә ҡалғас ҡабат ҡалҡыр өсөн
Ниндәй ҡөҙрәт кәрәк, билдәһеҙ?!
Илкәйемә бысраҡ өйгән йәндәр,
Минең өсөн тере һөлдә һеҙ!
Тере һөлдә... Ҡурай моңон көткән
Ҡәберендә һуңғы башҡорттон,
Ә бит һеҙҙә шундай яҡын күреп
Ҡабул иткән минең баш йортом.
Тыныс урын эҙләп һыйынғандар,
Йә әйтегеҙ әле, һеҙме шәп?

Аҫаба ла башҡорт ерҙәрендә
Минең халҡым түгел килмешәк!
Ҡыуанмағыҙ! Әле һеҙ белмәгән
Халҡым күңелендә серҙәр бар.
Урап та ғына ҡайтыр ерҙәр ҙә бар,
Ҡурай ҙа ғына тартыр ирҙәр бар!

### Күрешергә һуҙ усыңды...

Миллионлаған
башҡорт башын һалды,
Миллионлаған!
Түгел йөҙ, ҡыр(ы)ҡ.
Әле һаман беҙҙең баш осонда
Яуыз көстәр төйнәй йоҙороҡ!

Беҙ бит, Рәсәй, һинә тоғро ҡалдыҡ,
Тоғролоҡҡа тарих өйрәтте.
Туған күреп беҙгә ус һуҙғанда,
Беҙ һуҙабыҙ һинә йөрәкте!

Миллионлаған
башҡорт башын һалды,
Миллионлаған!
Түгел йөҙ, ҡыр(ы)ҡ.
Һинең ҡулыңдағы бармаҡтар беҙ,
Бармаҡтарҙан төймә йоҙороҡ.

Бер бөртөгө уның һыҙлаһа ла,
Ауыртырға тейеш бөтә ҡул!
Нисек инде һинең ҡул суҡтарың
Береһе иптәш булһын, береһе - ҡол?

Беҙ бит, Рәсәй, һинә тоғро ҡалдыҡ!
Был ерҙәме, ситтә, алыҫта
Күпме аҫыл ирҙәр башын һалды!
Барыһы ла һинең намыҫта!

Бар милләттәр һине туған күреп,
Йәшәһендәр, тиңән, дуҫ булып...
Бөйөк Рәсәй! Бармаҡтарың торһон
Күрешергә һуҙған ус булып!

### Өнһеҙлек

Таш йорттарҙы гүйә йәнле итә
Үҙебеҙҙең милли орнамент,
Ошо матурлыҡҡа хайран ҡалып
Күҙҙе алмай, торам арбалып.
Боронғолоҡ күсә йәндәремә,
Хәтерләтмәй ҡалам сит илде,
Ата-бабам Урал тауҙарына
Ырып яҙған тарих шикелле
Бик күп әйбер һөйләй минә таштар.
Кәмһетелгән. Еңгән. Онталған...
Әммә бирешмәгән! Ана, нисек
Мең төстәрҙә балҡый баш ҡалам!
Түбәтәйле ҡарттар сифатында
Сәләм биргән кеүек таш йорттар.
Их, йәшәһен ине шул йорттарҙа
Милли кейем кейгән башҡорттар!
Һөйләшһендәр ине туған телдә
Аҫыл балалары халҡымдың!
Их, ҡысҡырғым килде ошо хаҡта!
Их, ҡысҡырғым килде... Тартындым.
Әллә ҡурҡтым микән? Уйланыммы
Үҙем тураһында иң элек:
Индәремдә - елән, ә телемдә -
Таш йорттарҙан күскән
Өнһеҙлек...

*✓ Ниндәй генә кимәлдә үтһә лә, мөнәжәт башҡарыу менән бәйле сараларҙың әһәмиәте юғары ҡала. Ана бит, Сибай ағинәйҙәренең саҡырыуын 250-нән ашыу кеше күтәреп алып, халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады өлгөһөн сәхнәгә алып сыҡты.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БИЛЕҢ НЕСКӘМЕ?

■ Бөгөн ниндәй матурлыҡ стандарттары "мода"ла икәнен беләһегеҙме? Белгестәр хәҙерге заман ҡатын-ҡыҙҙарына XX быуат башындағы гүзәл заттарға оҡшарға тырышырға кәңәш итә. Марлен Дитрих, Лорен Бэколл, Лили Джеймс, Марго Робби - уларҙың барыһының да бил үлсәмдәре 26,5 инч, йәғни, 67,3 сантиметр булған. Яныраҡ үткән һынауҙар һөҙөмтәһе буйынса тап ошо бил үлсәмен Британия ғалимдары идеаль тип тапҡан. Был сама менән 42-44 кейем үлсәменә тап килә. Был үлсәмгә һыйыу өсөн билдәле йондоҙҙар Ким Кардашян һәм Дита фон Тиз кеүек корсет йөрөтөргә лә кәрәкмәй, ти белгестәр. Дита фон Тиз үҙенең билен 56 сантиметрға тиклем кәметә алыуы менән билдәле, корсет менән тарттырып ҡуйғандан һуң, уның бил үлсәме 42 сантиметрға ҡалған. Икенсе яҡтан, һуңғы мәлдә ҡатын-ҡыҙҙарҙың бил күләме арта бара, был андроген гормоны тәьҫире менән бәйле. Был гормон ҡатын-ҡыҙҙы көслөрәк, сыҙамлыраҡ итә, әммә бил, эс тирәһенә май ҙа күберәк туплана. Шуға ла стандарттарға тура килмәйһегеҙ икән, быға көймәгеҙ, бында һеҙ түгел, тәбиғәт "гәйепле", ти тикшеренеүселәр. Етмәһә, өс йыл элек кенә ғалимдар, һау-сәләмәт кешенең бил үлсәме 80-85 сантиметрҙан кәм булмаҫҡа тейеш, тигән ине.

■ Астма менән аллергия ҡайнатылған һөт эсеүҙән барлыҡҡа килеүе ихтимал, тип раҫлай немец ғалимдары. Ҡайнатылмаған һөттә бактериялар күп тиеүселәргә уларҙың дәлилдәре лә бар. "Таҙа" ризыҡтар һәр ваҡыт организм өсөн файҙалы булмауы ла бар. Иммунитет барлыҡҡа килһен өсөн организм бактериялар менән осрашырға тейеш. 6 йыл дауамында барған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡайнатылмаған һөт эсеүсе балалар астма менән һирәк ауырыған. Иммунологтар әйтеүенсә, быны һөттәге Омега-3 тәьҫире менән аңлатып була. Ул ҡайнатылған, майһыҙландырылған һөткә ҡарағанда, яңы һауылған һөттә күберәк була.

■ Испан ғалимдары йоҡларға ятҡанда эргәгеҙгә гаджеттарҙы заряд йыйырға ҡуймаҫҡа кәңәш итә. Гаджет эргәһендә йоҡлаған кешенең организмында гормон системаһы эше боҙолоп, һимереүгә килтереүе ихтимал. Йоҡо бүлмәһендә заманса ҡоролмалар булғанда кешенең йоҡоһо туймай, кәйефе булмай. Йоҡо гормоны мелатонин бүлмә тулыһынса ҡараңғы булғанда ғына бүленә.

■ Төнгөләккә ашарға ярамай, тип раҫлай бөтөн табиптар ҙа. Тик әгәр ҙә ваҡытында ашап өлгөрмәгәндәргә нимә эшләргә һуң? Төнгә ҡарай ашауҙы зыянһыҙ итергә тырышығыҙ, тип кәңәш бирә диетологтар. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ас көйөнсә йоҡларға ятыуҙың шулай уҡ кире яҡтары бар. Ғалимдар күптәр раҫлаған, тамағы туҡ кеше яҡшырай йоҡлай. Йоҡлар алдынан нимәлер ҡапҡылап алыу ҡандағы шәкәр кимәлен нормаға килтерә. Шулай итеп, һуңға ҡалған киске аш майһыҙландырылған йогурттан тора ала. Унда диетик протеин бар, ул асығыу тойғоһон оҙаҡҡа баҫасаҡ, иң яҡшыһы - йогурт артыҡ татлы булмаһын. Эремсек тә сәләмәт туҡланыу рационынан. Йәшелсәләр шулай уҡ ярайһы ғына туҡлыклы ризыҡ, калориялары ла аҙ. Аҡ ит организмдың углевод менән майҙарҙы энергияға әйләндереүен яйлата.

АФАРИН!

# МӨНӘЖӘТТЕҢ МОҢЛО СЫҢЫ...

## күңелдәрҙе әсир итә

**Фольклорсы ғалим Хәбибулла Ғәбитов яһаған һығымта был: "Башҡорт халыҡ ижадының 90 проценты юғалып, беҙҙең ҡулыбыҙға 5-10 проценты ғына килеп еткән..." Әле генә ана шул юғалта яҙғандар араһында дини ауыҙ-тел ижады өлгөһө - мөнәжәт тә бар ине. Рухиәтебеҙҙең башҡа өлгөләре араһында үҙенең лайыҡлы урыны булған мөнәжәтебеҙҙе тергеҙеү, халҡыбыҙға ҡайтарыу, өйрәнеү юлындабыҙ. Эпосы булған, мөнәжәт һәм нәсихәттәр әйткән халыҡ икәнебеҙҙе раҫлау юлындабыҙ. Ошо көндәрҙә Сибайҙа үткән Мөнәжәт башҡарыусыларҙың IV төбәк-ара конкурсы ошо юлдағы тағы бер ҡаҙанышыбыҙ булды.**

Быға тиклемге ошондай уҡ сараларҙан һуңғы фекер алышыуҙарҙа, гәзиттәрҙә баҫылған мәҡәләләрҙә, радио-телевидениенан яңғыраған сығыштарҙа: "Нинә был конкурс ағинәйҙәр кимәлендә генә ойоштороло, киләсәктә уны БР Мәғариф һәм Мәҙәниәт министрлыҡтары ойошторған республика йә Рәсәй кимәлендәге сара итеп нарыҡлау кәрәк", - тигән тәҡдимдәр яңғырағайны яңғырауға. Былтыр РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Йыһанур ҡыҙы Рәхмәтуллина ошо мөнәжәт конкурсынан һуң Сибайҙа һәм Баймаҡта үткән мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең республика кәңәшмәһендәге сығышында ла ошо тәҡдимде ҡеүәтләгәйне: "Балаларыбыҙ индустарҙың мантраларын ятлағансы, үҙебеҙҙең мөнәжәттәрҙе өйрәнһен... Киләсәктә мөнәжәт, нәсихәттәрҙә әйтелгән өгөттө, аҡылды йәштәр күңеленә лә күсерергә тейешбеҙ..."

Ошондай матур фекерҙәр яңғырауға ҡарамаҫтан, быйыл да мөнәжәт конкурсы Сибай ҡала округы хакимиәте, Сибай сәнғәт колледжының "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе, Сибай ҡалаһының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ойошторған сара булараҡ ҡына үтте. Ярай әле, Республика халыҡ ижады үҙәге, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, БР Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы, "Киске Өфө" гәзите редакцияһы, шулай уҡ "Башбланкиздат" предприятиеһының генераль директоры Гөлсәсәк Әлибаева бағыусылар сифатында сараны күтәрмәләне.

Хәйер, ниндәй генә кимәлдә үтһә лә, мөнәжәт башҡарыу менән бәйле сараларҙың әһәмиәте юғары ҡала. Ана бит, Сибай ағинәйҙәренең саҡырыуын, изге ниәтен республиканың төрлө райондарынан һәм Силәбе өлкәһенән 250-нән ашыу кеше күтәреп алып, халҡыбыҙҙың илаһи ауыҙ-тел ижады өлгөһөн сәхнәгә алып сыҡты. Быуындан-быуынға күсә килгән, һигеҙ оҗмах асҡысы һәм ике донъя ҡиммәттәрен аңлаған өләсәй-әсәйҙәренән отоп алған мөнәжәттәрҙе йәштәргә ишеттерергә ниәтләп килеүсе етенсе тиҫтәне ашатлаған оло ағинәйҙәр ҙә, үҙҙәренең төбәгендә ауыҙ-тел ижадының был төрөн яңынан тергеҙеүҙе маҡсат итеүсе йәш ҡатын-ҡыҙҙар ҙа зур ихласлыҡ менән ҡатнашты унда. Сибай ҡалаһы һәм Хәйбулла, Учалы, Йылайыр, Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән, Күгәрсен, Ейәнсура райондарының мөнәжәт башҡарыусылар мәктәбе ныҡлы нигеҙгә таянып килә, уны артабан үҫтерәһе, камиллаштыраһы ғына ҡалды, тигән һығымта яһалһа, тәүге тапҡыр ғына ҡатнашҡан Ғафури районының Сәйетбаба, Белорет районының Сосновка ауылы ағинәйҙәренең сығыштары ла "Илтифат иткәндә,









✓ ***Мөнәжәтебеҙ ҙә юғалған ғилемебеҙ иҫәбендә ине, шөкөр, халҡыбыҙҙың был аҫыл хазинаһы берәмтекләп йыйыла, танытыла, моңло сыңы көнделдәрҙе яулай.***



ныҡышмалыҡ күрһәткәндә, мөнәжәтте һәр ҡайҙа өйрәнергә, йыйындарыбыҙ күрке итергә мөмкин", тигәнгә инандырҙы. Ә Силәбе өлкәһе Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сосновка райондары мөнәжәтселәре тағы ла ысын мөнәжәт өлгөһө менән һоҡландырҙы, күптәргә әле уларҙан өйрәнәһе бар, тигән һығымта яһатты. Сарала шулай уҡ тәүге тапҡыр ҡатнашҡан, әммә быға тиклем үҙҙәрендә бер нисә йыл рәттән төбәк-ара мөнәжәтселәр конкурсы үткәрә килгән Стәрлебаш ағинәйҙәренең "Күндерәккәй" ансамбле лә бик матур, юғары кимәлдә сығыш яһаны. Әммә баһалама комиссияһы ағзалары уларҙың сығышын мөнәжәт түгел, ә бәйет әйтеү булды, тип баһаланы.

Ысынлап та, халыҡ араһында нәсихәт, бәйет, мөнәжәттәрҙе айырмаусылар, "Нимә һуң ул мөнәжәт?" тип һораусылар бихисап. Белмәүселәр был хаҡта дин әһелдәренән һорай, йә булмаһа башҡорт тарихын, уның мәҙәниәтен өйрәнеүсе элекке ғалимдарҙың хеҙмәттәренә күҙ һала алыр ине. Мәҫәлән, Сергей Рыбаков аңлатмалары буйынса, мөнәжәт - ул "Аллаға өндәшеү, дини йөкмәткеле шиғырҙар". Башҡорт тарихын өйрәнеүселәр иһә ошоно раҫлар: был төбәктә Ислам динен иң тәүгеләрҙән булып башҡорттар ҡабул иткән - Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең халҡыбыҙға ошо маҡсатта үҙенең өс сәхәбәһен ебәреүе лә быға дәлил. Исламға тиклем үк айырым милләт булып формалашҡан башҡорттар дини йолаларҙы ла үҙ йолалары йәнәшенә ҡуйған һәм ошо көнгәсә беҙ уларҙы бер-береһенән айырып ҡарамайбыҙ, улар йәнәш йәшәй, бергә атҡарыла. Исламға тиклем үк, йә Исламды ҡабул иткәс барлыҡҡа килгәндер башҡорттарҙа мөнәжәттәр ҙә. Сөнки Ҡөрьән-Кәрим доғаларын уҡығандан һуң, мәжлестәрҙе үҙ туған телебеҙҙәге мөнәжәттәр уҡып тамамлауҙың шаһиты булырға тура килде бит әле беҙҙең быуынға ла. Сибайҙа үткән сарала дүртенсе йыл рәттән мөнәжәт башҡарыуҙың классик өлгөһөн күрһәтеүсе Силәбе өлкәһе ағинәйҙәре лә раҫланы быны. "Башҡорттар элек-электән һәр мәжлестән һуң мөнәжәт әйткән, беҙ әле лә был йоланы ташламайбыҙ. Ауылдаштар аятҡа йыйылғанда һәр ваҡыт мөнәжәт әйтәбеҙ, тик уны әйтеү ҡайғылы урында ғына тыйыла. Бәндә мәрхүм булып ҡалһа, уның йыллығы үтмәйенсә, был өйҙә мөнәжәт һөйләмәйбеҙ", - тигәйне Сосновка районы Әлеш ауылының хөрмәтле ағинәйе Заза Дауытова.

Мөнәжәтте нәсихәт, бәйет менән бутаусыларға әйтер һүҙ шул. Мөнәжәттәрҙең йөкмәткеһе:

*Эй, Хоҙайым, бер Хоҙайым,*
*Һығынамын мин һиңә.*
*Эй, Хоҙайым, рәхмәтеңде*
*Насип иткел Һин миңә... -*

тип, Аллаға өндәшеү, Уға таяныу, Унан ярҙам һорау, Уның ғына һине һаҡлай алыуына ышаныу, Уның алдына барып баҫҡас, эшләгән эшең, ҡылған ҡылыҡтарың өсөн нимә тип яуап биреүең тураһында уйланыуҙарҙы үҙ эсенә ала. Мәҫәлән, Башҡорт дәүләт филармонияһының "Әс-сәләм" этник төркөмө репертуарында:

*Бисмиилләһи - эштәр башы,*
*Бисмилләһи - күңел хушы,*
*Бисмилләһи иман нуры,*
*Әйтә күргел һин уны, -*

тигән мөнәжәт бар. Йәштәр уны күңелдәрҙең иң төпкөлөнә үтеп инерлек итеп яңғырата.

Ә нәсихәттәрҙе беҙ мөнәжәттәргә ҡарағанда йышыраҡ ишетәбеҙ. Аҡмулла нәсихәттәрен, Ризаитдин Фәхретдин нәсихәттәрен беләбеҙ. Мөнәжәт текстары борондан килһә һәм уларҙың бик аҙ ғына өлгөләре һаҡланып ҡалһа, нәсихәттәрҙе хәҙерге заман шағирҙарының әҫәрҙәрен көйгә һалып башҡарырға ла була. Нәсихәт - ул кешегә ихлас күңелдән әйтелгән кәңәш һүҙе, изгелек ҡылырға һәм игелекле булырға әйҙәү, хаҡ юлға йүнәлтеү. Әйткәндәй, Хәйбулла районынан Мөхәмәт ағай Ҡаҙаҡбаев башҡарыуындағы нәсихәттәр - был жанрҙы башҡарыуҙың иң юғары өлгөһө ул. Шөкөр, хәҙер йәштәребеҙ араһында ла барлыҡҡа килде нәсихәтселәр. Уларҙы Аҡмулла көндәрендәге сараларҙа даими тыңлайбыҙ, ә Сибайҙағы мөнәжәтселәр конкурсында бына дүртенсе йыл рәттән Учалынан Сәмиғулла Лоҡманов исемле йәш кешенең үҙе ижад иткән нәсихәттәрен, шулай уҡ ағинәйҙәрҙең Гүзәл Ситдиҡова, Зөлфиә Ханнанова шиғырҙарын нәсихәт итеп башҡарыуҙарын тыңлап кинәнәбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Мөъмин мосолман ғилемде ҡайҙа юғалтты, шунан табып алырға тейеш", тиелгән Ҡөрьән-Кәримдә. Мөнәжәтебеҙ ҙә юғалған ғилемебеҙ иҫәбендә ине, шөкөр, халҡыбыҙҙың был аҫыл хазинаһы берәмтекләп йыйыла, танытыла, моңло сыңы күңелдәрҙе яулай. Тик бына уны республикабыҙҙың Мәҙәниәт министрлығында ла таныуҙары, мөнәжәт конкурсын күтәрмәләп алыуҙары кәрәк. Өмөт итәйек әле.**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

*МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ*



# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?

### Мунса эйәһе

Борон замандарҙан алып башҡорт халҡында төп музыка ҡоралы булып ҡурай һаналған. Скрипка, мандолина һәм гармунда уйнаусылар бөтөнләй аҙ булған. Был инде ҡурайҙа өйрәнеүҙең еңел түгеллеген, күптәрҙең ҡурайҙа уйнарға дәрте булып та, өйрәнә алмай, ташлап ҡуйыуҙарын иҫбатлай. Атайымдың һөйләүе буйынса, бер ҡурайсы (исемен хәтерләмәйем) үҙенең нисек итеп ҡурайҙа уйнарға өйрәнгәнен түбәндәгесә һөйләгән. Бер кисте ул ауылдағы оло йәштәрҙәге берҙән-бер ҡурайсы янына бара, уныһы үҙенең ҡурайҙа уйнарға өйрәнеүенең серен бик аңлайышлы итеп уға һөйләй, матур итеп ҡурай ҙа яһап бирә. Ҡурайсының өйрәтеүе буйынса, ошо ҡурайҙы алып, төндә, ауылдың берҙән-бер мунсаһына инеп, ишекте бикләй ҙә, ҡурайҙа быжҡылдатырға тотона. Тәүҙә, ғәҙәттәгесә, йүнләп ҡурай тауышы ла, рәтләп көй ҙә сыҡмай, шуға ҡарамаҫтан, ул быжҡылдатыуын дауам итә.

Бына бер ваҡыт ишектең элгесе үҙенән-үҙе салтлап асылып китә һәм мунсаға зәғиф кенә яҡтылыҡ сәсеп, ауылдың бер шаян ғына ҡыҙы килеп инә. Ул ҡурайсыға йылмайып бер ҡарай, ләкин бер ни өндәшмәй, ә ҡурайсы иһә бикле ишектең нисек итеп асылыуын, таныш булһа ла, бер ни тип өндәшмәгән ҡыҙҙы күреп, шөр ебәрә, ләкин ҡурайын быжҡылдатыуҙан туҡтамай. Ҡурайҙа ул ниндәй көй уйнағанын хәтерләмәй, ә ҡыҙ уға йылмайып бер ҡарай ҙа бейергә төшә. Ҡыҙ, ҡыланып, бик оҫта итеп бейей, уға һоҡланып ҡарап ултырған ҡурайсы көр тауыш менән оҫта һәм ярһып ҡурайҙа бейеү көйөн уйнауын хатта үҙе лә һиҙмәй. Бейеүсе арыһансы бейей ҙә, туҡталып ҡала. Ошо тынып торған арала ҡурайсы оҙон көйгә уйнап ҡарарға самалай, ләкин рәтле бер көй ҙә сығара алмай. Ҡыҙ байтаҡ ҡына мәғәнәле итеп ҡарап торғандан һуң, бер аҙ йылмайып, моңло тауыш менән оҙон көйгә йырлай башлай, ҡурайсы уға ҡушыла. Көр һәм моңло йыркөйө үҙенең ҡурайынан сығыуына егет хатта ышанмай. Башланған йыр йырланып бөтә, ҡыҙ баҫҡан урынында юҡ була, ә ҡурайсы оҫта итеп оҙон көйгә уйнауын дауам итә. Уйнап бөткәс, бейеү көйҙәрен яңынан самалай: бик матур килеп сыға.

Ҡурайҙа уйнарға бик еңел генә өйрәнеүенә ныҡ шатлана егет. Өйгә ҡайтып уйнап күрһәтеү теләге менән урынынан тора. Ишек янына килһә, ул, элеккесә, элеүле тора. Егет ныҡ ҡына ҡурҡа, мунсанан тиҙ генә сыға ла, артына ла әйләнеп ҡарамай, өйҙәренә һыпырта. Ул ҡайтып ингәндә өйҙә ут һүндерелгән, ә ата-әсәһе һәм туғандары йоҡлаған була.

Ҡурайҙы өйҙә лә уйнап ҡарау теләге һүнмәй һәм ул урындыҡҡа ултырып, бик оҫта итеп бейеү көйөнә лә, оҙон көйгә лә дәртләнеп уйнай башлай. Ошоға тиклем өйҙә ҡурайҙың тыз-мыз сыҡҡан тауышынан башҡаны ишетмәгән ата-әсәһе, моңло һәм дәртле ҡурай тауышына уянып, ҡурҡыуға төшә. Ә инде ошолай оҫта итеп ҡурайҙа уйнаусы кеше үҙҙәренең улдары икәнен белгәс, сикһеҙ шатланалар.

Ошо төндә мунсанан моңло ҡурай тауышы ишетелгәнен мунса хужаһы ла аңғарып, аптырашта ҡала. Йәш ҡурайсы ошонан башлап, оло йәштәге ҡурайсының көнләшеберәк йөрөүенә ҡарамаҫтан, унан да оҫтараҡ ҡурайсы булып китә.

**Рауил АСИҒОЛОВ.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Перспективаға эйә булыу

Маҡсаттарға өлгәшеү, ул ниндәй генә мөһим булмаһын, тормошобоҙға мәғәнә һәм йүнәлеш биреү асылын ҡаплап китергә йәки уларҙан артыҡ булырға тейеш түгел. Бына ни өсөн уларға беҙҙе киләсәккә алып китергә һәм хәҙерге менән йәшәргә ҡамасауларға юл ҡуйырға ярамай.

Маҡсат һайлағандан һәм ғәмәлдәр планы төҙөгәндән һуң, көсөргәнештән арынығыҙ, яңы Аңығыҙға һеҙҙе алға алып барырға рөхсәт итегеҙ, түҙемле генә мөмкин булғандың барыһын да эшләгеҙ, мөһим нәмәләргә тәү сиратта иғтибар бирегеҙ, киләсәктә нимә булыры өсөн ҡурҡмағыҙ һәм хафаланмағыҙ. Рухиәтле кешеләр әйтеүенсә, "Аллаһҡа тапшырығыҙ". Шулай итеп, һеҙ ысынбарлыҡтан төшөп ҡалып, һәр аҙымығыҙға йүнәлеш биреп торған Эске Нәсихәткә асылырһығыҙ. Эске Нәсихәт һәр саҡ ярҙамға килергә әҙер. Уға кәңәш һорап мөрәжәғәт итегеҙ һәм уның әйткәндәрен эшләгеҙ. Юҡһа, Аң һеҙҙең тормошоғоҙҙоң Ижади планына тулыһынса тап килгән дөрөҫ юлды һайлай алмай, ә үҙегеҙ теләгәнсә килеп сыҡмаһа, һеҙҙең күңелегеҙ ҡайтасаҡ.

План төҙөгәндә һәм маҡсаттар ҡуйғанда, уларҙы хәл итеү өсөн аҡыл, аңлы рәүештә уйлаған идеяларығыҙҙы күҙ алдына килтереп, Юғары андан һеҙҙе дөрөҫ һайлауға этәреүен һорағыҙ һәм нимә эшләргә кәрәклеген тойорһоғоҙ. Интуицияғыҙға ышанығыҙ. Интуиция хаталана алмай, сөнки уның сығанағы - Юғары Интеллект икәнен онотмағыҙ. Интуиция тауышын ишетеү менән ҡыбырлай башлағыҙ. Шул уҡ ваҡытта үҙгәрештәр һәм яңы күрһәтмәләр өсөн асыҡ булығыҙ. Шулай ҙа беренсе аҙымды үҙаллы эшләргә тейешһегеҙ. Сөнки нәсихәттәр алырға теләүегеҙҙе раҫламай тороп, уларҙы ала алмаясаҡһығыҙ. Әгәр теләгәнегеҙҙе алыу өсөн эске нәсихәт ишетергә теләһәгеҙ, аныҡ әйберҙәр хаҡында һорамағыҙ. Яңы машина, йорт йәки аҡса һорау урынына аҡыл һорағыҙ. Әгәр актер булырға теләһәгеҙ йәки етәксе, йә башҡа һөнәр эйәһе - дөрөҫ юл һайлау өсөн аҡыл һорағыҙ. Аҡыл теләгегеҙҙе тормошҡа ашырыу мөмкинлеге бирер. Көнөтөнө доға уҡыһағыҙ ҙа, хатта Ижади Интеллект та үҙегеҙҙең булдырыу ҡанунын емерә алмай. Аҡылға эйә булғас та, изге хыялдарығыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн был ҡанунды нисек үтәргә кәрәклеген ҡайҙан белерһегеҙ? Аҙым артынан аҙым эшләп алға барығыҙ, һығылмалы булығыҙ һәм үҙгәрештәргә әҙер торороғоҙ. Моғайын, башта ҡуйған маҡсатҡа өлгәшмәҫһегеҙ ҙә, шулай ҙа яҡшыраҡҡа, нимәнелер башҡарып сығыу тойғоһона һәм ҡыуанысҡа эйә булырһығыҙ. Интуицияғыҙға ышанып, үҙегеҙҙе мөйөшкә ҡыҫырыҡлау урынына, кәрәкле кешеләрҙе осратырһығыҙ, кәрәкле ваҡытта кәрәкле урында булып, сикһеҙ бәхет кисерерһегеҙ.

Тормош поезда барған кеүек. Икенсе урынға эләгер өсөн, бары тик кәрәкле поезға ултырып, барып еткәнсе унан төшмәҫкә кәрәк. Поезд туҡталыш һайын туҡтарға, урап барырға мөмкин. Әммә һеҙ унан төшөп ҡалмаһағыҙ, ваҡыты еткәс, һуңғы туҡталышҡа барып етәсәкһегеҙ. Әгәр туҡталыш һайын икенсе поезға күсеп ултыра башлаһаҡ, бер ваҡытта ла кәрәкле ергә барып етмәүебеҙ бар. Кәрәкле урынға барып етеү өсөн дүрт ғәмәлде башҡарарға кәрәк.

- Поездға ултырырға ҡарар итергә. Маҡсат һайларға.
- Оптималь маршрут һайларға. Дөрөҫ итеп план яҙырға.
- Билет алырға. Маҡсатҡа өлгәшеү өсөн түләргә әҙер булырға.
- Поезға ултырырға. Эшләй башларға.

Һеҙҙең поезығыҙ станцияла көтә. Ултырырға ваҡыт!



## 19 СЕНТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.50 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15, 03.50 "Мужское/Женское" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.30 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 00.25 "Про любовь" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Медсестра". 9-я и 10-я серии. Драматический сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
10.00 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Карина красная". 1-2-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.00 "Специальный корреспондент". "Война за воду" (16+).
01.20 "Каменская". Сериал (16+).
03.20 "Семейный детектив". Сериал (12+).
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Учим башкирский язык".**
**10.15 "Городок АЮЯ" (0+).**
**10.30 "Борсаҡ" (0+).**
**10.45 "Медовая страна".**
**11.00 "Всемирные игры кочевников. От традиций к современности" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Перекличка".**
**15.15 "Альбина".**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**16.00 "У дачи" (12+).**
**16.45 "Следопыт" (12+).**
**17.15 "Квадратный метр", "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Бай бакса" (12+).**
**18.55 Хоккей. ВХЛ.**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**23.00 "Госфорд парк". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 "Интервью" (12+).**

## 20 СЕНТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Кубок мира по хоккею 2016. Сборная России - сборная Северной Америки. Прямой эфир.
07.10 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Мужское/Женское" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 02.30, 03.05 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 00.25 "Про любовь" (16+).
17.00, 01.30 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Медсестра". 11-я и 12-я, заключительная, серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
03.00 Новости.
03.15 "Модный приговор".
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
10.00 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Карина красная". 3-я и 4-я серии. Драматический сериал (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.00 "Каменская". Детективный сериал (16+).
03.00 "Семейный детектив". Сериал (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).
10.15 "Зеркальце" (0+).
10.30, 15.30 "Гора новостей".
10.45 "Чудопад". Сериал (16+).
11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.
11.45, 18.45, 17.45 "Интервью" (12+).
12.00 "Счастливый час".
13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).
14.00 "Тәмле" (12+).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
15.00 "Фанташ" (0+).
15.15 "Бауырһаҡ" (0+).
15.45 "Красная кнопка" (16+).
16.45 "Аксаков и Башкирия". Телевизионный фильм (12+).
18.00 "Квадратный метр", "Полезные новости" (12+).
18.15 "Криминальный спектр" (16+).
18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Сочи" (Сочи).
22.00 "Уфимское "Времечко". Народные новости.
23.00 "Улицы крови". Худ. фильм (16+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
01.15 "Интервью" (12+).
01.30 Т.Миннуллин. "Счастье с неба" (12+).

## 21 СЕНТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Мужское/Женское" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 02.35, 03.05 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 00.35 "Про любовь". Ток-шоу (16+).
17.00, 01.40 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Новая жена". Мелодрама (12+).
23.45 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.20 Ночные новости.
03.00 Новости.
03.30 "Модный приговор".
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.35 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". " Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут" (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Карина красная". 5-6-я серии. Сериал (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.00 "Каменская". Сериал (16+).
03.00 "Семейный детектив". Сериал (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Чудопад". Сериал (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 18.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.45 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.45 "Моя планета - Башкортостан" (12+).**
**16.30 "Выборы-2016". Теледебаты (16+).**
**17.15 "Квадратный метр", "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00 "Ай кызы-2". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.30 "Автограф" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**22.00 "Власть отвечает" (12+).**
**23.00 "Родня". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Ф.Буляков. "Любишь - не любишь?" (12+).**

## 22 СЕНТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Мужское/Женское" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 23.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 02.10, 03.05 "Про любовь" (16+).
17.00, 03.20 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Желание". Худ. фильм (16+).
24.00 Кубок мира по хоккею-2016. Сборная России - сборная Финляндии. Прямой эфир.
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут".
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Карина красная". 7-8, заключительная, серии. Сериал (16+).
23.00 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
00.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
03.00 "Семейный детектив". Сериал (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 15.45 "Квадратный метр". "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Чудопад". Сериал (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Борсаҡ" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Мечты" (12+).**
**17.15, 18.00 "Квадратный метр", "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Слован" (Братислава).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Громобой". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 А.Атнабаев. "Близнецы" (12+).**

## 23 СЕНТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Мужское/Женское" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Про любовь" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу.
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Новый сезон (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 "Духless". Драма (18+).
02.15 "Король Артур". Приключения (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
10.00 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
12.00, 01.10 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.25 "Вести-Башкортостан".
17.45 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт (16+).
23.05 "Мама, я женюсь". Мелодрама (12+).
03.15 "Семейный детектив". Сериал (12+).
04.15 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Борсаҡ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Чудопад". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 18.45, 01.30 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Пятое время года - любовь" (6+).**
**12.30 "Аксакал" (12+).**
**13.15 "Все песни о главном" (12+).**
**14.00 Дни Юмабая Исянбаева (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Живая история: Лунное шоу. Правда или вымысел" (6+).**
**16.45 "Всемирные игры кочевников. От традиций к современности" (12+).**
**17.15 "Квадратный метр", "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Ай кызы-2". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Башҡорт йыры" (12+).**
**20.45 "Путник без тропы" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (6+).**
**23.00 "Откройте, полиция-2". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 "Бесталанная" (12+).**

## 24 СЕНТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

04.35, 06.10 "Золотой теленок". Комедия.
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Зиновий Гердт. "Я больше никогда не буду". К 100-летию актера (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Теория заговора" (16+).
14.00 "На 10 лет моложе" (16+).
14.50 Эдвард Радзинский. "Смерть Сталина. Другая версия" (12+).
17.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Голос". Специальный выпуск (12+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.55 "Духlecс-2". Драма (16+).
01.00 "Золотой теленок". Худ. фильм.
04.00 Кубок мира по хоккею-2016. Полуфинал. Прямой эфир.

### РОССИЯ 1

04.50 "Дорога, ведущая к счастью". Худ. фильм (12+).
06.45 "Диалоги о животных".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Сто к одному".
10.05 "Личное. Иван Краско" (12+).
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.30 "Смеяться разрешается" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Ты заплатишь за все". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Любовь как стихийное бедствие". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.55 "Девушка в приличную семью". Мелодрама (12+).
03.00 "Марш Турецкого-3". Детективный сериал (16+).

### БСТ

**07.00, 12.30, 19.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Тристан и Изольда" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**10.15 "7 чудес Башкортостана" (12+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Следопы" (12+).**
**12.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 "Чак-чак". Худ. фильм (12+).**
**19.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "На берегу Иссык-Куля". "Всемирные игры кочевников" (12+).**
**21.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.3 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Киберспорт" (16+).**
**01.45 "Личность" (12+).**

## 25 СЕНТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.20 "Доживем до понедельника". Худ. фильм.
08.20 "Здоровье" (16+).
09.30 "Часовой" (12+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым" (12+).
10.30 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Открытие Китая".
12.50 "Елена Сафонова. Цвет зимней вишни" (12+).
13.55 "ДОстояние РЕспублики: Лариса Долина".
16.00 "Ищейка". Детективный сериал (12+).
18.00 "Точь-в-точь". Новый сезон (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Подмосковные вечера" (16+).
23.20 "Дмитрий Шостакович. "Я оставляю сердце вам в залог".
00.25 "Мелинда и Мелинда". Худ. фильм (16+).
02.20 "Офисное пространство". Худ. фильм (16+).
04.00 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00 "Своя чужая сестра". Мелодрама (12+).
07.00 "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 Большой праздничный концерт.
14.00 "Вести".
14.20 "Останьтесь навсегда". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Удивительные люди".
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Севморпуть... Дорога во льдах". Фильм Михаила Кожухова (12+).
02.25 "Без следа". Детективный сериал (12+).
03.40 "Смехопанорама".
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Лев Макс" (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай бакса" (12+).**
**09.30 "Мечты" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (12+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Дорога к храму".**
**16.15 Хоккей. КХЛ.**
**19.15 К Международному Дню глухих. "В фокусе", "Говорящий человек".**
**20.00 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**20.15 "История признания" (12+).**
**20.30 "Байыҡ-2016" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Красная кнопка" (16+).**
**23.00 "Вечер.com" (12+).**
**23.45 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.45 "Универсальный солдат-3: Возрождение". Худ. фильм (18+).**
**02.30 "Их нравы".**
**03.00 "Закон и порядок". Сериал (18+).**
**04.00 "Врачебная тайна". Сериал (16+).**

✔ *Икенсе осорҙа юлаевсылар һөжүмселәре иҫәптәге айырманы 4-кә еткерҙе: 4:0! Шулай ҙа "Адмирал"дар бирешергә теләмәне - контратакаға күтәрелеп, иҫәп айырмаһын икегә ҡыҫҡартты: 4:2.*



*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# БЕҘҘЕҢ ШАЯНДАР - ҠАҘАҒСТАНДА

**9 сентябрҙә Ҡаҙағстандың баш ҡалаһында шаяндар һәм тапҡырҙар бәйгеһе үтте. Унда Башҡорт асыҡ КВН лигаһының йыйылма командаһы махсус бүләккә лайыҡ булды. Делегация туғандаш халыҡтың мәҙәниәте һәм көнкүреше менән танышты, шулай уҡ ҙур күңел асыу программаһы әҙерләнгәйне.**



"Башҡорт асыҡ лигаһы Ҡаҙағстандың КВН союзына йылы ҡабул иткәндәре, шулай уҡ Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығына фестивалдә ҡатнашыу мөмкинлеге биргәндәре өсөн рәхмәт белдерә, - тип хәбәр итте Башҡорт асыҡ КВН лигаһы идараһы рәйесе Урал Кәримов. - Барыһы ла юғары кимәлдә ойошторолғайны. Унда йәштәр ҙә башҡорттар һәм Башҡортостан, дөйөм тарихыбыҙ һәм традицияларыбыҙ хаҡында яҡшы белә. Киләсәктә башҡорт һәм ҡаҙаҡ КВН лигалары араһында дуҫлыҡты үҫтерергә ниәтләйбеҙ".

Кубокта Ҡаҙағстандан 15 команда ҡатнашты. Сығыштар Астананың 1700 тамашасы һыйҙырышлы ҙур концерт майҙансыҡтарының береһендә ойошторолдо. Уйын Ҡаҙағстандың беренсе юлдаш телевидениеһында күрһәтелә.

# ФАТИХАЛЫ ЭШ БУЛҺЫН!

**Ҡоролтай Башҡарма комитеты советы ултырышында республиканың 100 йыллығын байрам итеү буйынса саралар планы тикшерелде.**

Башҡортостан автономияһы ойошторолоуға 100 йыл тулыу уңайынан Өфөлә "Каруанһарай" тәҙергә тәҡдим ителде. Бөтөн донъя башҡорттары Ҡоролтайы Башҡарма комитеты ошо башланғыс менән сығыш яһаны.

Ҡоролтай рәйесе Әмир Ишемғолов тарих, әҙәбиәт һәм сәнғәт буйынса иҫтәлекле датаға бағышланған республика гранттарын булдырыу мөһимлеген билдәләне. Был идеяны Башҡорт дәүләт университетының Башҡортостан тарихы, археология һәм этнология кафедраһы мөдире Марат Ҡолшәрипов та хупланы. Ул был датаға арнап халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция ойошторорға тәҡдим итте. Саралар Башҡортостанда ғына үткәрелергә тейеш түгел, тип өҫтәне тележурналист Салауат Хәмиҙуллин. Юғиһә, Силәбе, Ҡурған һәм башҡа өлкәләрҙә тыуып үҫкән бик күп сәйәси эшмәкәрҙәр иғтибарҙан ситтә ҡаласаҡ. Тарихсылар фекеренсә, танылған шәхестәргә мемориаль таҡталар, һәйкәлдәр ҡуйырға кәрәк. Ғилми-ғәмәли конференциялар үткәргәндән һуң, Башҡортостан автономияһы барлыҡҡа килеү менән бәйле урындар буйлап автоуҙыш ойоштороға мөмкин. Уны республиканың тәүге баш ҡалаһынан - Баймаҡ районының Темәс ауылынан башлау зарур.

Республиканың Китап палатаһы директоры Азат Ярмуллин Башҡортостан дәүләтселегенең үҫеше тураһында энциклопедия сығарыу тәҡдиме менән сығыш яһаны. Шулай уҡ рус, башҡорт һәм инглиз телдәрендә "Башҡортостан Республикаһы. Һүрәтле энциклопедия" баҫмаһын сығарыу тәҡдиме индерелде. Республика буйлап 100 туристик маршрут булдырыу тәҡдиме яңғыраны. Быңдай башланғыс менән Бөтөн Рәсәй башҡорт йәштәре Ҡоролтайы рәйесе, "Арғымаҡ" этно-төркөмө лидеры Ринат Рамазанов сығыш яһаны. Программаға музейҙарҙы, изге урындарҙы, тәбиғәт ҡомартҡыларын һәм танылған шәхестәргә бәйле урындарҙы индерергә мөмкин, тип билдәләнде. Торатау итәгендә "Ырыуҙар ташы"н ҡуйыу, башҡорт халыҡ эпостары геройҙары аллеяһын төҙөү, башҡорт милли ризыҡтары объекттарын асыу мәсьәләһе лә бик мөһим һәм улар ҙа 100 йыллыҡҡа арналған 100 объект исемлегенә инергә тейеш, тип билдәләнде.

Бөтөн донъя башҡорттары Ҡоролтайы Башҡарма комитетының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, ошо Башҡарма комитет советында тикшерелгән план Башҡортостан Хөкүмәтенә тапшырылған.

# БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕ - ТНТ-ЛА

**Өфө ҡыҙы Нәркәс Юлдашева ТНТ каналының "Бейеүҙәр" проектында әсәһе Гүҙәл Исламғолова-Юлдашева ҡуйған "Хан ҡыҙы" бейеүен башҡарҙы. Уға атаһы, Башҡортостандың халыҡ артисы, танылған ҡурайсы Роберт Юлдашев ҡушылып уйнаны.**




- Ошо проект ойошторолғас та унда ҡатнашыу - башҡорт мәҙәниәтенең матурлығын һәм байлығын күрһәтеү теләге тыуҙы. Тап милли бейеү менән сығыш яһарға теләнем, - тип һөйләне Нәркәс. - Проектты ойоштороусылар әйтеүенсә, бик үҙенсәлекле килеп сыҡты.

Жюри составында илебеҙҙең билдәле хореографтары Егор Дружинин, Мигель, актер Сергей Светлаков һәм "Шаг вперед" фильмын ҡуйыусы Филипп Пакман эшләй.

# АБРУЙЛЫ КОНКУРС КӨТӨЛӘ

**Бөтә Рәсәй телевизион конкурсы еңеүселәре Өфөлә иғлан ителә. Абруйлы телеконкурстың финал этабы Башҡортостанда тәүгә уҙғарыла. Ойоштороусыһы - Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиокомпанияһы филиалы - "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы. Финалды Өфөлә уҙғарыуҙы республика Башлығы Рөстәм Хәмитов хупланы.**

Баш ҡалаға 83 төбәктән журналистар килеүе көтөлә. Был юлы конкурсҡа 167 телекомпаниянан 500-ҙән ашыу эш ҡабул ителгән. Шуларҙың 300-ҙән ашыуы - "Мәғариф һәм күңел асыу тапшырыуҙары", 211-е - "Мәғлүмәт тапшырыуҙары" номинацияһында. Иң әүҙем ҡатнашыусылар - Омск һәм Өфө ҡалаларынан. Еңеүселәргә 21 награда тапшырыла. Быйыл "Башҡортостан" ДТРК-һы конкурсҡа бик күп эштәр ебәргән. "ТЭФИ-төбәк" наградаһына дәғүә итеүселәр араһында "Мәҙәниәт" каналы командаһы ла бар. Статуэтканың авторы - скульптор Эрнст Неизвестный. Бүләкләү тантанаһына Өфөгә кинорежиссер Андрей Кончаловский һәм шағир Андрей Дементьев саҡырылған.

"ТЭФИ-төбәк" Бөтә Рәсәй телевизион конкурсы ойошторолоуға 15 йыл тулыуға арналған сараларҙа урындағы власть органдары, федераль каналдарҙың вәкилдәре - Рәсәй телевидениеһы академияһы ағзалары, топ-менеджерҙар, алып барыусылар ҡатнаша тип көтөлә. Ҡатнашыусылар һәм ҡунаҡтар өсөн тренингтар, семинарҙар, түңәрәк өҫтәлдәр, презентациялар, мәҙәни-күңел асыу программалары ҡаралған.

# УҠЫУ ЙОРТТАРЫ БАҺАЛАНДЫ

**Башҡортостандың юғары уҡыу йорттары "Социаль навигатор" проекты сиктәрендә баһаланды.**

Рәсәй вуздарының уҡырға ингән абитуриенттарҙың әҙерлек кимәле буйынса рейтингын Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы, Йәмәғәт палатаһы ярҙамында "Социаль навигатор" проекты менән хеҙмәттәшлектә Юғары иҡтисад мәктәбе милли тикшеренеү университетының эшсе төркөмө төҙөгән.Илдең 425 уҡыу йорто баһаланған. Башҡортостан вуздары араһында бюджет нигеҙендә уҡырға инеүселәрҙең Берҙәм дәүләт имтиханының уртаса балының иң юғары күрһәткесе Башҡорт дәүләт медицина университетында - 75,5 балл. Икенсе урында - Өфө дәүләт нефть техник университеты (73,1). Быйыл әлеге уҡыу йортона олимпиадаларҙа еңеү яулаған 13 кеше уҡырға ингән. Былтырғы менән сағыштырғанда, Өфө дәүләт авиация техник университетында БДИ-ның уртаса балы 2,1 балға артҡан, һөҙөмтәлә 66,3 балл. Шулай уҡ быйыл ошо вуз - бюджет урындарына ҡабул ителгән абитуриенттар һаны буйынса төбәктә лидер (1392). Башҡорт дәүләт университетында - 67,2, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ла 64,9 балл.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 19 (17) дүшәмбе | 5:28 | 6:58 | 13:30 | 17:50 | 19:20 | 21:08 |
| 20 (18) шишәмбе | 5:30 | 7:00 | 13:30 | 17:47 | 19:17 | 21:05 |
| 21 (19) шаршамбы | 5:32 | 7:02 | 13:30 | 17:45 | 19:15 | 21:03 |
| 22 (20) кесе йома | 5:33 | 7:03 | 13:30 | 17:42 | 19:30 | 21:00 |
| 23 (21) йома | 5:35 | 7:05 | 13:30 | 17:40 | 19:28 | 20:58 |
| 24 (22) шәмбе | 5:37 | 7:07 | 13:30 | 17:37 | 19:25 | 20:55 |
| 25 (23) йәкшәмбе | 5:39 | 7:09 | 13:30 | 17:35 | 19:22 | 20:52 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ХОККЕЙ*

# ЕҢЕҮҘӘР ӨМӨТ УЯТА

**Өфөнөң "Салауат Юлаев" хоккей командаһы, ниһайәт, еңеүгә өлгәште! Үҙ боҙонда биш еңелеүҙән һуң, юлаевсылар Владивостоктың "Адмирал"ы менән уйында инде онотола башлаған еңеү ҡыуанысын яңынан татытты.**

Алыҫ Көнсығыштан килгән адмиралдарҙы юлаевсылар субординация ҡағиҙәләрен "онотоп" ҡаршы алды - тәүге осорҙа уҡ һөжүмде уңышлы тамамланы. Андреас Энгвист, үҙенең яҡташы Линус Умарк ярҙамы менән иҫәпте асыуы булды, икенсе осорҙа юлаевсылар һөжүмселәре иҫәптәге айырманы 4-кә еткерҙе: 4:0! Шулай ҙа "Адмирал"дар биреше ргә теләмәне - контратакаға күтәрелеп, иҫәп айырмаһын икегә ҡыҫҡартты: 4:2. Ләкин Өфө хоккейсылары уйындың яҙмышын хәл итеп өлгөргәйне шул - ҡунаҡтарға ике мәрәй менән мөрхәтһенергә тура килде. Был еңеү менән юлаевсылар күгендә ҡуйырған болоттар тарала бирҙе - киләсәккә өмөт саткылары - еңеү ҡояшы баҙланы. Алда "Әбейҙәр сыуағы" көтөлә шикелле...

Хәҙер Игорь Захаркин тәрбиәләнеүселәре 17 сентябрҙә үтәсәк осрашыуға әҙерләнә. Тәжрибәле тренер команданы ниндәй юлдар менән еңелеүҙәр көрсөгөнән алып сығыр - көтәйек. Ниндәйҙер аҙымдар яһала шикелле - 14 сентябрҙә клуб етәкселеге һөжүмсе Артем Черновты "баш тартыу исемлеге"нә индерҙе бит. Тимәк, етәкселек үҙ һығымталарын яһаған.

Киләһе осрашыуҙы юлаевсылар күршеләрҙә үткәрә - Силәбенең "Трактор" командаһына ҡаршы уйнаясаҡ.

**Байым РӘХИМЙӘНОВ.**

✔ *Мин Алланан байлыҡ һораным - бәхетле булыр өсөн, һуңынан фәҡирлек һораным - аҡылға эйә булыр өсөн.*

*(Испан халыҡ мәҡәле).*



ШӘҺИТ ХОҘАЙБИРҘИН ИСЕМЕНДӘГЕ ПРЕМИЯҒА ТӘҠДИМ ИТЕЛДЕ

# ХАЛЫҠ СӘСӘНЕН...

## халыҡҡа танытты

**Башҡорт әҙәбиәтендә һәм журналистикаһында исеме күптән билдәле ҡәләм оҫтаһы, шағир, ғалим Нияз Сәлимовты Ғафури районында белмәгән кеше юҡтыр.**

Район гәзитендә эшләгәндә ижади көстәрҙе туплаған "Мағаш тауышы" әҙәби берекмәһенен ойоштороп, ул бик сауаплы эш атҡарҙы - шөкөр, был ойошма бөгөн дә һәйбәт кенә эшләп килә. Ә инде 1991 йылда Нияз Сәлимов үҙ фекерҙәштәре менән "Табын" исемле үҙаллы башҡорт гәзитен булдырыуға өлгәшеп, райондың рухи-мәҙәни тормошон тағы ла байытып ебәрҙе. Был изге эштәрҙең барыһы ла күпме көс-ҡеүәт талап иткәнен ул үҙе генә беләләр.

"Йәшлек", "Башҡортостан" гәзиттәренә етәкселек иткән йылдарҙа Нияз Сәлимов яңы махсус биттәр, рубрикалар индереп, был баҫмаларҙың йөкмәткеһен шаҡтай байытыуға, уларҙы уҡымлыраҡ итеүгә ҙур өлөш индерҙе.Республика баҫмаларында ("Башҡортостан", "Кызыл таң", "Йәшлек", "Киске Өфө" гәзиттәрендә) һуңғы осорҙа Нияз Сәлимовтың байтаҡ мәҡәләһе донъя күрҙе - уларҙың барыһы ла туған тел, милли мәҙәниәт, рухи тәрбиә мәсьәләләренә арналған. Автор тарихи сығанаҡтарға таянып, бик мөһим проблемаларҙы күтәрә һәм йәмәғәтселеге ошолар хаҡында етди уйланырға саҡыра. Ә инде данлыҡлы хәрби етәксе һәм дәүләт эшмәкәре Муса Мортазин тураһында "Йәшлек" гәзитенең дүрт һанында донъя күргән күләмле тарихи очеркты бөгөнгө башҡорт публицистикаһының аҫыл бер өлгөһө, тип нарыҡларға мөмкин.

Күптән түгел донъя күргән "Халыҡ сәсәне Вәлиулла Ҡоломбәтов" китабы менән дә Нияз Сәлимов райондаштарына матур бүләк эшләне. Быға тиклем был һүҙ оҫтаһы, мәғрифәтсе тураһында күптәр бөтөнләй белмәй ине, ә хәҙер уның архивта ятҡан шиғыр, йыр, ҡобайыр һәм нәсихәттәре халыҡҡа барып етте. Был йыйынтыҡ мәктәп уҡыусылары, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары өсөн дә ҡиммәтле әсбап, тип әйтергә мөмкин.

Танылған журналист, мөхәррир, яҙыусы Нияз Сәлимовтың шәһәрәтле премияға тәҡдим ителеүен беҙ, ғафуриҙар, ихлас хуплайбыҙ һәм ул мотлаҡ лауреат булып танылыр, тип ышанабыҙ.

**Фәүзиә ҠОТЛОГИЛДИНА,**
**Ғафури районы Родина ауылы старостаһы.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иглан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылған уҡыусыларыбыҙҙың тәҡдимдәрен һәр һанда күрһәтә киләбеҙ. Бөтәһе лә уҡырға тейешле китаптар исемлеге йәйлап үҫә бара. Әлегә ул бына нindәй:**

1. **"Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы**
2. **М. Аҡмулланың шиғырҙар йыйынтығы**
3. **Ҡол Ғәли "Йософ ҡиссаһы"**
4. **Ризаитдин Фәхретдин "Нәсихәттәр"**
5. **Ғайса Хөсәйенов "Тормош" һәм "Донъя" парсалар китаптары**
6. **Шәйехзада Бабич, "Ғазазил" поэмаһы, шиғырҙар**
7. **Зәйнәб Биишева "Кәмһетелгәндәр" трилогияһы**
8. **Һәҙиә Дәүләтшина "Айбикә" повесы**
9. **Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"**
10. **Һәҙиә Дәүләтшина "Ырғыҙ" романы**
11. **Мостай Кәрим, "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесы һәм поэзияһы.**
12. **М. Ғафури "Фәҡирлектә үткән тереклек" хикәйәһе**
13. **М. Ғафури "Шағирҙың алтын приискыһында" повесы**
14. **Ғ. Хәйри "Боролош" романы**

Өфө ҡалаһы 136-сы Башҡорт лицейы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гөлсәсәк Ғәзизуллина "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә Әхиәр Хәкимовтың "Өйөрмә" романын индерергә тәҡдим итте. "Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Әхиәр Хәкимдең бик күп әҫәрҙәрен тәҡдим итергә булыр ине лә, әммә һәр быуын кешеһенә уҡыуы ҡыҙыҡлы, фәһемле булған "Өйөрмә" романын исемлеккә тәү сиратта индерергә кәрәк. Сөнки киләсәктә беҙ башҡорт халҡының тарихи үткәндәре, милләттең бөтә ил менән бергә кисергән михнәттәре, фажиғәле яҙмышҡа дусар ителеүе, тарихи ысынбарлыҡты хәтерҙән сығармаҫҡа тейеш. "Өйөрмә" романы бер быуат элек барған ваҡиғалар шауҡымында башҡорт алпауыттарының, интеллигенцияның яҙмышын сағылдыра. Юлындағы бөтә нәмәне юҡ иткән ғәрәсәт кеүек кешеләрҙең тормошон аҫтын өҫкә әйләндергән репрессия йылдарында әҙәбиәт, мәҙәниәт өлкәһендә эшләүселәрҙең ысынбарлыҡта нисек йәшәүен дә күрәбеҙ. Романдың төп геройы Искәндәр Мораҙымовты ла был шауҡым урап үтмәй, ләкин ул үҙенән һуң был тормошта эҙ ҡалдырып китә: быуынды дауам итерҙәй улы Камил һәм үлемһеҙ әҫәрҙәре бар. Йылдар үтеү менән ғәҙелһеҙлекте дөрөҫләк енеүен, ялған эш фашланыуын күрһәтергә теләй беҙгә автор. Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә, тип юҡҡа ғына әйтелмәгән бит ул. Әхиәр Хәкимов тап бына шул турала яҙа, киләсәк быуындар был китапты уҡып фәһем алһын, ул заманда йәшәгән кешеләр кеүек ялған һүҙҙәргә ышанмаһын, бер-береһенә битараф булмаһын, шауҡым йәйғайына бармаһын, тигән маҡсаттары бар әҙиптең. Шуның өсөн дә "Өйөрмә" романы "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһының исемлегендә тәүгеләр рәтендә торорға тейеш..."

**Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына һеҙ ҙә ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ! Аңлағанһығыҙҙыр, был исемлек башында барыбер ҙә әҙәбиәтебеҙ классиктарының, аҡһаҡалдарының әҫәрҙәре урын алырға тейеш. Мәктәптә уҡыған ул әҫәрҙәр барыбер ҙә күңелегеҙҙә һаҡланалыр - шуларҙы барлайыҡ тәүҙә, ә бөгөнгө быуын яҙыусыларының әҫәрҙәре тураһында саҡ ҡына һуңыраҡ, исемлек аҙағына етә башлағас һөйләшербеҙ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠОШ ЕМГӘ АЛДАНА,

## кеше һүҙгә алдана

Дошман алыҫ тип ҡыҫҡырып һөйләмә: ҡолағына салыныр ҙа, күңеленә алыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр ҙә һин ни менән шөғөлләнгәнеңде аңлата алмайһың икән, тимәк, һинең эшең бер тинлек тә тормай.

**(Эрвин Шредингер).**

Үҙгәртә алмайһың икән, ул нәмә тураһында онотоуың хәйерле.

**(Югослав халыҡ мәҡәле).**

Мин Алланан байлыҡ һораным - бәхетле булыр өсөн, һуңынан фәҡирлек һораным - аҡылға эйә булыр өсөн.

**(Испан халыҡ мәҡәле).**

Ғәҙаптарҙан ҡотолор өсөн... уларҙы аҙағына тиклем кисереп бөтөрөргә кәрәк.

**(Марсель Пруст).**

Юғарыла барыһын да хәл итеп бөткәс, был эшкә тырышлыҡ һалыу кәрәкме икән?

**(Бер ялҡауҙың әйткәне).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер йәш кеше Аллаға доға ҡыла һәм Унан аҡыл, белем, тормош юлын мөхәббәт менән яҡтыртыуын, йөрәген ышаныс менән тултырып, хыялын тормошҡа ашырыу өсөн көс-ҡеүәт биреүен ялбара. Уның доғалары бик ихлас була, шуға ла уны Алла ишетә һәм был йәш кешегә бик күп кәрәкле уҡытыусылар ебәрә, уға китаптар аша белемгә юл аса. Бына уның яҡты хыялы тормошҡа ашыр мәл етә. Шул саҡта Алла был кешегә оло аҡыл эйәһе булған Уҡытыусы ебәрә. Йәш кеше Уҡытыусының бөйөклөгөнә, белеменә һоҡланып, үҙенең хыялының матурлығы тураһында онота. Ул Уҡытыусыға Аллаға табынғандай табына, ҡалған ғүмерен уға хеҙмәт итеүгә бағышлай. Ғүмер ахырына етеп, был донъя менән хушлашҡан мәлдә ул үҙенең тормошҡа ашмаған хыялы тураһында иҫкә төшөрә һәм Аллаға өндәшә:**

**- Йә, Хоҙай, ниндәй ҙур гонаһ эшләнем мин һинең алда, ниңә мин үҙ хыялыма өлгәшә алманым?**

**Шунда Алла кешегә бар тормошон күҙ алдына баҫтыра һәм әйтә:**

**- Һин барыһын да дөрөҫ эшләнең, тик бер нәмәлә генә яңылыштың: һиңә ебәрелгән аҡыл - ул Уҡытыусы, тип буталдың. Уҡытыусы һине донъяуи аҡылға өйрәтер өсөн ебәрелгәйне, ә һин уға табына һәм хеҙмәт итә башланың да, үҙ хыялың тураһында оноттоң.**

**Шунда кешенең күҙҙәренән йәш бәреп сыға - хатаһын төҙәтергә ваҡыты ҡалмаған була шул инде уның..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 16 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4417
Заказ - 1738/09